ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-3 март - апрель (буранай - алағарай) 2025

№ 12 (1156)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тормошобоҙҙо...**

дәүләт закондары көйләй



6

**Ҡурайсы профессор**



8-9

**Яҡшылыҡ йәшәгән ерҙә...**

тормош усағы һүнмәҫ



11

**Имеш-мимештәр нисек тыуа,**

йәғни, Һыуһылыуҙар тураһында



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 2 апрелдән 13-нә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 872 һум 46 тингә яҙыла алаһығыҙ. Ошо ун көнлөктә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға (һүрәттә) лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Әйҙәгеҙ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

**Республикала, илдә һәм тотош донъяла әллә күпме гәзит-журнал нәшер ителә. Төрлө өлкәне яҡтыртҡан, бәләкәй һәм ҙур күләмдә баҫылған, яңы ғына сыға башлаған һәм тиҫтәләгән йылдар донъя күреп килгән ваҡытлы матбуғат - уларҙың һәр береһе үҙ уҡыусыһын таба, үҙ аудиторияһын булдырыуға өлгәшә.**

# АБРУЙЛЫ ГӘЗИТТЕ...

## абруйлы уҡыусы уҡый тип беләм



Беҙҙең төбәктә лә ҡағыҙға баҫылған гәзит һәм журналдар булған, бар һәм буласаҡ, тип ышанам. Ташҡа баҫылған һүҙ бер ҡасан да үҙ әһәмиәтен юғалтмай, юҡҡа сыҡмай. Ошо күптөрлөлөк араһында нәҡ һинең күңеленә яҡкан, һинең донъяуи һорауҙарыңа һәм талаптарыңа яуап биргән, уйландырған, сәмләндергән, осҡон уятҡан, тормош тәмен аңлап йәшәргә булышлыҡ иткән баҫманы табып алыуы үҙе бер бәхеттер ул.

Был йәһәттән мин үҙемде, үндым, тип әйтә алам. Бына әллә күпме йылдар "Киске Өфө" гәзитен яратып уҡып барам. Ошо ваҡыт арауығында ул олпатланды, үҙ бәҫен һәм баһаһын белгән, оло быуынға ла, йәштәргә лә берҙәй яҡын һәм аңлайышлы булған баҫмаға әйләнде.

Минеңсә, һәр бер гәзит үҙ уҡыусыһына ниндәйҙер таяныс тойғоһо бирергә тейеш. "Киске Өфө" нәҡ шундай гәзит - ул тормошто бөтә яҡлап та тасуири яҡтырта, өмөт һәм көс өҫтәрлек мәҡәләләр бирә үҙ биттәрендә. Һаулыҡҡа бәйле ниндәйҙер кәңәш кәрәкме, донъя шаңдауы тураһында төплө фекер, тарих тураһында тулы мәғлүмәт кәрәк булдымы - "Киске Өфө" биттәренән барыһын да табырға була.

Бындай мәртәбәле, арбуйлы гәзитте ошондай уҡ абруйлы уҡыусылар уҡыйҙыр, тип уйлайым. Һәр бер һүҙҙең ҡәҙерен белгән, буш хәбәр һөйләүгә бирелмәгән, барлыҡ мәҡәләләре лә берҙәй кәрәк һәм терәк булған гәзиттең тағы ла оҙаҡ йылдар беҙҙе, уҡыусыларын, һөйөндөрөп йәшәп килеренә ышанам.

**Эльза ҺӨЙӨНДӨКОВА.**
**Иглин районы.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ОҘАЙТЫЛДЫ!



**Әсәлек капиталы программаһы 2030 йылға тиклем оҙайтылды. Рәсәйҙең Дәүләт Думаһы депутаттары икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа тейешле закон ҡабул итте.**

Бынан алдараҡ Рәсәй Президенты Владимир Путин Әсәлек капиталы программаһын 2030 йылдың 31 декабренә тиклем оҙайтыу тәҡдиме менән сығыш яһағайны. "Беҙҙә Әсәлек капиталы программаһы 2026 йыл башына тиклем ғәмәлдә. Уны кәмендә 2030 йылғаса оҙайтырға тәҡдим итәм", - тине Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһағанда. Башҡортостанда йәшәүселәргә ғаилә капиталына эйә булғандар өсөн мөһим үҙгәрештәр хаҡында ла хәбәр иткәйнеләр. Мәҫәлән, 2025 йылдың 1 мартынан Әсәлек капиталы аҡсаһын шәхси йорт һалыуға йүнәлтеү хоҡуғын күҙ уңында тотҡан үҙгәрештәр үҙ көсөнә инде. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2025 йылдың 1 февраленән Әсәлек капиталы түбәндәгесә: беренсе балаға 690 266,95 һум; икенсеһе тыуған осраҡта тағы 221 895,14 һум; әгәр быға тиклем Әсәлек капиталына хоҡуҡ булмаһа, 912 162,09 һум.

*ҺӘЙБӘТ БИТ!*

# УҠЫУ ЙОРТТАРЫБЫҘ...

## һис берәүҙән кәм түгел!

**Башҡортостандың дүрт юғары уҡыу йорто - Өфө фән һәм технологиялар, Башҡорт дәүләт медицина, Өфө дәүләт нефть техник һәм Башҡорт дәүләт аграр университеттары "Өҫтөнлөк 2030" ("Приоритет 2030") федераль программаға инде.**

Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫар Дмитрий Чернышенко әйтеүенсә, "Өҫтөнлөк 2030" программаһына илдең 41 төбәгенән 100 университет һайлап алынған. 2021 йылдан ғәмәлгә ашырылған Рәсәйҙең яңы тарихындағы иң ҙур дәүләт ярҙам программаһы юғары уҡыу йорттарын амбициоз маҡсаттар ҡуйырға дәртләндерә. Уның маҡсаты - Рәсәй университеттарының 2030 йылға тиклем илде үҫтереүҙең милли маҡсаттарына өлгәшеүгә индергән өлөшөн тәьмин итеү өсөн ресурстарҙы туплау, юғары уҡыу йорттарының һәм ғилми ойошмаларҙың ғилми-белем биреү ҡеүәтен күтәреү". Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров иһә был турала шулай тип белдерҙе: "Өҫтөнлөк 2030" программаһында ҡатнашыу беҙгә фәнни-технологик үҫеш буйынса алдынғы төбәк булараҡ үҙ позициябыҙҙы тағы ла нығытырға мөмкинлек бирә. Алған федераль финанслау республика университеттарына фәнни инфраструктураларын үҫтереү, заманса ҡорамалдар һатып алыу, тикшеренеүҙәрҙе әүҙемләштереү, инновациялар индереү һәм юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләү өсөн яңы мөмкинлектәр аса. Былар иһә төбәк иҡтисадын нығытыуға һәм инвестициялар йәлеп итеүгә, шулай уҡ социаль өлкәгә импульс бирәсәк"

**(Дауамы 5-се биттә).**

12+

*✓ Тик бына бөгөнгө көндәрҙә инде сер булыуҙан туҡтаған мәғлүмәттәр буйынса, ана шул 108 минуттың 10 минутын Юрий Гагарин үлемесле хәүеф аҫтында үткәрә: ергә төшөү аппараты космос корабленән айырылмай аптырата.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ТҮЛӘЙҘӘР!

**Башҡортостанда тәрбиәгә бала алған ғаиләләр, опекундар һәм уллыҡҡа (ҡыҙлыҡҡа) алыусылар өсөн бер тапҡыр түләнә торған пособие күләме билдәле булды.**

Социаль фондтың Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе мәғлүмәттәренә ярашлы, 2025 йылдың 1 февраленән район коэффициенты менән бергә түләүҙәрҙең күләме 30 982,97 һум тәшкил итә. Инвалид баланы, 7 йәше тулған йәки бер туған ике йәки унан күберәк баланы тәрбиәгә алғандар өсөн пособие күләме һәр балаға 236 735,10 һум була. Шул уҡ ваҡытта уллыҡҡа алыусылар һәм опекундар Рәсәй Федерацияһы граждандары булырға, Рәсәйҙә даими йәшәргә тейеш. Бер тапҡыр бирелә торған пособиены алыу өсөн 6 ай эсендә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ғаризаны Социаль фондтың Башҡортостан буйынса бүлексәһенең клиенттар хеҙмәтендә, Күп функциялы үҙәктә йәки Дәүләт хеҙмәттәре порталында бирергә мөмкин. Социаль фондтың төбәк бүлексәһе матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 2024 йылда 780-дән ашыу ғаилә ошондай түләүҙәр алған.

## ТАШЛАМА МЕНӘН...

**Рәсәйҙә күп балалы ғаиләләр һәм пенсионерҙар һалым льготалары менән файҙалана ала.**

Әйтәйек, тәүгеләр өсөн транспорт, ер һәм мөлкәт һалымдарына льгота ҡаралған. Икенселәре өсөн льготалар пенсия алды йәшендәгеләргә лә ҡағыла (йәғни 55 йәштән үткән ҡатын-ҡыҙҙарға һәм 60 йәше тулған ир-егеттәргә). Уларға бер күсемһеҙ милек объекты: йорт, фатир йәки бүлмә, гараж йәки машина урыны, хужалыҡ ҡаралтыһы өсөн мөлкәт һалымын түләмәҫкә мөмкин. Ер һалымы буйынса бер ер участкаһының дөйөм хаҡынан 600 квадрат метр кадастр хаҡы күләмендә һалым ҡайтармаһы бирелә. Льгота менән файҙаланыу өсөн 30 апрелгә тиклем һалым инспекцияһына, Күп функциялы үҙәккә йәки ситтән тороп "Физик берәмектәр өсөн һалым түләүсенең шәхси кабинеты" сервисы аша ғариза бирергә кәрәк. Уға Дәүләт хеҙмәттәре порталынан пароль менән инергә мөмкин. Хәбәр иткәнебеҙсә, социаль һалым ҡайтармаһы 30 мең һумға арттырылды.

## ЯРАЛАНҺАҢ...

**Рәсәйҙә ил Президенты Владимир Путин указы менән Махсус хәрби операция биләмәһендә яраланыу һөҙөмтәһендә инвалидлыҡ алған яугирҙарға бер тапҡыр бирелә торған түләү 4 миллион һумға тиклем арттырылды.**

Рәсми документта билдәләнеүенсә, әгәр хәрби 2022 йылдың 24 февраленән указ көсөнә ингәнгә тиклем имгәнгән булһа, бер тапҡыр түләнергә тейешле аҡса, яраланғанда бер тапҡыр бирелә торған түләүҙе иҫәпкә алып, "Ватанды һаҡлаусылар" фондынан бирелә. Шулай уҡ яугирҙарға Махсус хәрби операция биләмәһендә төрлө тән йәрәхәттәре (яраланыу, имгәнеү, контузия) алған осраҡта 3 миллион һумға тиклем аҡса түләнә. Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған документ хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Указ ҡул ҡуйған көндән - былтыр 13 ноябрҙән көсөнә инде. Билдәле булыуынса, Башҡортостанда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға 40-тан ашыу ярҙам сараһы күрһәтелә. Республиканың ошо йүнәлештәге тәжрибәһен Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә лә өйрәнәләр.

БЫЛ АЙҘА...

**Яҙ уртаһы алағарайҙың, үҙ тәбиғәтенә тоғро айҙарҙың береһе булһа ла, ҡайһы бер йылдарҙа миҙгелде ашыктырып, холҡон күрһәтеп ала торған ғәҙәте бар икәнен дә беләбеҙ. Ошоға бәйле, Урал Гидрометүҙәге архивы үҙендә һаҡланған ҡайһы бер мәғлүмәттәр менән таныштыра: тарихта иң йылы апрель 1836 йылда теркәлгән: һауа температураһы ул саҡ +30 градусҡаса йылынған. Ә иң һыуыҡ ай 1998 йылда килгән һәм уртаса һауа температураһы - 1,5 градусты күрһәткән. Ә бынан теүәл 30 йыл элек - 1995 йылда алағарайҙа уртаса һауа температураһы +10,5 градус тәшкил иткән булһа, 2012 йылдың 18 апреле иң эҫе көн булараҡ тарихта ҡалған: терегөмөш бағанаһы ул көндә +28,8 градусҡа күтәрелгән.**

# ЯҘ ИРТӘ КИЛҺӘ, АШЛЫҠ УҢЫР



Һауа температураһының иртә йылыныуын да яҡшыға тип әйтеп булмай. Яҙ килә, яҙ, тип ҡыуанһаҡ та, ул умырзая гүзәллеге менән сыйырсыҡтар йыры ғына түгел шул. Берҙәм рәүештә ҡар ирей, өҫтәүенә, ҡар ҡатыш ямғырҙар арҡаһында йылғалар таша, яр буйы тораҡ пункттарын һыу баҫа. Марттың йылы тороуы ошо айҙа уҡ урыны менән һыу баҫыу проблемаларын башлап ебәрҙе лә инде. Быйылғы уңған март алағарайға эш тә ҡалдырмаҫ ахырыһы, ҡарын да иретеп бөтөр, ташҡынын да үҙ башынан кисерер, умырзаяларын да үҫтерер, ҡоштарын да ҡайтарыр... Ҡалдырһа, апрелгә аҡман-тоҡманын ҡалдырыр - бөгөнгө климат үҙгәрештәренә аптырарға түгел, яҙлы-йәйле ҡарын да лыпылдатып яуҙырып һалыр, буранын да сығарыр. Былтыр **30 апрелдә** Баймаҡ районында, унан алдағы **2023 йылдың 7 апрелендә** Әбйәлил менән Белорет районларында һәм **15 апрелдә** Хәйбуллала яуған ҡар һәм ел-дауыллы көндәр күптәрҙең иҫендәлер әле. Ләкин көн яманы китер, тәбиғәт үҙенекен итер: яҙ - яҙ булыр барыбер.

Бер яҡтан, яҙҙың иртәләүе бик мәслихәт: халыҡ һынамышы буйынса, яҙ иртә килһә, ашлыҡ уңыр. Һәр айҙың да үҙ яйы, үҙ холҡо булған кеүек, уның иҫтәлекле календарь биттәре лә төрлөсә. Теге йәки был айҙың атамаһын әйтеү менән үк уның үҙенә генә хас күренекле бер көнө йә иҫтәлекле датаһы күҙ алдына килә. Апрель тигәндә, әлбиттә, **1961 йылдың 12 апреле** - ул ваҡытта совет ысынбарлығында тыуып-тәрбиәләнгән быуындар өсөн фантастик тип әйтерлек ваҡиға - Юрий Гагариндың йыһанға осоуы онотолмаҫлыҡ күңел тантанаһы булып хәтерҙә тороп ҡалыуын әйтер инем. Космоста 108 минут дауам иткән был ваҡыт киҫәге бөтөн донъяны таң ҡалдырҙы һәм кешелектең аң даирәһен йыһан бейеклегенә күтәрҙе. Тик бына бөгөнгө көндәрҙә инде сер булыуҙан туҡтаған мәғлүмәттәр буйынса, ана шул 108 минуттың 10 минутын Юрий Гагарин үлемесле хәүеф аҫтында үткәрә: ергә төшөү аппараты космос корабленән айырылмай аптырата. Килеп тыуған техник көйһөҙлөктөң ниндәй һөҙөмтәгә килтереү ҡурҡынысын яҡшы аңлаһа ла, Гагарин үҙен тыныс тота һәм ерҙәге белгестәр үҙ эштәрен башҡарған арала "Тыуған ил ишетә, Тыуған ил белә..." тигән йырҙы шым ғына һыҙғырып-көйләп, осоуын дауам итә. Әбит уның Ергә иҫән-имен әйләнеп ҡайтыу ихтималлығына, аҙаҡ асыҡланыуынса, хатта Баш конструкторҙың да 100 процент ышаныс булмай. "Юраның характеры - тәбиғи ихтыяр ныҡлығы, аналитик аҡыл, иҫ киткес эшсәнлек бергә уңышлы һыйыша алған бәхетле осраҡ ул", - тигән Баш конструктор Сергей Королев һәм артабан белем алған хәлдә Гагаринды илдең күренекле ғалимдарының береһе итеп күрергә теләгән. Эйе, планетаның тәүге космонавты роленә тап Юрий Гагаринды һайлап, Королев яңылышмай: кеше булараҡ ябайлығы, һөймәлеклеге һәм шул уҡ ваҡытта физик һәм психологик йәһәттән сәләмәт камиллығы; ваҡыт тығыҙлығына ҡарамай, академияны "отлично"ға тамамлап, летчик-инженер-космонавт квалификацияһына эйә булыуы Гагариндың маҡсатына ынтылышлығын, лидерлыҡ сифаттарын бик яҡшы характерлай.

Әбөгөн иһә йыһанға осоп барып ҡайтыу космонавтарҙың көндәлек хеҙмәт вахтаһына әүерелде, тик барыбер әлегесә техник көйһөҙлөктәр йыш ҡына ҡабатланып тора. Мәҫәлән, ошо көндәрҙә Американың ике астронавты менән булған хәл космос тарихында киҫкен сюжетлы блокбастерҙа тиң легенда булып ҡалыр, моғайын. Былтыр 6 июндә Барри Уилмор менән Сунита Уи-

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда яңы эш аҙнаһы Ураҙа байрамы уңайынан өс көнлөк ял менән тамамлана. Өҫтәмә ял март айының һуңғы көнөнә тура килә. Быйыл Ураҙа ғәйете 30 мартта билдәләнә. Шуға бәйле ял көнө 31 мартҡа күсерелә. Ураҙа байрамын донъя мосолмандары 30 көнлөк ураҙа тамамланғас, изге Рамаҙан айының аҙағында билдәләнә.

✓Башҡортостанда "Башҡорт йәшмәһе йорто" проектына старт бирелде. Ул Совет майҙанында, элекке контроль-иҫәп палатаһы бинаһында урынлаша, тип белдерҙе Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә. "Йәшмә, башҡорттарҙың тарихы, мәҙәниәте менән бәйле яңы музей комплексы барлыҡҡа килә, - тип билдәләне республика етәксеһе. - Тәүге матур проект ҡарарҙары бар. Башҡорт йәшмәһе йорто генерал Шайморатов һәйкәле урынлашҡан Совет майҙанында асыла". Радий Хәбиров ошо арала бинаның милек хоҡуғына ҡағылышлы барлыҡ мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәклеген әйтте.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 20 мартта үҙенең тыуған көнөн йола буйынса Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркында үткәрҙе. Ул көндәрҙә бында "Ирҙәрсә һөйләшеү" республика профилле сменаһы ойошторолғайны. Унда 400-гә яҡын егет, хәрби-патриотик клубтарҙа ҡатнашыусылар һәм "Юнармия" Бөтә Рәсәй хәрби-патриотик хәрәкәтенең төбәк бүлексәһе тәрбиәләнеүселәре, шулай уҡ иҫәптә торған балалар саҡырылды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Хәүефһеҙ интернет лигаһы" директоры Екатерина Мизулина менән осрашты. Республика етәксеһе үҙенең телеграм-каналында билдәләүенсә, Екатерина Мизулина - ысын көрәшсе, уның үҙ фронт һыҙығы - интернет һәм социаль селтәрҙәре бар. "Социаль селтәрҙәр бик яҡшы, әлбиттә, шул уҡ ваҡытта уның зыяны ла бар. Унда деструктив контент, ялған мәғлүмәттәр, мутлашыусылар күп. Екатеринаның һәм уның командаһының төп бурысы - ошондай күренештәрҙе асыҡлау һәм язаға тарттырыу", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Ғафури районының Иҫке Тайыш ауылында көслө ташҡын арҡаһында Еҙем йылғаһының яры емерелә башлаған. Ауыл халҡы хәүеф зонаһында булған бер йортто һүткән. Был хаҡта Имәндәш ауыл хакимиәте башлығы Әхнәф Нуғайғолов хәбәр итте. Уның әйтеүенсә, Еҙем йылғаһы ике яҡтан Иҫке Тайыш ауылын уратып аға. Ағым бик көслө, бер туҡтауһыҙ яр емерелә. Ярға яҡын урынлашҡан өйҙәр ағып китеүе ихтимал, тип борсола ауыл халҡы.

✓ *Кешелек тарихында тәүге тапҡыр социалистик революция яһаусы Ленин - ул тарих өлөшсәһе генә түгел, ул яңы донъя тарихына нигеҙ һалыусы, Советтар иле төҙөп, юҡһылдарҙы кеше итеүсе.*



льямс Boeing Starliner кораблендә бер аҙнаға космос станцияһына килеп төшә һәм корабль двигателе боҙолоу арҡаһында... туғыҙ айға йыһанда тороп ҡалалар. Ләкин астронавтар юғалып ҡалмай, сөнки улар төрлө авария осраҡтарына алдан әҙерлек үтәләр. Һәм эшһеҙ ҙә ултырмайҙар: асыҡ йыһанға сығалар, станцияның һынған антенналарын төҙәтәләр, микроб анализдары өсөн материал туплайҙар. Ә экипаж командиры 59 йәшлек Сунита асыҡ йыһанда иң оҙаҡ ваҡыт булып, ҡатын-ҡыҙ астронавтар араһында рекорд ҡуя хатта. Дональд Трамп президент булып һайланғас та, был ике ҡыйыу астронавты Ергә ҡайтарыу өсөн бөтөн көсөн һалырға вәғәҙә бирә һәм Байденды был йәһәттән тейешле сара күрмәүҙә ғәйепләй. Һәм, ысынлап та, 19 мартта "Роскосмос" ярҙамында SpaceX компанияһы етештергән Crew Dragon капсулаһы экипажды Ергә алып ҡайта. Шул уҡ корабль менән орбитала 171 тәүлек эшләгән "Роскосмос" дәүләт корпорацияһы космонавты Александр Горбунов менән NASA астронавты Ник Хейг та ҡайталар. Бына шулай, ерҙә генә түгел, йыһанда ла бик кәрәк үҙ-ара ярҙам һәм хеҙмәттәшлек. Был йәһәттән Рәсәй космонавтары менән АҠШ астронавтары бер ниндәй сәйәси хәлдәргә ҡарамайынса, күптән инде эскәрһеҙ дуҫлыҡ һәм бер-береһенә ҡарата туғандарса хәстәрлек өлгөһө күрһәтеп, ерҙәгеләрҙе лә үҙҙәре миҫалына эйәрергә саҡыра...

Был айҙағы тағы бер көн - хаҡһыҙ рәүештә онотолоп барған **22 апрель** хаҡында ла әйтке килә. Яңыраҡ ҡына социаль селтәрҙә KP.RU сайты Өфө сүплегендә Ленин портреты төшөрөлгән ағас панно табылыуы хаҡында хәбәр иткәйне. Сүп-сарға нимәләр генә ташламайҙар! Был турала хәбәрсегә һөйләүсе БР экология министры Нияз Фазылов әйтеүенсә, һәр бер ғәҙәти булмаған табыш - ул тарихыбыҙҙың бер өлөшсәһе. Ә кешелек тарихында тәүге тапҡыр социалистик революция яһаусы Ленин - ул тарих өлөшсәһе генә түгел, ул яңы донъя тарихына нигеҙ һалыусы, Советтар иле төҙөп, юҡһылдарҙы кеше итеүсе. Дөрөҫ, башлаған эшен дауам итә алмайынса, ул ни бары 53 йәшендә мейе ҡан тамырҙары атеросклерозынан вафат була. Был сир буйынса күренекле белгес, академик Юрий Лопухин Лениндың үлемен 1918 йылдың 30 августында уға атылған ике пуляның береһе траекторияһының эҙемтәһе тип иҫбатлаһа, бөгөнгө медицина, атап әйткәндә, Америка неврологтары тикшеренеүҙәре шулай уҡ баш мейеһе ҡан тамырҙарында эзбиз тупланыуҙан ҡатҡан ҡан тамырҙары сире тип диагноз ҡуя. Башҡа төрлө яман сир уйҙырмалары - дошман ҡотҡоһо. Ә тарихын сүплеккә ташлағандың киләсәге юҡ. **22 апрель** - Владимир Ильич Лениндың тыуыуына - 155 йыл (1870-1924).

**Алағарайҙың иҫтәлекле көндәре:** Халыҡ-ара ҡоштар, Көлкө **(1)** көндәре, Беларусь һәм Рәсәй халыҡтарының берҙәмлек , Халыҡ-ара балалар китабы **(2)** көндәре, Халыҡ-ара әхлаҡлылыҡ **(5)**, Геолог, Үҫеш һәм тыныслыҡ хаҡына халыҡ-ара спорт **(6)**, һәләк булған һыу аҫты диңгеҙселәрен иҫкә алыу, Бөтөн донъя һаулыҡ **(7)** көндәре, Фашист лагерҙары тотҡондарын азат иткән көн **(11)**, Космонавтика **(12)**, Һауа һөжүменә ҡаршы оборона (ПВО), Радиоэлектрон көрәш буйынса (РЭБ) белгес, Экологик белем, Халыҡ-ара мәҙәниәт **(15)** көндәре, Халыҡ-ара һәйкәлдәр һәм тарихи урындар **(18)**, Умырзая, БР халыҡтарының милли кейемдәре **(19)** көндәре, Ҡырым, Тамань һәм Кубанде Рәсәй империяһы составына ҡабул иткән көн **(19 апрель, 1783 йыл)**, Христиандарҙың Пасха байрамы **(20)**, Батша хөкүмәте Сенатының башҡорт ерҙәрен межалау һәм тасуирлама яҙыу тураһында указына - 290 йыл **(21 апрель, 1735 йыл)**, Халыҡ-ара Ер көнө, Совет сәйәси һәм дәүләт эшмәкәре, революционер, Рәсәйҙә 1917 йылғы Октябрь революцияһын ойоштороусы һәм уның етәксеһе, РСФСР халыҡ комиссарҙары Советының тәүге рәйесе, донъя тарихында беренсе социалистик дәүләт төҙөүсе Владимир Ильич Ленин (Ульяновтың) тыуыуына - 155 йыл **(22 апрель, 1870 - 21 ғинуар, 1924)**, Бөтөн донъя китап һәм автор хоҡуғы **(23)**, Йәштәрҙең халыҡ-ара теләктәшлеге **(24)**, Ҡыҙ балалар **(25)**, Радиация һәләкәте эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнашыусылар көнө һәм шул һәләкәт ҡорбандарын иҫкә алыу көнө, Халыҡ-ара интеллектуаль милек **(26)** көндәре, Ашығыс медицина ярҙамы, Бөтөн донъя хеҙмәтте һаҡлау, Кешенең химия хәүефенән көрәшкә хоҡуҡ **(28)** көндәре, Халыҡ-ара бейеү **(29)**, Янғын һағы **(30)** көнө.

**Алағарайҙа тыуғандар:**

**25** - рәссам, йәмәғәт эшмәкәре, БР Рәссамдар берлеге рәйесе, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Рәсәй художество академияһы ағзаһы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты **Хәтип ФАЗЫЛОВҡа - 65 йәш** (1960).

**-** йырсы, Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының солист-вокалсыһы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Әлфиә ЮЛСУРИНАға - 65 йәш** (1960).

**28** - дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, БР Хөкүмәте Премьер-министры, иҡтисад фәндәре кандидаты **Андрей НАЗАРОВҡа - 55 йәш** (1970).

**30** - йырсы, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисы, З.Исмәғилов исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, Рәсәйҙең - атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы **Йәмил ӘБДЕЛМӘНОВҡа - 60 йәш** (1965).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# КИЕВ КИЛЕШЕҮҘЕ БОҘА

**Америка Ҡушма Штаттары Украинала утты туҡтатыу тураһында килешеүҙе 20 апрелгә тиклем көсөндә тота, ләкин ике араһағы ҙур фекерҙәр айырымлығы арҡаһында был сроктың артабан һуҙылыуы мөмкин, тип хәбәр итә Bloomberg агентлығы.**

Март баштарында Украинаға хәрби ярҙам күрһәтеүҙе бер аҙға ғына туҡтатып торған Аҡ йорт был мәсьәләлә бер ниндәй ҙә сикләүҙәргә ризалыҡ биргәне юҡ әле. Рәсәй Президенты Владимир Путин бынан алда уҡ әле, Беларусь Президенты Александр Лукашенко менән осрашыу йомғаҡтары буйынса матбуғат конференцияһында тағы бер тапҡыр ҡабатлап әйтеүенсә, Мәскәү Украинала хәрби хәрәкәттәрҙе туҡтатыу тәҡдиме менән килешә, ләкин уның һөҙөмтәһе оҙайлы тыныслыҡҡа алып килергә һәм ике аралағы кризистың төп сәбәптәрен юҡ итергә тейеш. Ләкин украин армияһы Рәсәйҙең энергетика объекттарын утҡа тотоуҙы дауам итә, беҙҙең ҡалаларға туҡтауһыҙ дрондар осора. Киев режимының килешеүҙәрҙе һанға һуҡмауы Дональд Трамп менән Владимир Путиндың үҙ-ара һөйләшеүҙәренә тағы бер сәбәп булып торасаҡ. Ике ил президенты ла үҙ-ара аралашыуҙы артабан да дауам итергә килешкәйне. Ләкин, РФ Президентының матбуғат секретары Дмитрий Песков әйтеүенсә, Украина конфликтын көйләү буйынса бик оҙаҡ эшләргә кәрәк буласаҡ, шуға күрә был йәһәттән тиҙ һөҙөмтәгә өмөт итеп булмай. Шул уҡ ваҡытта әле яңы ғына тергеҙелә башлаған Рәсәй-Америка мөнәсәбәттәре буйынса ла ентекле эшмәкәрлек талап ителә бит. Хәтерләһәгеҙ, 18 мартта АҠШ менән Рәсәй президенттарының һөйләшеүе ваҡытында Владимир Путин Мәскәү менән Киевтың энергетик инфраструктураларға һөжүмен ике яҡлы туҡтатыу тураһындағы фекерҙе хуплағайны, ләкин шунан һуң Украина армияһы аңлы һәм оятһыҙ рәүештә Краснодар крайының Кавказ станицаһы энергообъектына дрондар ташланы. Ә 21 мартта украин хәрби төркөмдәре Европаға Рәсәй газын үткәреүсе Курск өлкәһе "Суджа" газ үлсәгес станцияһын (ГИС) шартлатты. Шул уҡ төндә украин армияһы Курск АЭС-ын утҡа тотто. Былар бөтәһе лә бар донъяға Киев режимының ысын йөҙөн фашлаусы факттар, шул уҡ ваҡытта Зеленскийҙың бер генә һүҙенә лә ышанып булмауын күрһәтә.

Хәрби тотҡондар менән алмашыу һөҙөмтәһендә Рәсәй тыуған илгә 175 хәрбиҙе һәм 22 ауыр яралы һалдатты ҡайтарҙы. Был хаҡта һөйләшеүҙәр барышында Берләшкән Ғәрәп Әмираттарының ярҙамы ҙур булды, тип хәбәр итә РФ Оборона министрлығы.

АҠШ менән Рәсәй һөйләшеүҙәрендә тағы бар ҡырҡыу теманы күтәреү кәрәк, ти Плеханов исемендәге университет доценты, хәрби сәйәсмән Александр Перенджиев. Ул тема - "күләгәлә" эш итеүсе ҡоралдар һәм хәрби техника баҙары проблемаһы. Украинаға ағылыусы Көнбайыш ҡоралы артабан бөтөн донъяға таратыла. Бындай енәйәтсел эшмәкәрлеккә юлды япмайынса тороп, бер ниндәй тыныс килешеүҙәр барып сыҡмаясаҡ. Шул уҡ ваҡытта АҠШ властарының Украинаға ҡорал ебәреп ятыуын дауам итеүе лә Трампты һүҙе һәм эше буйынса бер төрлө генә тасуирламай. Әйткәндәй, ошо көндәрҙә генә Дональд Трамп менән билдәле спорт комментаторы Клэй Трэвистың әңгәмәһе баҫылып сыҡты. Трамп Рәсәй темаһына ҡағылып, Президент Владимир Путин менән аралашыуҙы бик файҙалы тип баһалай. Үҙенең президентлыҡ осоронда Трамп Рәсәйҙең бер илгә лә, шул иҫәптән, Украинаға ла, баҫып ингәне юҡ, ти һәм был йәһәттән Путинды бик яҡшы белеүе тураһында әйтә. Уның ҡарауы, был осорҙа Европа яйһыҙраҡ хәлдә тороп ҡалды. Ошоға тиклем ул АҠШ-тың йылы ҡуйынына һыйынып йәшәй ине. Хәҙер, Дмитрий Песков әйтмешләй, "ҡалала - яңы шериф" һәм ул Европа илдәренә оборона өсөн сығымдарҙы 5 процентҡа арттырып түләүҙе талап итә. Был бигерәк тә Франция президенты Макрон менән Британия премьеры Стармерҙың асыуын ҡабарта. Улар нисек тә Украина буйынса тыныслыҡ килешеүҙәрен өҙөргә, һәр яҡлап ҡамасауларға маташа. "Рәсәй Европаға янай", тигән уйҙырма таратып, Көнбайыш донъяһында Рәсәйгә ҡаршы агрессив кәйеф тыуҙырырға уйлай.

Ошо көндәрҙә Сәғүд Ғәрәбстанында Рәсәй менән АҠШ делегацияларының сираттағы осрашыуы көтөлә. Рәсәй яғынан Федерация Советының халыҡ-ара эштәр буйынса комитет рәйесе Григорий Карасин менән Федераль хәүефһеҙлек хеҙмәте кәңәшсеһе, генерал-полковник Сергей Беседа ҡатнаша. Америка иҡтисадсыһы һәм Колумбия университеты профессоры Джеффри Сакс белдереүенсә, Рәсәй менән АҠШ мөнәсәбәттәре яҡшыра бара һәм был бик һәйбәт. Ләкин, ти профессор, АҠШ-тың агрессив сәйәсәте арҡаһында был мөнәсәбәттәр бик яҡынайып та китмәйәсәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓21 мартта донъяла халыҡтарҙың бай тарихын һәм йолаларын кәүҙәләндергән Науруҙ байрамы билдәләнде. Рәсәй Президенты Владимир Путин Науруҙ байрамы уңайынан Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Тажикстан, Төркмәнстан һәм Үзбәкстан президенттарына ҡотлау хаттары ебәрҙе. Лидерҙарға ҡотлауҙарында Владимир Путин стратегик партнерлыҡтың ике яҡлы мөнәсәбәттәре дуҫ халыҡтарыбыҙ мәнфәғәте өсөн артабан да уңышлы үҫешеренә ышаныс белдерҙе.

✓Башҡортостанда Белорет районы хакимиәте башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп Азат Хәкимов тәғәйенләнде. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика Башлығы Радий Хәбиров рәсми рәүештә уның менән таныштырҙы. Быға тиклем Азат Хәкимов Өфөлә Октябрь районы башлығының беренсе урынбаҫары булып эшләне. "Уның тәжрибәһе һәм тейешле белеме бар. Белореттарға көслө етәксе, ихтирамлы мөнәсәбәт кәрәк. Унда проекттар ҙа бар, проблемалар ҙа етерлек", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

✓Бер сабыйҙы уллыҡҡа алған рәсәйҙәр бала тыуғандан һуң 70 көнлөк, әгәр ике һәм унан күберәк баланы уллыҡҡа алыу тураһында һүҙ барһа, 110 көнлөк отпускыға иҫәп тоторға хоҡуҡлы. Рәсәй Хөкүмәте ошо ярҙам сараһын 2031 йылдың 1 сентябренә тиклем оҙайтыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Шулай уҡ уллыҡҡа алыусыларға йөкләлөк һәм бала табыу буйынса кеүек пособие түләнә. Ошо ваҡыт үткәндән һуң баланы өс йәшкә тиклем тәрбиәләү буйынса отпуск алырға мөмкин.

✓Баймаҡ районы хакимиәте башлығы Азамат Иҙрисов ветеран Ғәйзулла Мөхәмәт улы Әблүзинды "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында еңеүгә 80 йыл" юбилей миҙалы менән бүләкләне. "Хатта олпат йәшендә лә ул әүҙем, ҡыҙыҡһыныусан, аралашыусан булып ҡала. Әлеге ваҡытта Темәс ауылында яҡындарының һөйөүенә һәм хәстәрлегенә сорналып йәшәй. Был миҙал - награда ғына түгел, ә уның батырлығына, Бөйөк Еңеүгә индергән баһалап бөткөһөҙ өлөшөнә, бөгөнгө тормошобоҙға тәрән ихтирам символы", - тип яҙа Азамат Иҙрисов.

✓Нефтекаманан ауыр атлет Айһылыу Ниғмәтйәнова дүрт ил рекорды ҡуйып, Рәсәй беренселегендә еңеү яуланы. Был хаҡта Башҡортостан вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов үҙенең телеграм-каналында хәбәр итә. "Айһылыуға 14 кенә йәш... Бына ниндәй көслө алмаш үҫә беҙҙә! Афарин!" - тип яҙа Хәбибов. Спортсының Илзирә Усманова етәкселегендә шөғөлләнеүе билдәле.

ҠЫҪҠАСА

# ҺЫУҘАН ДА ҠАЛМАЙ

**Архангел районының Аҙау ауылы халкына был аҙнала ук ташкын килтергән зыянды иҫәпләп, компенсация түләнергә тейеш.** Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ошондай йөкләмә бирҙе. Әлеге ваҡытта халыҡтан 91 ғариза ҡабул ителгән, 29 кеше компенсация алған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ҡануниәт буйынса һәр кешегә 10 мең һум тейеш, әммә ғаиләгә 50 мең һумдан артыҡ түгел. Аҡсаны тик милек хужалары ғына алырға мөмкин. Бынан тыш, һәләк булған малдың хаҡы компенсациялана. "Кешеләр мал-тыуарһыҙ ҡалды, уны 10 мең һумға һатып алып булмай. Шуға күрә беҙ компенсацияларға булдыҡ, финанслау сығанағы бар", - тине республика етәксеһе. Бынан тыш, Радий Хәбиров емерелгән юлдарҙы тәртипкә килтереү өсөн тиҙерәк аҡса бүлергә ҡушты.

✓ **Башҡортостандың студент отрядтары хәрәкәте ветераны, Өфө дәүләт нефть техник университетының кафедра мөдире Эльшад Теләшев студент отрядтарын үҫтереү мәсьәләләре буйынса координация советы ултырышында остазлыҡ һәм ял саралары үткәреү тәжрибәһе менән уртаҡлашты.** "Минең һәм байтаҡ тиҫтерҙәремдең өсөн төҙөләш отрядтары мөһим сәнәғәт объекттарын булдырыу мәктәбе булып тора. Беҙҙең республикаға студент отрядтары эшмәкәрлегенең интеграль форматы хас ине, ул саҡта әүҙем йәштәргә аралашыу һәм артабан күп йылдар буйына бәйләнеш тотоу өсөн мөхит булдырылды. Шуға күрә туғандаш ҡалаларҙың студент отрядтары менән алмашыу аша төбәк-ара, айырыуса Рәсәйҙең яңы биләмәләре менән хеҙмәттәшлекте яйға һалыуҙы мөһим тип иҫәпләйем", - тине ул. Башҡортостан Башлығы иһә ошо юҫыҡта киң мәғлүмәт-аңлатыу эшен ойоштороу кәрәклеген билдәләне.

✓ **Башҡортостандың 14 ҡалаһында ғаилә ипотекаһы буйынса икенсел торлаҡ һатып алырға мөмкин.** Ағиҙел, Баймаҡ, Белорет, Бөрө, Благовещен, Дәүләкән, Ишембай, Күмертау, Межгорье, Мәләүез, Салауат, Сибай, Туймазы һәм Яңауыл 1 апрелдән ғаилә ипотекаһы программаһы буйынса икенсел баҙарҙа торлаҡ һатып алырға рөхсәт ителгән ҡалалар исемлегенә инде. Исемлек "Дом.рф" льготалы федераль программалар операторы порталында баҫылған. Унда бөтәһе 901 ҡала бар. Билдәләнеүенсә, ғаилә ипотекаһы ике һәм унан аҙыраҡ күп фатирлы йорт һалынған ҡалаларҙа ғына ғәмәлдә. Һатып алыу өсөн бик ҡаты шарттар ҡаралған. Ипотекаға икенсел фатирҙы 6 йәшкә тиклемге балаһы булған ғаиләләр һатып алырға мөмкин. Йорт авария хәлендә булырға тейеш түгел.

✓ **Башҡортостандан МХО-ла һәләк булған яугирҙарҙың ғаилә ағзалары шәхси йорт һалыу өсөн ер участкаһы алырға мөмкин, тип хәбәр иттеләр Республикаға идара итеү үҙәгенән.** Ярҙам сараһына ярашлы, участка бер тапҡыр бирелә. Һәләк булған хәрбиҙең хәләл ефете, бәлиғ булмаған, шул иҫәптән уллыҡҡа алынған балалары, әгәр ҡатыны һәм балалары булмаһа, ата-әсәһе яугирҙың ғаилә ағзалары тип һанала. Ер алыу өсөн ғариза яҙырға, паспорт күсермәһен, наград документтарын һәм башҡаларын тапшырырға кәрәк. Документтар күп функциялы үҙәктә, муниципалитет хакимиәтендә, республиканың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығында йә иһә Дәүләт хеҙмәттәре порталында ҡабул ителә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҮҘЕБЕҘ ҘӘ ЕТЕШТЕРӘБЕҘ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров агросәнәғәт форумын һәм 35-се "АгроКомплекс" халыҡ-ара күргәҙмәһен асыу тантанаһында ҡатнашты. Күргәҙмәлә Рәсәйҙең 40 төбәгенән, шулай уҡ Белоруссиянан, Ҡаҙағстандан һәм Сенегалдан 380 компания ҡатнаша.**

Республика етәксеһе яңы техника менән танышты, күргәҙмәлә ҡатнашыусылар менән аралашты. Урам экспозицияһында ул республиканың аграр секторында ҙур һорау менән файҙаланған "Кировец" тракторҙарын ҡараны. "Ростсельмаш" компанияһы вәкилдәренең республика аграрийҙарына төрлө техника һәм ҡоралмалар тәҡдим итеүҙәре хаҡында тыңланы. Башҡортостандың "Башагромаш" ауыл хужалығы техникаһын етештереүсе "Агрокомплекс - 2025" күргәҙмәһендә КС100 "Сулпан" үҙйөрөшлө сапҡыс менән таныштырҙы. Башҡортостан Башлығы шулай уҡ минераль ашламалар баҙарында эшләгән компаниялар стендтары менән танышты, унда таһмин итеүселәр менән хаҡ сәйәсәте мәсьәләләрен тикшерҙе.

-"АгроКомлекс" күргәҙмәһендә Башҡортостандың ауыл хужалығы техникаһы етештергән предприятиелары йылдан-йыл күбәйә бара. Стәрлетамаҡта үҙйөрөшлө сапҡыс сығаралар, Ҡырмысҡалы районында яңы тракторҙар йыя башланылар. Башҡортостан оҫталарға бай. Әммә беҙҙең бурыс бик ябай. Республика яғынан берлектә финанслау иҫәбенә аграрийҙарға яңы техника һатып алырға ярҙам итеү. Аграрийҙар алдында аҙ ғына бурысыбыҙ бар. Бер-ике йыл эсендә уны ҡаплабыҙ. Беҙ ошо ярҙам сараһын артабан да бойомға ашырыуҙы дауам итәбеҙ, - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# КЕМГӘ НИНДӘЙ БУРЫС?

**Башҡортостан Башлығының 2025 йылдың 12 февралендәге республика Хөкүмәтендәге бурыстарҙы бүлеү тураһында бойороғона үҙгәрештәр индерелде.**

18 марттағы яңы бойороҡ тексынан күренеүенсә, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров фән һәм юғары белем буйынса дәүләт комитеты эшмәкәрлеге өсөн яуаплы. Бынан тыш, ул республиканың Финанс, Йәштәр сәйәсәте (бығa тиклем - дәүләт комитеты) министрлыҡтары, Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы эшмәкәрлеген контролдә тота. Хөкүмәттең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаевҡа "Атайсал" проектын алып барыу һәм Евразия күсмә цивилизациялар музейын булдырыу эше лә йөкмәтелде. Бынан тыш, ул республика мәктәптәрен капиталь ремонтлау эшен координацияларға һәм контролдә тоторға тейеш. Беренсе вице-премьер Рөстәм Моратов Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәттең Башҡортостан идаралығы эшмәкәрлеге өсөн яуап бирә (бығa тиклем ошо эш менән вице-премьер Рөстәм Ғәзизов шөғөлләнде). Хөкүмәт Премьер-министр урынбаҫары - хөкүмәт аппараты етәксеһе Азамат Абдрахманов үҙ бурыстарынан тыш, "Кешеләр өсөн дәүләт" федераль проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә дәүләт идара итеүенә клиенттарға йүнәлтелгән алым индереүҙе ойошторорға тейеш. Вице-премьер һәм спорт министры Руслан Хәбибов миграция сәйәсәтен камиллаштырыу мәсьәләләре менән дә шөғөлләнә. Башҡортостан вице-премьеры һәм сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев "Алға" махсус иҡтисади биләмәһен үҫтереү эшен координациялай.

# ҺАУЛЫҠ ҺАҠЛАУҘЫ ХӘСТӘРЛӘП...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко менән Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау өлкәһен үҫтереүҙе тикшерҙе**

"Мәскәүҙә Михаил Альбертович Мурашко менән бер нисә мәсьәләне ентекле тикшерҙек, - тип яҙа республика етәксеһе Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. - Ил Президенты ҡушыуы буйынса тормошҡа ашырылған һаулыҡ һаҡлауҙың беренсел звеноһын яңыртыу программаһына тәү сиратта ниндәй объекттарҙың индерелеүен ҡараныҡ. Уҙған йылдарҙа ошо йүнәлештә яҡшы эшләнек, Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау министрлығы булышлығында һәм үҙ аҡсабыҙға 500-гә яҡын фельдшер-акушерлыҡ пунктын яңырттыҡ, бик күп объекттарҙы ремонтланыҡ һәм төҙөнөк. Беҙҙең өсөн яңы программа - беренсел звенола башланған эште тамамлау һәм ландшафтты тулыһынса үҙгәртеү мөмкинлеге".

Башҡортостан Башлығы һүҙҙәренсә, республикала иң тәүҙә поликлиникаларҙы ремонтлау, фельдшер-акушерлыҡ пункттарын яңыртыу эшенә етди иғтибар бирелә. Шулай уҡ республикаға федераль үҙәктән бүленгән аҡсаның 80 проценты - яңы объекттар төҙөү йәки булғандарын реконструкциялау, ҡалған 20 проценты ҡоралмалар һатып алыуға йүнәлтеү тураһында һөйләшеп килешелде. "Форсаттан файҙаланып, Михаил Альберт улын Республика кардиология үҙәгенең хирургия корпусын асыу тантанаһына саҡырҙым. Был объект беҙгә ауыр бирелде. Төҙөлөшкә 11 миллиард һум аҡса һалдыҡ. Уны асҡан көндә Һаулыҡ һаҡлауҙы үҫтереү буйынса советтың быйыл тәүге ултырышын үткәрергә йыйынабыҙ", - тине Радий Хәбиров.

# ЭШКӘ УРЫНЛАШТЫРАЛАР

**Башҡортостандың 20-нән ашыу предприятиеһы Махсус хәрби операция ветерандарын эшкә урынлаштырырға әҙер. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Махсус операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам күрһәтеү буйынса ведомство-ара комиссияһы ултырышында билдәле булды, тип хәбәр итә республика Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте.**

Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе, Өфө агрегат производство берекмәһе, Башҡортостан сода компанияһы, "Гидравлика" предприятиеһы, "Алексеевка" агросәнәғәт комплексы кеүек компаниялар эшкә алырға әҙер. Эш биреүселәр исемлеген "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фондының республика филиалы әҙерләй. Уның менән хеҙмәттәшлек тураһында тейешле килешеү ҙә төҙөлә. Был исемлек яңыртылып тора.

Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - спорт министры Руслан Хәбибов фронттан ҡайтҡан хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең "эшкә урынлашырға ғына түгел, ә лайыҡлы эш хаҡы менән эшләргә һәм үҙ урынын табырға тейеш"леген билдәләне.

# НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Сибай концерт-театр берекмәһенең мобилизацияланған артисы Фларид Биргәлин МХО биләмәһендә башҡорт халыҡ йырын башҡарған. Был турала "Башҡорт батальоны" телеграм-каналы хәбәр итә. Фларид Биргәлин 2022 йылдың көҙөнән Махсус хәрби операцияла ҡатнаша. Хәҙер ул Юлия Чичеринаның фронт ижади бригадаһы составында позицияларҙа һәм тыл зоналарында яугирҙар алдында сығыш яһай.

✓Башҡортостан спортсылары пара-ски буйынса Рәсәй чемпионатында һәм беренселәгендә дүрт миҙал яуланы, тип хәбәр иттеләр республиканың Спорт министрлығынан. Пара-ски (парашют менән һикереү + гигант слалом) буйынса Рәсәй чемпионаты һәм беренселеге Кемеров өлкәһендә үтте, унда илдең 12 төбәгенән спортсылар ҡатнашты. Пара-ски - икебәйгелә Виолетта Седлецова һәм Илшат Карамов көмөш пизер булды. Башҡортостан спортсылары Артем Боровик, Евгений Иванов, Илшат Карамов һәм Олег Шершнев команда ярыштарында көмөш миҙал яуланы.

✓Башҡортостанда ауыр тормош хәлендә ҡалғандарға матди ярҙам күрһәтеү тәртибе тураһында положение үҙгәртелде. Документтың яңы редакцияһына ярашлы, тәбиғәт афәттәре һөҙөмтәһендә зыян күргән йорт хужаларына түләүҙәр күләме 5000 һумдан 10 000 һумға тиклем арта. Бынан тыш, яңы ҡағиҙәләр буйынса, янғындан зыян күргән йорт хужаларына 5000 һумлыҡ матди ярҙам элекке кеүек ғаиләгә түгел, ә һәр милексенең өлөшөнә пропорциональ рәүештә бүленә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикабыҙҙың данлы улы һәм легендар совет дипломаты Кәрим Хәкимовтың тыуыуына 135 йыл тулыуҙы билдәләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Ҡарарҙан күренеүенсә, юбилей сараларында "Ҡыҙыл паша"ның СССР-ҙың Яҡын Көнсығыш һәм Көнбайыш Азия илдәре менән дипломатик мөнәсәбәттәр булдырыуға һәм үҫтереүгә индергән өлөшөн сағылдырыу ҡарала. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, хәҙерге Бишбүләк районының Дүсән ауылында тыуып үҫкән яҡташыбыҙ - совет Рәсәйенең ғәрәп донъяһындағы тәүге тулы хоҡуҡлы вәкиле була.

✓Көйөргәҙе районының Ермолаевка станцияһынан Мароккоға (Төньяҡ Африка) Маяҡ май заводы етештергән көнбағыш шроты оҙатылды. 3,5 мең тонна продукция 53 бункер вагонына тейәлде. Йөк 25 көндә Танжер-Мед портына барып етергә тейеш, тип хәбәр иттеләр Куйбышев тимер юлы Башҡортостан филиалының матбуғат хеҙмәтенән. Ведомствола тимер юлдар буйлап Африкаға, шулай уҡ Иранға, Һиндостанға, Яҡын Көнсығыш илдәренә йөктәрҙе даими рәүештә оҙата башларҙар тип көтәләр. Бынын өсөн Төньяҡ - Көньяҡ халыҡ-ара транспорт коридорын файҙаланыу күҙаллана.

✓ *Программа сиктәрендә яңы быуын белгестәрен, беҙгә алмашҡа киләсәк һәм башлаған эштәребеҙҙе дауам итәсәк, агросәнәғәт фәне өлкәһендә Башҡортостанды алға сығарасаҡ йәш ғалимдар әҙерләү ҡарала.*



*ҺӘЙБӘТ БИТ!*

# УҠЫУ ЙОРТТАРЫБЫҘ...

## һис бирәүҙән кәм түгел!



(Башы 1-се биттә).

***Илдар Ғәбитов, Башҡорт дәүләт аграр университеты ректоры:*** Беҙҙең аграр университет импортты алмаштырыуға һәм илдең аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә йүнәлтелгән ике стратегик проектты уңышлы яҡлаһы һәм "Өҫтөнлөк 2030" федераль программаһына инде. Программа уҡыу йортобоҙ үҫеше өсөн ҡеүәтле драйвер булып тора. Ҙур күләмле башҡа эштәрҙән тыш, мәҫәлән, юғары технологиялы эш урындары менән яңы ике ғилми лаборатория булдырыла: Агробиотехнологиялар һәм Агросәнәғәт комплексында һағма интеллект лабораториялары. Программа сиктәрендә яңы быуын белгестәрен, беҙгә алмашҡа киләсәк һәм башлаған эштәребеҙҙе дауам итәсәк, агросәнәғәт фәне өлкәһендә Башҡортостанды алға сығарасаҡ йәш ғалимдар әҙерләү ҡарала. Йәғни уҡыу йортонон стратегик өҫтөнлөгө булып ауыл биләмәләрен үҫтереүгә һәм илдең аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә йүнәлтелгән профессионалдар әҙерләү тороуын һыҙыҡ өҫтөнә алабыҙ. Бының өсөн, әлбиттә, беҙгә үҙгәрергә, интенсив эш режимына күсергә, үҙ көсөбеҙгә ышанырға һәм бергәләп ҙур һөҙөмтәләргә өлгәшергә һәләтле булыуыбыҙҙы аңлау мөһим. Коллектив яңы һынауҙарға әҙер, ҡуйылған маҡсаттарға өлгәшә алырбыҙ, тип ышанам.

***Олег Баулин, Өфө дәүләт нефть техник университеты ректоры:*** Нефть техник университеты "Өҫтөнлөк 2030" федераль программаһында 2021 йылдан алып ҡатнаша. Ошо осор арауығында беҙҙең юғары уҡыу йортонда ғилми-тикшеренеү, инновацион һәм белем биреү эшмәкәрлектәренең иң алдынғы тәжрибәләре тупланды. Беҙ биш стратегик проект буйынса инновацион ҡарарҙар һәм эш алымдары тәҡдим итәбеҙ. Университеттың программала артабан да ҡатнашыуы үткәрелгән ғилми-тикшеренеү эштәренең актуаллеген һәм университет һайлаған үҫеш векторының дөрөҫлөгөн раҫлай. Бынан тыш, беҙ "ӨДНТУ - нефть һәм газ политехы" тип аталған вуздың маҡсатлы моделенә йүнәлеш алдыҡ. Юғары уҡыу йорто белем биреү эшмәкәрлеген үҙгәртеп ҡороу йәһәтенән бик күп башланғыстарҙы тормошҡа ашыра. Бөгөн университет алдында яңы амбициоз бурыс тора - заманса инженер кадрҙары әҙерләү. Белгестәр яңы технологик алымдар уйлап табыуҙан йәки улар менән эш итә белеүҙән тыш, яңылыҡты шунда уҡ производствоға индерергә лә һәләтле булырға тейеш.

***Валентин Павлов, Башҡорт дәүләт медицина университеты ректоры:*** "Өҫтөнлөк 2030" федераль программаһы сиктәрендә беҙ 18 ғилми лаборатория булдырҙыҡ. Уларҙың барыһы ла фәндең комплекслы үҫеше өсөн мөһим. Бөгөн юғары уҡыу йорто инновацион үҫеш һәм технологик лидерлыҡҡа ынтылған аныҡ йүнәлеш һайланы. Әлеге ваҡытта медицина университеты Урология һәм клиник онкология институтының ғилми лабораторияларында, Евразия милли белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусында һәм Фундаменталь медицина институтында тикшеренеү эштәре алып бара. Беҙ хәҙер яңы молекулалар һәм аҡһымдар синтезы менән шөғөлләнәбеҙ, яңы фәнни гипотезалар тәҡдим итәбеҙ. Юғары технологик әҙерлек кимәлендәге дарыуҙар һәм биомедицина технологияларын булдырыу буйынса эштәр дауам итә. Башҡорт дәүләт медицина университетының төп маҡсаты - кеше һәм уның һаулығы. Беҙҙең өсөн илебеҙ һәм республика граждандарының донъя стандарттары буйынса юғары квалификациялы ярҙам алыуы мөһим. Үҙгәреүҙәр аша юғары уҡыу йорто инновацион халыҡ-ара медицина университеты кимәленә табан бара һәм был юлдың дөрөҫ булыуына ышанабыҙ.

***Вадим Захаров, Өфө фән һәм технологиялар университеты ректоры:*** "Өҫтөнлөк 2030" федераль программаһы сиктәрендә Өфө фән һәм технологиялар университетына үҙ проекттарын тормошҡа ашырыуға 100 миллион һум аҡса бүленә. Был сумма, тәү сиратта, төрлө технологик проекттарҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлтеләсәк. Былтыр юғары уҡыу йортонда "Октава" акустик лабораторияһы асылды. Беҙ төрлө технологик процестарҙа тауыштың барлыҡҡа килеү тәбиғәтен тикшерәбеҙ. Фәнни-тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләре скважиналар һәм ҡаҙылма байлыҡ ятҡылыҡтары торошон контролдә тотоу, шул иҫәптән ер аҫтын экологик мониторинглауҙа яңы сенсор системаларын һәм тикшеренеү технологияларын индереү рәүешендә тормошҡа ашырыласаҡ. Был эш йүнәлештәре нефть һәм газ тармағы предприятиелары өсөн бик кәрәк. Программа проектарын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә, индустриаль партнерҙар менән берлектә Өфө фән һәм технологиялар университетының авиадвигателдәр эшләү һәм иҡтисадтың башҡа мөһим тармаҡтары өлкәһендә Рәсәйҙең технологик лидерлығына, шулай уҡ Башҡортостандың артабанғы фәнни-технологик үҫешенә индергән өлөшөн билдәләгән күрһәткестәргә өлгәшергә ниәтләйбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**- Республика Башлығы Радий Хәбировтың университеттарҙы үҫтереү программаһын яҡлауҙа шәхсән ҡатнашыуы төбәк етәкселегенең фән һәм мәғариф үҫешенә ниндәй әһәмиәт биреүен һыҙык өҫтөнә ала, - тип фекерен белдерҙе БР Йәмәғәт палатаһы рәйесе, философия фәндәре кандидаты Данияр Абдрахманов. - Уның ярҙамы һәм әүҙем позицияһы федераль үҙәктең иғтибарын республика башланғыстарына йәлеп итергә, власть, юғары уҡыу йорттары һәм бизнес араһында үҙ-ара эш итеүҙе нығытыуға булышлыҡ итә. Республика университеттарының "Өҫтөнлөк 2030" программаһына инеүе төбәктә үҫтереүгә ошо стратегик ҡараш һәм Башҡортостанды инновацион үҫеш лидерҙарының береһе итергә ынтылыш хаҡында һөйләй ҙә инде. Властың, юғары мәктәптең, индустриаль һәм бизнес-партнерҙарҙың берлектәге эше заман һынауҙарын лайыҡлы үтергә, юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләүҙә көстәрҙе тупларға мөмкинлек бирә. Был программа биргән эш һөҙөмтәләре буйынса, Башҡортостан халҡы яңы эш урындары аласаҡ һәм, иң мөһиме, үҙ ҡалаларында һәм Өфөлә сифатлы белем алыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ.**

*ҠЫҪҠАСА*

# ӘЙҘӘГЕҘ, ӨМӘГӘ!

**Башҡортостанда йәшәүселәр яҙғы һәм көҙгө "Йәшел Башҡортостан" акцияһы барышында "Йәшел Рәсәй" Бөтә Рәсәй экологик өмәһендә ҡатнаша.** Республика Хөкүмәте бойороғонан күренеүенсә, 2025 йылдың 29 мартынан 10 майына һәм 30 августан 4 октябренә тиклем дөйөм өмәләр ойоштороласаҡ. 12, 19 һәм 26 апрель, шулай уҡ 20 һәм 27 сентябрь берҙәм өмә көндәре тип иғлан ителде. Бынан тыш, 19 апрелдән 10 майға ҡәҙәр "Йәшел Башҡортостан" акцияһы үткәрелә. Берҙәм көн - 26 апрель. Көҙгө акция иһә 20 сентябрҙән 4 октябргәсә уҙғарыла. Берҙәм көн - 27 сентябрь. Республика һәм муниципаль власть органдарына өмә ойоштороуҙы тәьмин итергә ҡушылған. Ҡала һәм район хакимиәттәренә "Йәшел Башҡортостан" акцияларын координациялау бурысы йөкмәтелгән.

✓ **Быйыл 23-25 майҙа Өфөнөң Совет майҙанында өсөнсө тапҡыр "Китап байрамы" ойоштороласаҡ.** Был юлы фестиваль программаһы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына һәм МХО геройҙарына бағышлана, тип яуап бирҙе Радий Хәбиров "Ирҙәрсә һөйләшеү" республика профилле сменаһында ҡатнашыусының һорауына. "Ә 29 майҙан 1 июнгә тиклем беҙ "Әйҙә, уйнарға" фестивален ойоштораbыҙ. Шулай уҡ быйыл йәй Совет майҙаны "Геройҙар дәүере" патриотик йыр фестивален уҙғарыу урынына әүерелә, көҙ көнө барыһын да "Көҙ романтикаһы" классик йыр фестивалендә көтәбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

✓ **11 апрелдә Башҡортостанда һунар миҙгеле асыла. Ул 20 апрелгә - 11 майға тиклем дауам итә.** Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, был осорҙа ҡаҙҙар (һоро ҡаҙҙан тыш), ата өйрәктәр, вальдшнептар, ата һуйырҙар һәм ҡорҙар ауларға рөхсәт ителә. Һунарсыларҙан ғаризалар 24 марттан ҡабул ителә. Документтарҙы Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша тапшырырға, пошлинаны ла түләргә мөмкин. Ғаризала һунар итеү урынын (өс зонаның береһе), тере өйрәктәр менәнме-юҡмы икәнен яҙырға кәрәк. Ауланған ҡош тураһында мәғлүмәттәрҙе һунар ваҡыты тамамланғандан һуң 20 көн эсендә еберер мөһим.

✓ **Дәүләт Думаһы беренсе уҡыуҙа бәлиғ булмағандарға энергетиктар һатыу өсөн административ яуаплылыҡ билдәләнгән закон проектын ҡабул итте.** 1 марттан Рәсәйҙә уларҙы һатыу тыйылды. Тыйыуҙы боҙған өсөн ҙур штраф билдәләргә тәҡдим ителә. Мәҫәлән, юридик берәмектәр өсөн ул - 300-500 мең һум, вазифалы кешеләр өсөн - 100-200 мең, ә граждандар өсөн 30-50 мең һум тәшкил итәсәк. Парламентарийҙарҙы йәштәр араһында энергия эсемлектәренең популярлығы борсой. Уларҙың зыяны табиптар тарафынан иҫбатланған, энергетиктар гипертония, йөрәктең ишемия ауырыуы, диабет һәм башҡа ауырыуҙар барлыҡҡа килеү хәүефен арттыра.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓30 мартта мосолмандар Рамаҙан айы ураҙаһының тамамланыуын билдәләй. Өфөлә байрам 23 мәсеттә иртәнге сәғәт 8-ҙә йәмәғәт намаҙынан башлана. Мэриянан хәбәр итеүҙәренсә, таңғы 6-нан көндөҙгө 3-кә тиклем Туҡай урамында - Цюрупанан Зәйнулла Рәсүлев урамына тиклем һәм Комаров урамында - "Ләлә-Тюльпан" мәсете янында ситке уң һыҙатта хәрәкәт сикләнә. Өфөләрҙән һәм баш ҡала ҡунаҡтарынан маршруттарын алдан билдәләүҙәрен һорайҙар. Майҙансыҡтарҙа хәүефһеҙлекте тәьмин итеү өсөн полиция, йәмәғәт именлеге үҙәге хеҙмәткәрҙәренең һәм табиптарҙың дежурлығы ойоштороласаҡ.

✓2025 йылда Өфөлә ҡала ситендәге 13 балалар учреждениеһының эше планлаштырыла, тип хәбәр итә ҡала Советы сайты. Балалар һауыҡтырыу лагерына путевка алыу өсөн атаәсәләрҙең береһенә йәки баланың законлы вәкиленә "Ял һәм һауыҡтырыу өлкәһендәге хеҙмәттәргә мохтаж һәм улар менән файҙаланған республика балаларын һәм үҫмерҙәрен иҫәпкә алыу" дәүләт мәғлүмәт системаһының мәғлүмәт порталы аша ғариза бирергә кәрәк. Ғариза раҫланғас, лагерға шылтыратып, килешеү төҙөргә һәм аҡса түләргә кәрәк. Артабан бала уҡыған урын буйынса мәғариф идаралығына (бүлегенә) документтар тапшырырға кәрәк.

✓1 июндән Өфөнән Истанбулға рейстар арттырыла. Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, был йүнәлеш буйынса осоштарҙы Utair авиакомпанияһы йәкшәмбе көндәрендә 186 урынлыҡ Boeing 737-800 самолеттарында башҡара. Өфөнән осоу урындағы ваҡыт буйынса көндөҙгө 1-се 30 минутка, Истанбулдан иһә киске 5-се 25 минутка планлаштырылған. Юлға 4 сәғәт 55 минут ваҡыт китә. Аэропорттың ғәмәлдәге теҙмәһендә Өфө - Истанбул - Өфө тура рейстарын Red Wings авиакомпанияһы башҡара.

✓Өфөлә ташландыҡ автомобилдәрҙе эвакуациялайҙар. Ленин районы хакимиәтенең телеграм-каналында хәбәр итеүҙәренсә, 15 апрелгә тиклем өфөләр okh.lenadm@ufacity.info электрон почтаһында хужаһыҙ транспорт тураһында хәбәр ҡалдыра ала. Транспорты фотоға төшөрөп, адресын да яҙырға кәрәк.

✓Өфөлә "шорт-трек" дисциплинаһында конькиҙа уҙышыу спорты буйынса Рәсәй чемпионаты үтте. Ярыштар Семен Елистратов исемендәге шорт-трек үҙәгендә ойошторолдо. Өфөгә Рәсәйҙең 15 төбәгенән һәм Беларусь Республикаһынан 80-дән ашыу спортсы килде, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән. Ҡатнашыусылар араһында Европа чемпионаттары, донъя чемпионаттарын һәм Олимпия уйындары еңеүселәре һәм призерҙары бар ине. Башҡортостандан ил беренселегендә өс спортсы ҡатнашты.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Аҡсарлаҡ, күл сарлағы**

**(Озерная чайка)**



Көньяҡ Уралда һәм, ғөмүмән, бөтөн илдә осраған иң ябай төр. Күгәрсендән саҡ ҡына эрерәк. Ҡош туйы осоронда инә ҡош та, ата ҡош та һоро төҫкә инә һәм алыҫтан ҡара булып күренә. Арҡаһы, ҡанаттары алһыл һоро, тәпәйҙәре һәм суҡышы ҡарағусҡыл ҡыҙыл. Йәш ҡоштарҙың ҡойроғонда ҡара һыҙат бар, ҡанаттарының осо - аҡ. Тауышы көслө, киҫкен итеп "кярр" тип ҡысҡыра.

Башҡортостанда электән Асылыкүл, Ҡандракүл, Шиңгәккүлдә йәшәй. Шулай уҡ Һаҡмар һәм Талҡаҫта, Әбйәлил һәм Учалы районының һыу сығанаҡтарында оя ҡора. 2001 йылда Шиңгәккүлдә күл сарлағы табылманы. 1963 йылда Учалы районының Ҡарағайлы күлендә күл сарлағының 240 ояһын һанағайныҡ, күлдең яһалма рәүештә һыу кимәлен күтәргәндән һуң унда бер ҡош та ҡалманы, улар Ҡалҡан күленә күсеп, аҙаҡтан Ҡарағайлыға кире ҡайтты. Һуңғы йылдарҙа күл сарлаҡтарын унан аҡбаш аҡсарлаҡтар этәреп сығарҙы.

Апрелдең тәүге декадаһында уҡ ҡайта. Май башына ҡоштар парын табып бөтә. Күлдең уртаһындағы уртауҙарға, кеше аяғы һирәк баҫҡан башҡа урындарға оя ҡора. 6-10 майға тиклем 3 йомортҡа һала. Ике ҡош сиратлап баҫа. Бәпкәләр 1-2 көн ояла була ла, яйлап йөрөй башлай. 5 аҙналыҡ ҡоштар осорға һәләтле инде.

Туҡланыуы төрлө: унда энәғараҡтар ҙа, ваҡ балыҡтар ҙа бар. Күл сарлағы ла үлгән йәки ауырыу балыҡ менән туҡлана, шуның менән тәбиғәтте таҙарта ла. Ваҡ кимереүселәргә лә һунар итә. Энәғараҡты йәй буйы ашай. Өлкән күл сарлаҡтары 1-3 йәшлек сабаҡ, табан балыҡтарын ашай. Селәүсен, бөжәк һәм башҡа умыртҡаһыҙҙар менән туҡлана, уларҙы һыуҙа ла, ерҙә лә, башлыса баҫыуҙарҙан тота. Бәпкәләр иһә бөжәктәр менән туҡлана, 3 аҙналыҡ булғас ҡына рациондарында балыҡ барлыҡҡа килә. Сүплектәрҙәге ризыҡ ҡалдыҡтары ла улар өсөн ҙур табыш.

Июль башында күл сарлағы бәпкәләре менән бергә төрлө күл-йылғаларҙың ҡомло ярҙарына күсеп йәшәй башлай, ошо уҡ мәлдәрәк ҡышлау урындарына ла йыйыналар. Иң аҙаҡҡы күл сарлаҡтары ла августан ҡалмай китеп бөтә. Шулай итеп, уларҙың көҙгө миграцияһы оҙайлығы буйынса яҡынса 50 көнгә етә.

Ҡышлау ерҙәре - Атлантиканың төньяғынан алып Африка һәм Азияның тропик киңлектәре. Беҙгә иң яҡын ҡышлау урыны - Каспий һәм Ҡара диңгеҙ.

Күл сарлағының беҙгә билдәле ғүмер оҙайлығы - 32 йыл.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ХӘТЕРЛӘП...

**21 мартта Өфөлә Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайына 30 йыл тулыу айҡанлы тантаналы йыйылыш уҙғарылды. Унда республикабыҙҙан һайланған сенаторҙар, РФ Дәүләт Думаһы, БР Дәүләт Йыйылышының төрлө саҡырылыш депутаттары, БР Хөкүмәте ағзалары, саҡырылған ҡунаҡтар ҡатнашты. Йыйылышта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты һәм сығыш яһаны.**

# ТОРМОШОБОҘҘО...

## дәүләт закондары көйләй



"Был юбилей - Башҡортостан тарихында мөһим ваҡиға. Беҙҙең парламент яңы Рәсәй барлыҡҡа килгән ҡатмарлы осорҙа булдырыла, халыҡ тауышы, уның мәнфәғәттәрен яҡлаусы, демократик үҙгәртеп ҡороуҙар гарантына әүерелә. Тәүге йылдарҙа депутаттарға ҡыҫҡа ваҡыт эсендә закон сығарыуҙағы етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә, Рәсәй Федерацияһы составындағы республиканың яңы ысынбарлығына һәм статусына тап килгән хоҡуҡи база булдырырға тура килә. Бөгөн беҙ Башҡортостан ҡануниәте илдә иң һөҙөмтәлеләрҙең береһе тип ғорурлыҡ менән әйтә алабыҙ. Күп кенә законларыбыҙ башҡа төбәктәр өсөн өлгө, федераль хоҡуҡи акттарға нигеҙ булды", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Республика парламенты спикеры Константин Толкачев килтергән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, өс тиҫтә йыл дауамында беҙҙең депутаттарыбыҙ барлығы 3,5 меңдән ашыу закон акттары ҡабул иткән. Уның әйтеүенсә, республикабыҙҙың ижтимағи-сәйәси һәм социаль-иҡтисади үҫешенә нигеҙ булырлыҡ норматив база булдырылған, ул 6 республика кодексынан һәм 250 база законынан тора. Шулай уҡ беҙҙең парламентыбыҙ федераль хоҡуҡ системаһын модернизациялауҙа бик әүҙем ҡатнаша, федераль закон проекттарын индереү буйынса төбәк парламенттары араһында абсолют лидер позицияһын биләй.

Билдәле булыуынса, совет осоронда һәм уҙған быуаттың 90-сы йылдары башында закондар сығарыу эшмәкәрлеге СССР Юғары Советы, союздаш һәм автономиялы республикаларҙың Юғары Советтары ҡарамағында булды. Әйтергә кәрәк, ул саҡтағы төрлө кимәлдәге халыҡ депутаттары, парламент сессияларына йылына бер-ике тапҡыр ғына килеп, алдан әҙерләнгән хоҡуҡи документтарҙы формаль рәүештә бер тауыштан ҡабул итә ине.

Уҙған быуаттың 80-се йылдары аҙағында - 90-сы йылдары башында барған үҙгәртеп ҡороу процестары, Советтар Союзының тарҡалыуы һөҙөмтәһендә Рәсәйҙең Юғары Советы үҙенең вәкәләттәрен киңәйтә алды, әммә 1993 йылда башланған сәйәси кризис ил власының бөтә тармаҡтарын да ҡайтанан үҙгәртеп ҡороу ихтыяжын барлыҡҡа килтерҙе. 1995 йылдың 5 мартында, Башҡортостан Республикаһының яңы Конституцияһына ярашлы, БАССР (БССР) Юғары Советы урынына республика закондарын әҙерләү һәм ҡабул итеү маҡсатында яңыртылған парламент - БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайы һайлана. Ул ике палаталы итеп ҡорола: даими нигеҙҙә эшләүсе Закондар сығарыу палатаһы һәм Вәкилдәр палатаһы. Ике палаталы парламент ике саҡырыш дауамында - 1995 йылдан 2003 йылға тиклем эшләй.

Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың ошондай составлы булыуын республикабыҙҙың яңыртылған хоҡуҡи базаһын булдырыу йәһәтенән уңышлы аҙым, тип баһаларға була. Закондар сығарыу палатаһы депутаттары 8 йыл дауамында тиҫтәләрсә яңы закондар ҡабул итте. Мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһының "Ҡортсолоҡ тураһында"ғы Законы Рәсәйҙә ошо өлкәгә ҡараған мөнәсәбәттәрҙе көйләүсе беренсе хоҡуҡи акт булды. Мәғариф, Башҡортостан халыҡтары телдәре, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт, физкультура һәм спорт, күп балалы ғаиләләрҙе дәүләт ярҙамы менән тәьмин итеү, йәшәйешебеҙҙең башҡа өлкәләренә ҡараған мәсьәләләр буйынса байтаҡ ҡына норматив акттар ҡабул ителде. Палата ултырыштарына ҡарауға сығарылған закон проекттары бик ентекле рәүештә тикшерелә, юридик дискуссиялар барышында уларға күп кенә төҙәтмәләр индерелә, ә был норматив акттарҙың сифатлы булыуын тәьмин итә ине.

Теге йәки был закон актын әҙерләү һәм ҡабул итеү барышында төрлө ҡыйынлыҡтар ҙа килеп сыҡҡан осраҡтар булды. Хәтеремдә, Закондар Палатаһының Социаль мәсьәләләр, ғаилә һәм әсәлек, һаулыҡ һаҡлау комитетын (2-се саҡырылыш) медицина фәндәре докторы, профессор Венер Ғәзиз улы Сәхәүетдинов етәкләне. Уның инициативаһы менән ошо комитетта "Башҡортостан Республикаһында тәмәке тартыуҙы профилактикалау һәм сикләү тураһында" закон проекты әҙерләнде. Әммә йәмғиәттә ошондай законды ҡабул итеүгә тотҡарлыҡ яһаусылар ҙа бар ине. Венер Ғәзиз улы һөйләгәнсә, уның өй телефонына бер нисә тапҡыр ниндәйҙер аноним кешеләр шылтыратып, законды ҡарауҙан алдыртыуҙы талап иткән, хатта уның үҙенә янағандар. Әлбиттә, был әҙәмдәрҙең, Венер ағайса әйткәндә, "тәмәке барондары"ның ялсылары булғанына бер кемдә лә шик тыуманы. Нисек кенә булмаһын, әле аталған закон 2001 йылдың 26 июлендә Рәсәйҙә беренсе булып ҡабул ителде.

Шәхсән үҙемә Закондар сығарыу палатаһының Мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт, туризм һәм йәштәр эштәре буйынса комитетында бер нисә закон проекты өҫтөндә эшләү насип булды. "Башҡортостан Республикаһында хоҡуҡи белем биреү тураһында" тип аталған закон проектын тулыһынса үҙем яҙҙым, уның буйынса парламент тыңлауҙары ла уҙғарҙыҡ, унда ҡатнашыусылар проектты ҡуш ҡуллап хупланы. Ҡыҙғаныс, әммә ул саҡтағы БР Хөкүмәте, законды ғәмәлгә ашырыу буйынса финанс сығанаҡтары юҡлығына һылтанып, ошо проектты ҡабул итеүгә ҡаршы булды. Шулай уҡ башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуға норматив нигеҙ булдырыу өсөн "Мәғариф тураһында"ғы БР Законының 7-се статьяһына тейешле үҙгәрештәр индереү буйынса закон проектын яҙҙым. Ошо проектты ҡарау ике йылға яҡын дауам итте, ул Закондар сығарыу палатаһында ике тапҡыр ҡабул ителһә лә, Вәкилдәр палатаһында ошо законды раҫлауға теше-тырнағы менән ҡаршы булған бер билдәле закон әһеленең ҡотҡоһо менән тотҡарланып ҡалды. Әммә тормош барыбер үҙенекен итте: БР Дәүләт Йәйылышы - Ҡоролтайының III саҡырылыш депутаттары башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы законлаштырҙы.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,**
**II саҡырылыш БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайының Закондар сығарыу палатаһы депутаты.**

✓ *Аймаҡ башында аҡһаҡалдар торған. XVI быуаттан бейҙәрҙе старшиналар алмаштыра. Бейҙәрҙең тарханлыҡ бирелмәгән, яһаҡ түләүсе башҡорттар менән тигеҙләштерелгән ҡайһы бер вариҫтары старшина тип билдәләнә.*



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Генерал Владимир Афанасьевич Обручев**

**(1842 - 1851 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған)**

Әлегерәк почта станцияларын тотоу менән шөғөлләнгән подполковник Корин нисек итеп почтмейстерҙарға ярап була икәнен яҡшы белә - уларҙан почта ҡағиҙәләрен теүәл үтәүҙе талап итмәһәң, шул да етә. Башҡа бер вазифалы кешеләр булышлығында ул почта чиновниктарынан казак почтасыларына ташламалар эшләүгә өлгәшә, бөтөн Ырымбур линияһы трактын бер ҡулда тотоу маҡсатында аноним товарищество төҙөй, Ырымбур ғәскәре идаралығы уҙғарған торгта ҡатнашыу өсөн ҡулаҡса менән тейешле кимәлдә залог индерә. Алып барыусыларҙың тулы составы менән бергә торгта наказный атаман, граф Цукато үҙе лә ҡатнаша. Кориндың дежур штаб-офицер булыуын, уның телгә алынмаған иптәштәренең кемдәр икәнлеген барыһы ла яҡшы белә (атаман адъютанты, ротмистр Жидков, уның ҡатыны ҙур капиталға эйә, чиновник Биберштейн, уның ҡыҙы ғәскәр идаралығы ассесоры, Кориндың туғаны Петр Кориндың ҡатыны була). Торг Корин файҙаһына тамамлана, станциялар бик ҙур хаҡҡа һәм уларҙы почта ҡағиҙәләренә ярашлы тотоу шарттарында уға тапшырыла.

Кориндың ниндәй кеше булыуы хәрби губернаторға ла билдәле була, әммә ул биләгән вазифа эшкә ҡамасауламай.

Хәрби совет Обручевтың тәҡдиме менән станцияларҙы торгта ҡуйылған хаҡҡа Корин ҡарамағына биреүҙе раҫлай. Контракт төҙөлөү менән ул был эштең төп хужаһына әйләнә. Линия буйлап йөрөп сығып, Корин барса станцияларҙа ла казактарҙы һәм бер ни тиклем чиновниктарҙы күпкә кәмерәк суммаға яллай. Бындай килемле эштең уға бирелеүенең сәбәбе - станциялар тотоу хоҡуғы Кориндың тик үҙе менән генә эш итеү, эшләгән ваҡыт өсөн һәм кәрәк булған саҡта түләүҙәрҙе алданыраҡ унан алыу шарттарында бирелә, ә почта чиновниктарының төпсөнөүле талаптарын ул үҙе көйләргә, почта ташығанда юғалған корреспонденциялар өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алырға тейеш була, бер кемдән дә залог алмай.

Ҡыҙыҡһынған кешеләр Кориндың ошо операциянан йылына 12 мең һум килем алыуын иҫәпләп сығара. Быны белгәндәрҙең аппетиттары арта бара, улар Кориндың был төшөмлө эште бик оҫта ойоштора алыуы хаҡында хәбәр тарата. Һуңынан хатта наказный атаман, граф Цукатоның бер мәжлестә, көнләшеүен йәшерә бирер, уның тураһында бай буласағы хаҡында ул үҙе миңә һөйләгәйне.

Обручевҡа эштең шулай килеп сығыуы һис оҡшамай. Уның кәңәшселәре йә ыңғай, йә киреһен һөйләй; Коринға ҡарата эш асырға булалар, быға канцелярия башлығы Лебедев та ҡаршы булмай. Кориндың станцияларҙы нисек тапшырыуын урындарҙа тикшереү кәрәк була. Уның, дежур штаб-офицер булараҡ, үҙен бөтә нәмә менән дә эш итә алыусы итеп күрһәтеп башҡарған ғәмәлдәрен тикшерә алырлыҡ кеше ғәскәрҙә булмай, һәм хәрби губернатор был бурысты үҙенең махсус йомоштар буйынса чиновнигы, Урал ғәскәренең ғәскәр старшинаһы Матвеевҡа йөкмәтә.

Матвеев Себергә тиклем бар линия буйлап ураган кеүек йөрөп сыға; кешеләрҙән һорау ала, Кориндың күҙалланған енәйәттәре хаҡында факттар йыйырға тырыша, бер-ике станцияла бер ниндәй мәғлүмәт алырлыҡ булмаған ҡағыҙҙар таба, әммә Кориндың станцияларҙы үҙе алған сумманан күпкә кәмерәк хаҡҡа тапшырыуынан башҡа икенсе бер факттар табылмай, ә быныһын ғәйепләнеүсе үҙе лә йәшермәй. Тикшереү һөҙөмтәләре был саҡта хеҙмәт эштәре буйынса Петербургҡа киткән Обручевҡа ебәрелә.

Петербургта уҫал ниәттә ҡылынған ҙур енәйәт эше хаҡында донесение яҙылып, хәрби министрға тапшырыла, законға ҡаршы бер нәмә лә эшләмәһә лә, ғәскәр идаралығы быға юл ҡуйыуҙа ғәйепләнә.

Казак ғәскәрҙәре эштәре менән шөғөлләнгән хәрби поселениелар департаменты, ошо донесениеға яуап итеп, законға ярашлы тикшереү эшен асыу хаҡында ҡарар сығара, шуның менән бергә хәрби министр граф Чернышевтың ғәскәр идаралығы ағзалары составының уға йөкмәтелгән бурыстарҙы үтәүҙә ни тиклем ышаныслы булыу-булмауына иғтибар итеү кәрәклеге хаҡындағы бойороғо ла ҡушып бирелә.

Хәрби поселениелар департаменты ҡағыҙы Ырымбурға ебәрелә, бында, Обручев булмаған саҡта хәрби губернатор вазифаһын генерал-лейтенант Толмачев башҡарған була. Ул тәфтиш эшен ҡуҙғата, уны башҡарыу 1-се Ырымбур казак полкы командиры, полковник Бергҡа һәм корпус штабының өлкән адъютанты, капитан Михайловҡа йөкмәтелә. Документтар, эш ҡағыҙҙары менән танышҡан арала Кориндың контракт ваҡытының яртыһы уҙып китә, ул контракт менән билдәләнгән түләүҙәрҙе тулыһынса алыуын дауам итә һәм үҙе яллаған почтасыларҙы ҡәнәғәтләндереп тора. Кориндың башҡалар белмәгән компаньондары, үҙҙәренең эшкә һалынған капиталдарын юғалтыуҙан хәүефләнеп, беренсе йылда алынған килем иҫәбенән аҡсаларын кире ҡайтартыуға өлгәшә, үҙҙәре ингән эштән юғалтыуһыҙ сыға, әммә файҙа ла алмай. Корин әлеге эштең берҙән-бер хужаһы һәм милексеһе булып ҡала бирә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

ҺИНЕҢ ХОҠУҒЫҢ

# АТАЙҘАРҒА...



**Социаль фондтың Башҡортостан буйынса бүлексәһендә республикала атайҙар өсөн социаль һәм страховка түләүҙәре тураһында һөйләнеләр.**

***Бала тыуғанда бер тапҡыр бирелә торған пособие.*** Әгәр атаәсәнең икеһе лә эшләй йәки эшһеҙ икән, улар үҙҙәре пособиеға кемдең ғариза яҙасағын хәл итергә тейеш. Атай кеше генә эшләһә, аҡса уға түләнә. Республикала сумма район коэффициенты менән бергә 30,9 мең һум тәшкил итә. 2024 йылда 4 меңдән ашыу ир-егет пособие алған.

***Баланы йәш ярымға тиклем ҡарау буйынса пособие.*** Аҡса отпуск алған ата-әсәгә тәғәйенләнә. Эшләп йөрөгән ата-әсәгә пособие ике календарь йылы өсөн уртаса эш хаҡынан 40 процент күләмендә билдәләнә. Эшләмәгәндәргә пособие килемде һәм мөлкәтте комплекслы баһалау һөҙөмтәһендә минималь күләмдә тәғәйенләнә, Башҡортостанда сумма 11,6 мең һум тәшкил итә. 2024 йылда республикала 2,7 мең самаһы ир-егет ошо пособиены юллаған.

***Бала тыуыуға һәм уны тәрбиәләүгә бәйле айлыҡ пособие.*** Пособие ғариза биргән ата-әсәләрҙең береһенә тәғәйенләнеүе мөмкин. Пособие тәғәйенләү өсөн ғаиләнең килеменә һәм мөлкәтенә комплекслы баһа бирелә. Пособиеның күләме төбәктә бала өсөн билдәләнгән йәшәү минимумының 50, 75 йәки 100 процентын тәшкил итеүе мөмкин (Башҡортостанда пособиеның максималь күләме - 15,3 мең һум).

***Әсәлек (ғаилә) капиталына сертификат.*** Ир берҙән-бер ата-әсә булһа, сертификат алырға мөмкин. Шулай уҡ ул сабыйы тыуғанда Рәсәй гражданы булырға тейеш. Башҡортостанда 2024 йылда 45 атай Әсәлек капиталына сертификат алған. Бынан тыш, 2024 йылдан башлап сертификат хужалары аҡсаны тупланма пенсияны формалаштырыу өсөн тотонорға хоҡуҡлы.

***Бала ҡарау буйынса эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы.*** Әгәр бала ауырыһа, эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙын ата кеше лә юлларға мөмкин. 8 йәшкәсә бала өсөн пособие ике календарь йылдың уртаса эш хаҡынан 100 процент күләмендә түләнә (эш стажына ҡарамай).

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Ижтимағи мөнәсәбәттәр, ҡәбилә һәм ырыу бүлексәләре

**Күренекле рус этнологы, антрополог, археолог һәм гидролог Сергей Иванович Руденко 1885 йылдың 29 ғинуарында Харьков ҡалаһында тыуған. 1904-1910 йылдарҙа Санкт-Петербург университетын тамамлағас, Италияла, Францияла стажировка үтеп, антропология һәм археология буйынса тикшеренеү ысулдарын өйрәнә. 1906-1907 йылдарҙа Башҡортостан буйлап экспедицияға сыға һәм Рус музейының Этнографик бүлеге өсөн ғәйәт ҙур материал йыя. С.И. Руденко башҡорттарҙың тормошон һәр яҡлап, бик ентекле өйрәнә һәм ғәйәт бай коллекция туплай. Уҡыусыларыбыҙ иғтибарына уның "Башҡорттар. Тарихи-этнографик очерктар" тигән хеҙмәтенән өҙөктәрҙе ҡабатлап баҫтырабыҙ..**

Башҡорт ырыуҙары араһында ерҙәр XVII быуатта уҡ бүленеп бөтә. Ниндәйҙер ырыуға ҡараған ерҙәр уның милке булып иҫәпләнә, һуңыраҡ, ырыуҙарҙан аймаҡтар һәм түбәләр айырылғас, ырыу ерҙәре уларға бирелә. Рус дәүләте составына ингәнгә тиклем башҡорт ырыуҙары башында бейҙәр торған. Һуғыш ваҡытында улар күрше ҡәбиләләргә һөжүм башында торған, тыныс ваҡытта инде барлыҡ йорт эсендәге мәсьәләләрҙе хәл иткән. Аймаҡ башында аҡһаҡалдар торған. XVI быуаттан бейҙәрҙе старшиналар (ҡайһы берҙә бейҙәрҙең вариҫтары - кенәздәр) алмаштыра. Бейҙәрҙең тарханлыҡ бирелмәгән, яһаҡ түләүсе башҡорттар менән тигеҙләштерелгән ҡайһы бер вариҫтары старшина йәки "яҡшы кешеләр" тип билдәләнә.

XVII-XVIII быуаттарҙа башҡорттар ике ҡатламға бүленгән - хеҙмәттәгеләр һәм яһаҡ түләүселәр. Хәрби хеҙмәт үтергә бурыслы булыусылар һәм шул арҡылы яһаҡ түләүҙән азат ителеүселәр тархан тип йөрөтөлгән. Ғәмәлдә, тархандар "хеҙмәт итеүсе" ҡатламға ҡарамаған, ә хеҙмәт итеүсе һәм яһаҡ түләүсе ҡатлам араһында торған. Улар "рус кешеләре" менән Башҡортостандың көнсығыш һәм көньяҡ-көнсығыш сиктәрен һаҡлау хеҙмәтендә булып, сик буйында ла ер менән ирекле файҙаланыу хоҡуғына эйә булған. 1745 йылда яһаҡ түләүселәр 8395 йортто тәшкил итһә, 1431 тархан хужалыҡтары теркәлгән. Был ваҡытта инде тархандарҙан ғына торған ауылдар ҙа ойошторолған.

Башҡорт старшиналары, шул иҫәптән тархандарҙың ҡайһы берҙәре, халыҡ араһында ҙур абруйға эйә булған. Улар съездарға йыйылып, тышҡы сәйәсәткә ҡағылышлы ҡарарҙар ҡабул иткән, яһаҡ йыйыу өсөн яуап биргән.

Тархандарҙан башҡа барлыҡ башҡорттар, шул иҫәптән старшиналар, яһаҡ түләһәләр ҙә, башҡорттар араһында иҡтисади тигеҙһеҙлек бик асыҡ сағылған һәм улар араһында хакимлыҡ итеүсе байҙар ҡатламы айырылып торған. Ярлылар уларға ялланып эшләгән. Башҡорт йәмғиәте араһында иҡтисади мөнәсәбәттәр Башҡортостандың дүрттән өс өлөшөн алып торған ялан һыҙатында һәм башҡа урындарҙа бер төрлө булмаған. Ялан яғындағы малсылыҡ райондарында ул ярлыларҙың хеҙмәтен файҙаланыу булһа, урман һәм ер эшкәртеү райондарында ул ҙур процентҡа бурысҡа биреү һәм бурыс йөкләмәһе менән бойондороҡлоҡта тотоу нигеҙендә тормошҡа ашырылған.

**(Дауамы бар).**

*✓ Үҙешмәкәр художестволы коллективтарҙың фестивале мәлендә сәхнәләге алты ҡурайсыға ҡарап, шаҡ ҡаттым. Бөтәһе лә фронтовиктар. Икеһе протез ағас аяҡлы, берәһенең һыңар күҙе юҡ, ҡалған өсөһө лә инвалидтар.*



**Сибай институтында билдәле ғалим-ботаник, эколог, ҡурайсы, Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты уҡытыусыһы, биология фәндәре докторы, профессор, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Рәсәй Федерацияһының почетлы юғары һөнәри белем биреү хеҙмәткәре Сәфәрғәли Искәндәр улы Йәнтүриндың 80 йәшлек юбилейы айҡанлы уның "Татлыбайҙан башланған юл" исемле китабының исем туйы булып үҙҙы. Профессорҙы коллегалары, уҡыусылары, туғандары ҡотланы. Ғәҙәттә, бындай саралар юбилярҙы һәр яҡлап маҡтауға ҡорола. Был юлы сығыш яһаусыларҙың һәммәһе лә юбилярға рәхмәт йөҙө менән баҡты, зал шул тиклем ихлас әйтелгән рәхмәттәрҙән сағыу нурҙар менән балҡыны, тамашаға йыйылғандар, үҙҙәрен бер туғандай күреп, таралыша алмай маз булды. "Киске Өфө" гәзите исеменән беҙ ҙә юбиляр менән һөйләштек. Ысынлап та, был алсаҡ шәхес менән көн оҙоно һөйләшеп тә танһыҡ ҡанмай. Әле шул оҙон-оҙаҡ әңгәмәнең бер өлөшөн тәҡдим итәбеҙ.**

# ҠУРАЙСЫ

## Тәүге мәктәп

Мин Бөйөк Еңеү йылында ғаиләбеҙҙә алтынсы бала булып донъяға килгәнмен. Был мәлдә атайым Свердловскийҙа хеҙмәт-оборона заводында эшләгән. Һуғышҡа алынмауының сәбәбе ябай һәм ауылса: байҙарға батрак булып йөрөгән ваҡытында ҡамыт йүнәткәндә, беҙ әнәһен ҡапыл тартып, бер күҙен сығарған була. Ауыр мәлдәрҙә ул ауылдағы ҡатын-ҡыҙҙарҙың, үҙенең теле менән әйткәндә, берҙән-бер терәге булған. Әле мин иҫ белә башлағанда берәй йомош менән килгән апайҙар атайыма "ҡайнаға" тип һүҙ башлай торғайны, шуға мин уның исеме "Кайнаға" икән тип уйлай торғайным хатта. Хеҙмәт армияһындағы эш шул тиклем ауыр булғандыр, сөнки ул Свердловскийҙан ҡайтҡанда бик ныҡ ҡаҡшаған, йонсоған булған.

Беренсе класҡа элекке мәҙрәсә бинаһында урынлашҡан Татлыбай мәктәбенә барҙым, икенсе класҡа барыуыбыҙға яңы мәктәп төҙөлөп бөттө. Уҡыу миңә оҡшай торғайны. Бигерәк тә Балғазина Әсмә исемле матур ғына апайҙың уҡытыуы ныҡ иҫтә ҡалған. Ниңәлер матур яҙыу дәрестәренән генә артыҡ уныштарым булманы. Өсөнсө класта беҙҙе Йәмилә апай уҡытты. Эй, ярата инек үҙен! Ул беҙгә күрше өйҙә йәшәне. Тик кейәүгә сығып, ауылдан китте. Уға бер шофер егет грузовой тип аталған машинала килә торғайны. Дәрес ваҡытында матур, һылыу апайыбыҙға беҙ, малайҙар, һоҡланып ҡарап ултыра торғайныҡ. Шуға уның кейәүгә сығыуын бик ауыр кисерҙек. Теге егеттең машинаһына, ҡабат килеп йөрөмәһен тип, теләһә нәмәләр яҙып бөтә торғайныҡ. Әммә тормош үҙенекен итте, апайыбыҙ нисек бар, шулай тейәнеп китте лә барҙы. Етенсе класты бөткәнсе шул мәктәптә уҡыныҡ, аҙаҡ ул ун йыллыҡ булып китте. Заманына күрә, сағыштырмаса, бик һәйбәт мәктәп ине. Коридоры киң булыуы хәтерҙә ҡалған. Ауылда үткәрелгән бөтөн дөйөм саралар мәктәптең ҙур залында үтә торғайны.

## Өлөшлө бала

Ете йыллыҡты уҡып бөткәс, атай-әсәйемдең дә, үҙемдең дә артабан уҡырға уртаҡ теләгебеҙ булғандыр. Һуғыштан һуң донъялар рәтләнә башлағас, мөмкинлек тә артҡандыр. Әле уйлайым да, яҙмышым бит бөтөнләй икенсе төрлө булыу ихтималлығы ла булған. Сөнки атайыбыҙ хеҙмәт армияһында саҡта әсәйебеҙ балаларын ас итмәйем тип уйлап алып ҡайтҡан ике килолай бойҙай менән тотола. Бәхеткә, эш судҡа барып етмәй, сөнки ул саҡта әсәйем миңә ауырлы була, уны язалан ҡотҡаралар. Шуға микән, ул минең прокурор булыуымды теләй торғайны. Ни тиһәң дә, закондарҙың ни тиклем ҡаты булыуына ҡарамаҫтан, прокурор эште судҡа еткермәгән, ул ваҡытта бит бер ус бойҙай өсөн дә төрмәгә ултырта торған булғандар. Шуға әсәйем йыш ҡына миңә, өлөшлө бала булдың, ти торғайны.

## Үҙаллы тормош башы

Сибайҙағы өс ҡатлы 1-се мәктәп беҙҙең ауылдан күренеп тора торғайны, эргәһендә башҡа бейек йорттар ул саҡта юҡ ине әле. Шунда, йәки Баймаҡтағы тау техникумына барырмын, тип уйлап йөрөгәндә әсәйем Темәстә интернат асылғанын ишетеп ҡалған. Күп балалы ғаиләләрҙән һәм аталары һуғышта һәләк булғандарҙың балаларын алалар икән. Әсәйем атайыма ҡырҡа ғына итеп, баланы шунда алып бар, тине. Мисәүле аттар егеп, Мостай ауылы аша Ирәндекте артылып, тура юлдан Темәскә сығып киттек. Юл оҙонлоғо йөҙ саҡрым самаһы икән. Беҙгә күршебеҙ Зиннур исемле малай ҙа ҡушылды, атаәсәһе үлеп, ул тома етем ҡалғайны. Документтарыбыҙҙы теүәлләп, икебеҙҙе лә мәктәпкә алдылар. Темәстә беҙ өс йыл уҡыныҡ - 8-10 кластарҙы. Ҡулдарыбыҙға өлгөргәнлек аттестаты һәм паспорттар алып, үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫтыҡ. Ул заманда паспортлы булыу ҙур ваҡиға һанала торғайны!

## Тыуған тел

Мәктәптә уҡыған йылдарҙа руссаны насар белеү ныҡ бәкәлгә һуҡты. Ныҡлап өйрәнеп кенә алайым әле, тип үҙемә һүҙ бирә торғайным хатта. Тел практикаһы, йәғни аралашыу етмәүҙән икәнен аңлай инем, әлбиттә. Бөгөнгө балалар өсөн бындай проблема юҡ, телевизор ҡарап, интернет аша ғына өйрәнәләр хәҙер рус телен. Әммә мин улаҙы ла йәлләйем: туған телендә һөйләшеп, бишек йырын, әкиәттәр тыңлап үҫкән бала бөтөнләй икенсе бит инде ул. Башҡорт теленән уҡытҡан Сәлихов Мөрит ағайҙың бер класташ ҡыҙыбыҙҙы "Нимәгә ул башҡорт теле, беҙ русса һәйбәт белергә тейешбеҙ", тигәне өсөн ныҡ итеп әрләгәне иҫтә ҡалған. Ағай үҙе яңы ғына университет тамамлап килеп уҡыта башлағайны, бейеү түңәрәге асып, матур-матур бейеүҙәр һала ине, үҙе лә бик матур бейей торғайны. Уның әйткәне мейегә ток менән һуҡҡандай булды: "Тел бер ваҡытта ла бөтмәҫ, ундай нәмәне һөйләмәгеҙ ҙә хатта!" - тине ул. Әммә ул ҡыҙыҡай барыбер рус теле факультетына уҡырға инде, рус егетенә кейәүгә сыҡты, балалары туған телен белмәй үҫте. Ә бит ул саҡта башҡорт теленә ҡурҡыныс янамаған да һымаҡ ине.

## Ҡурай? Әү!

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа уҡытыусылар етешмәй ине. Ун класты бөтөүгә беҙҙе Баймаҡҡа саҡырып алдылар. Миңә: "Һин элекке педучилище базаһында асылған Темәс интернатын бөткәнһең (ысынлап та, уҡытыусыларыбыҙҙың күбеһе педучилище уҡытыусылары ине), һәйбәт белем биргәндәр, яңы йыл башланғанса Йәнйегет мәктәбенә башланғыс кластарҙы уҡытырға бараһың", - тинеләр. Бер ниндәй әҙерлекһеҙ-ниһеҙ уҡытыусы булып киттем. Яңы йыл каникулдарынан һуң Ҡарамалы мәктәбенә ебәрҙеләр.

Ул йылдар ғүмерҙең иң күңелле бер мәле булып иҫтә ҡалған. Шул осорҙа ҡурайҙа уйнарға өйрәндем. Интернатта ҡурайсы егеттәр булды булыуын, әммә, уйнай белмәгәс, уларҙан өйрәнергә тырышманым. Ҡарамалыла сәбәбе үҙенән-үҙе килеп сыҡты. Үҙешмәкәр художестволы коллективтарҙың фестивале мәлендә сәхнәләге алты ҡурайсыға ҡарап, шаҡ ҡаттым. Бөтәһе лә фронтовиктар. Икеһе протез ағас аяҡлы, берәһенең һыңар күҙе юҡ, ҡалған өсөһө лә инвалидтар. Ниңәлер, "Хоҙайым, былар үлеп бөтһә, ауылда ҡурайсылар бөтә бит!" тигән уй анымды йәшен һымаҡ телеп үтте. Икенсе көнөнә үк ҡурай табып алып, тауыш сығырырға өйрәнә башланым, яҙға тиклем бер нисә көйҙә уйнарға өйрәндем. Икенсе йылына туған Татлыбай мәктәбендә географиянан уҡыта башланым, интернатта тәрбиәсе булдым. Үҙем уйнай белгәс, балаларҙы ла өйрәтергә тейешмен, тигән күңел талабы булғандыр инде, ҡурай түңәрәге ойоштороҙом. Хәҙер ул малайҙар етмеш йәшлек, эй, ғүмер тигәнең... Шул мин ҡурайға өйрәткән малайҙарҙың бер нисәүһен Ғата Сөләймәнов Өфөгә алып китте хатта. Үҙемә килгәндә, шунан бирле ҡурайҙан айырылғаным юҡ.

## Әрме

Татлыбай мәктәбендә эшләгәндә Башҡорт дәүләт университетының биология факультетына уҡырға индем. Өс ай уҡып ҡалдым, декабрҙә әрмегә алдылар. Хеҙмәт башланыуға ике аҙна үтеүгә, студенттарҙы армияға алмаҫҡа, тигән Указ сыҡты, тик хеҙмәткә алынғандарға ул ҡағылмай ине. Ырымбур өлкәһендәге Тоцк лагерында башланым хеҙмәтемде. Атом бомбаһы шартлаған урынды күрһәттеләр, ул Башҡортостандан йыраҡ түгел. Беҙ бала саҡта өлкәндәрҙең, еләкте ашарға ярамай, ул ағыулы, тигәне иҫкә төштө. Ул ваҡытта әрме хеҙмәте өс йыл ине. Присяга ҡабул иткәс, кем булып эшләнең, ниндәй һөнәрең бар, тип һораштылар. Үҙем менән ҡурай алып барғайным, гармунда, ҡурайҙа уйнай беләм, тинем. Телеграфист булырһың, тип, Морзе алфавитын уҡыта башланылар. Фәйҙаһы шул булды: автоматтан атып йөрөмәнем, дежур связист итеп тәғәйенләнәләр. Был вазифа бик яуаплы эш, Самаралағы округ штабы менән Тоцк дивизияһы араһындағы бәйләнеш өсөн яуап бирергә кәрәк. Миңә тиклем әллә нисә кешене был эшкә ярамһыҙ тип таптылар, мин былай хеҙмәттең аҙағына тиерлек шул вазифаны башҡарҙым, әрме аристократы булдым. Буш ваҡытта бергә хеҙмәт иткән бер марафонсыға эйәреп йүгерә торғайным. Был яңы һөнәргә бик әүәҫләнеп киттем, ул мауығыу миңә һәр ваҡыт ярҙам итте.

Хеҙмәт аҙағы етеп килгәндә бөтөн дивизия менән тейәлеп, Алыҫ Көнсығыштағы Ханка күле төбәгенә күсендек, поезға тейәлеп, ике аҙна буйы бөтә Рәсәйҙе тимер юлы буйлап үттек. Ханка күле эргәһендә Камень-Рыболов тигән ҡасаба бар икән. 1945 йылда бикләп ҡалдырылған казармаларҙы асып инеп, ремонтлап, шунда йәшәй башланыҡ. Беҙҙең өсөн был ҙур яңылыҡ һымаҡ ҡабул ителде, донъя күрҙек, бауыр аҫтына ел үткәрҙек. Шунда хеҙмәт иткәндә әсәйем үлеүе тураһында телеграмма килде. Самолетта ҡайттым, әммә ерләүгә һунланым, мин ҡайтҡанда өсөн уҡылалар ине. Кирегә поезд менән киттем, сентябрҙең аҙағына барып, тағы ике ай хеҙмәт иттем дә дембелгә ҡайтарҙылар. Хеҙмәтемдең тағы бер ҡаҙанышы шул булды: запастағы офицер званиеһы алып ҡайттым. Ҡайтыуыма университетта хәрби кафедра асылғайны, әммә миңә уның кәрәге юҡ ине инде.

## Тәүге юғары вазифалар

Армияла булғанда уҡыуға ынтылышым һүрелмәне, химия китабы һәр саҡ эргәмдә йөрөнө, сөнки артабан уҡыуымды дауам итәсәгем көн кеүек асыҡ ине. Химия фәнен онотмаҫ өсөн һис юғы Менделеевтың химик элементтар периодик таблицаһын яттан белергә, онотмаҫҡа кәрәк. Был теләгем химияны яратҡандан, һөйөү булғандан түгел ине, әлбиттә. Университетта һөнәрем буйынса химия төп фән һанала ине, тимәк, уға мөнәсәбәт тә шундай булырға тейеш. Ынтылышымды күреп, һиҙеп йөрөгәндер, бәйләнеш начальнигы подполковник Рахлин хеҙмәтемдең аҙағында, һин партияға инергә лайыҡлы кандидат, тип, рекомендация яҙып бирҙе. Ул йәһүд милләтенән ине.

Тормошомдоң боролошло мәлдәрендә нилектәндер ошо милләт вәкилдәренең таянысын йыш тойҙом. Армиянан ҡайтып, уҡыуҙы дауам итеп, партияға инер алдынан рекомендация һорап, подполковникка хат яҙҙым. Ебәрмәҫ тип уйлағайным, оҙаҡ көттөрмәй, рекомендацияһы килеп етте. Шулай итеп, 23 йәшемдә коммунист булдым. Уҡыу менән бер рәттән, спорт менән шөғөлләнеүҙе лә ташламаным, беренсе йылда уҡ БДУ-ның саңғы буйынса йыйылма командаһы сафына алдылар. Ул ғына түгел, студенттарҙың спорт клубының рәйесе итеп һайландылар.

Икенсе йылына профком председателе вазифаһын тәҡдим иттеләр. Мин ни, уны-быны уйламай, ярай, ҡатыным менән кәңәшләшәйем, тинем. Баҡтиһәң, яҙылмаған тәртип буйынса, ундай тәҡдим булғанда шунда уҡ ризалашырға, кем менәндер кәңәшләшеү тураһында өндәшергә ярамай икән. Мин уйлағансы, икенсе бер егет ризалығын биреп өлгөргән, уның менән дә был темаға һөйләшкән булғандар. Ризалығымды әйтәйем тип профкомға килһәм, беҙ икенсе кешене тәҡдим итәбеҙ, ярай, конференция хәл итер, тиҙәр. Шулай ҙа икебеҙҙе лә профком составына индерҙеләр. Яңы һайланған состав профком рәйесен һайлағанда спортсмен егеттәр баштан уҡ минең кандидатураны күтәреп сыҡты, тауыш биргәндә күпселекте йыйып, профком рәйесе итеп һайландым һәм өс йыл дауамында шул эште башҡарҙым. Студент өсөн был бик юғары вазифа ине.

## Өйләнеү

Ҡатынам Вилүрә менән икенсе курстан һуң өйләнештек. Тәүге танышыуыбыҙ саңғы ярышында булды. Ул да Темәстән Баймаҡҡа күскән интернатмәктәптә уҡыған икән. "Һеҙ Баймаҡтанмы?" тигәйнем, баймаҡтарса ғорур итеп: "Әлбиттә, мин Баймаҡтан!" тип бик ихлас, шаярыу ҡатыш яуап бирҙе ул. Ярыш "Йәшел сауҡалыҡ" санаторийы эргәһендә булғайны. Шунан ҡайтышлай юл буйына һөйләштек. Ул осорҙа студенттар спорт менән бик әүҙем шөғөлләнә ине, һәр дөйөм ятаҡ

***✓ Япондар башҡорт ғаиләләре тураһында документаль фильм төшөрөргә килде. Уларҙың маҡсаты Рәсәйҙең киләсәге бармы-юҡмы, ғаилә йолалары дауам итәме, балалары нисек тәрбиәләнә тигән һорауҙарға яуап эҙләү ине.***



эргәһендә волейбол майҙансыҡтары була торғайны. Салауат Юлаев һәйкәле янындағы "пятачок" тип аталған майҙанда бейеүҙәр һуңыраҡ ойоштола башланы. Дүртенсе курста уҡығанда мине Баймаҡ районы студенттарының етәксеһе итеп һайлап ҡуйҙылар. Әлкә станцияһынан йыраҡ түгел Дим буйында һабантуй үткәреп ҡайтып килгәндә Салауат һәйкәле эргәһенә бейергә сығырға һөйләштек һәм икенсе көнөнә йолаға әүерелгән "пятачок" бейеүҙәре башланып китте. Математика факультетында уҡыған ҡатыным дүрт йәшкә кесе булһа ла, уҡыған курстарыбыҙ тура килә ине. Әле өйләнмәҫ элек, ҡатының башҡа факультеттан булырға тейеш, тигән уй ниңәлер башҡа һеңгәйне, сөнки мәктәптә бер специальность буйынса эш урыны берәү генә - икәүең дә бер һөнәрҙән булһаң, берәүеңә эш булмаясаҡ. Шул эске тауыш гел оҙатып йөрөнө мине, бәлки, студент булғансы уҡ мәктәптә эшләүемдең йоғонтоһо ла булғандыр. Ғаиләлә мин лидер булырға тейешлегемде лә белә инем, сөнки ул - студент, ә мин - профком председателе...

# ПРОФЕССОР



### Өфөләге фатир

Дүртенсе курста уҡығанда улыбыҙ Урал тыуҙы. Атай-әсәй булып, ҡулыбыҙға юғары белем дипломдары алып, Сибайға эшкә килдек. Мине мәктәп-интернатына химия, биология уҡытыусыһы итеп, ҡатынымды дүртенсе мәктәпкә математика уҡытыусыһы итеп тәғәйенләнеләр. Интернаттың бер мөйөшөндә бер бүлмәле фатир бар ине, шунда йәшәп, ике йыл эшләнек. Шул йылдарҙа Гөлнәзирә ҡыҙыбыҙ тыуҙы. Ғәҙәттә, килешеү буйынса өс йыл эшләргә тейеш булһаҡ та, диплом етәксем, билдәле фән эшмәкәре Борис Михайлович Миркиндың өгөтләүе буйынса мине Өфөгә Фәндәр академияһына саҡыртып алдылар.

Өфөлә йәшәү мәсьәләһенә килгәндә, университетты бөтмәҫ элек профсоюздарҙың өлкә комитеты биргән кооператив фатирыбыҙ бар ине. Уны алыуҙың үҙенә күрә ҡыҙыҡ тарихы бар. Университеттың беренсе ятағында йәшәгән ваҡытта балабыҙ тыуҙы. Икебеҙ ҙә уҡыйбыҙ. Ҡайным менән һөйләштек тә, уның пенсиялағы апайын бала ҡарарға ярҙам итергә Өфөгә саҡырҙыҡ. Комендат, үҙҙәре генә айырым бүлмәлә йәшәйҙәр, етмәһә, ҡәйнәһен дә алып килгәндәр, тип, шикәйәт яҙған. Ул саҡтағы ректор Чанборисов саҡыртып алды. Һин, студенттарҙың аристократы, ҡәйнәңде студенттар ятағында йәшәтәһең икән, бүлмәңдә бушат тиҙ генә, тип әрләп ташланы.

Профсоюздарҙың өлкә комитетына барырға тура килде. Комитет башлығы Елизавета Михайловна Немироваға хәлде аңлаттым, ситтән тороп уҡырға күсергә теләгемде әйттем. Ул кооператив фатир һорап, ғариза яҙырға ҡушты. Шулайтып, уйламаҫтан, бишенсе курста фатирлы булынды. Ул ваҡытта был башҡа һыймаҫлыҡ тойола ине. Сибайға йүнәлтмә буйынса ҙур теләк менән ебәрҙеләр, күрәһең, ул ваҡытта студенттарҙың лидеры Өфөлә ҡалдырыуҙы ҡурҡыныс тип тапҡандарҙыр. Ә мин кире Өфөгә ҡайтырымды белә инем.

### Ғалимлыҡҡа илткән юл

Фәндәр академияһының биология институтында эшләгәндә 1975 йылда фән кандидатлығына диссертациямды яҙып бөттөм. Яҙыуын яҙҙым, тик ҡайҙа яҡларға? Урын юҡ. Борис Михайлович, барып эшеңде күрһәт, тип, Ленинградҡа ебәрҙе. Диссертацияның темаһы "Үҫемлек берләшмәләрендә төрлө климат хәлдәрендәге үҙгәрешлекте (мозаикалылыҡты) өйрәнеү" тип атала ине. Был тема беҙгә тура килмәй, тип, кире ҡайтарҙылар. Бер-ике айҙан диссертациямды Мәскәү дәүләт университетының диссертация Советы рәйесенә тапшырҙым. Беҙҙә күптән түгел генә Өфөнән диссертация яҡланылар, бер юлы ике кешене ҡабул итмәйбеҙ, тинеләр.

Ул йыл шулай үтеп китте. Диссертация яҡлау Советы тапмай тағы ике йыл йөрөнөм. Борис Михайлович Киевҡа барырға кәңәш итте. Ул йылда Киевтағы биология институтының юбилей йылы ине. Шул айҡанлы унда төрлө тантаналы саралар уҙғарылған мәлгә тура килдем. Бер конференция ваҡытында ҡул күтәреп, һүҙ һораным. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында һеҙҙең институт Өфө ҡалаһына эвакуацияланған. Шул мәлдә һеҙҙең ғалимдар "Определитель растений" тигән ҙур ғилми хеҙмәт ҡалдырған, беҙ уны бөгөнгәсә ҡулланабыҙ, рәхмәт һеҙгә, тинем. Саҡырылмай килгәс, артыҡ һүҙ һөйләп торманым, әммә минең әйткәндәр быларға оҡшап ҡалды, эшемдә бер һүҙһеҙ ҡабул иттеләр. Шулай итеп, диссертациямды Киевта яҡланым. Ул ғына түгел, эшендә докторлыҡҡа дауам ит, тип, дәртләндереп ҡайтарҙылар. Был хәл 1981 йылда булды. Докторлыҡ диссертацияһын аҙаҡ Тольятти ҡалаһында яҡланым.

### Биология факультеты

Башҡорт дәүләт педагогия институтының Сибай факультеты деканы Раил Сәлихов булды. Ул - Темәс ауылы егете, философия фәндәре кандидаты. Элек Сибай-Өфө поезы Магнитогорскийҙа бер сәғәттәй туҡтай торғайны. Шул ваҡытта тәүгә осраштым мин уның менән. Шунда ул мине тәбиғәт фәндәренән уҡытырға саҡырҙы. Эшкә тип килһәм, декан футбол уйнағанда аяғын һындырған да, уның урынына Вәкил Исмәғил улы Хажинды билдәләгәндәр ине. Уның менән бергәләп эшләп алып киттек. Бер көн уға, әйҙә, биология факультеты асайыҡ, тим. Әйҙә, ти. Ул авантюрист, шәп кеше! БДПИ ректорына хат яҙып, мөрәжәғәт иттек, улар рөхсәт бирҙеләр. Әлбиттә, Вәкил Исмәғил улына Өфө юлын йыш тапарға тура килде. Уның кеүек үткер кешеләр һәр саҡ кәрәк. Һөҙөмтәлә, 1994/95 уҡыу йылына тәүге төркөмгә 25 студент ҡабул иттек. Хәҙер шул төркөмдә уҡыған биология фәндәре докторы Илгиз Вәрис улы Һөйөндөков биология факультетының деканы булып эшләп йөрөй. Шул уҡ төркөмдән икенсе фән докторыбыҙ Резеда Фирғәт ҡыҙы Хәсәнова (Хисмәтуллина) Башҡортостан Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы итеп һайланды. Факультетты асҡан ваҡытта ҡала башлығы Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов: "Кемде кәрәк тип табаһың, уҡытыусыларҙы үҙең һайла", - тине һәм саҡырған кешеләрҙең бөтәһенә лә фатир бирҙе. Шулай башланып киткәйне институттағы биология факультетының тарихы. Әлеге көндә ун аспирантымдың туғыҙы биология фәндәре кандидаттары, береһе әлегә яҡламаған. Ошо кимәлдән төшмәһәк, бик тә һәйбәт. Өфөләге университеттың биология факультетындағы уҡытыусылар беҙҙең студенттарҙы юғары баһалай. Сәбәбе ябай: беҙ аҡса өсөн генә эшләмәйбеҙ, уҡытыусыларыбыҙ ныҡ тырыштар, гражданлыҡ позицияларын төптән аңлап эшләйҙәр. Шуға мин ныҡ ғорурланам һәм эшемдән ҡәнәғәтмен.

### Япондар килеп…

80-се йылдарҙың аҙағында япондар башҡорт ғаиләләре тураһында документаль фильм төшөрөргә килде. Уларҙың маҡсаты Рәсәйҙең киләсәге бармы-юҡмы, ғаилә йолалары дауам итәме, балалары нисек тәрбиәләнә, улар киләсәктә кем булырҙар, тигән һорауҙарға яуап эҙләү ине. Тәҡдим иткән 5-6 ғаилә араһынан былар ни ғиллә менәндер беҙҙе һайлағандар һәм яҙ, йәй, көҙ көндәре килеп, беҙҙе фильмгә төшөрҙөләр. Туған ауылым Татлыбайҙағы тау башына менеп ҡурай уйнауымды яҙҙырып алдылар. Урал улымдың Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендә уйнағанын да төшөргәндәр. Бер үк көйҙө нисек уйнауыбыҙҙы, хронометражы тура киләме икәнен тикшергәндәр. Әлбиттә, беҙҙең ҡурайҙа уйнауыбыҙ тап-таман тура килгән. Шулай итеп, япондар атанан күргән уҡ юнғаны үҙҙәренсә иҫбат иткәндәр. Тимәк, уларса башҡорт ғаиләләрендә йолалар һәйбәт һаҡлана.

### Балалар һәм баланан татлылар

Өс балабыҙ бар. Урал улым медицина институтын бөттө, ун йыл күҙ ауырыуҙары институтында эшләне. Хәҙер үҙенең "Очки мира" тип аталған сифатлы күҙлектәр етештереүсе шәхси эше бар. Ике ҡыҙыбыҙҙың өлкәне Гөлнәзирә Сибай институтын тамамланы, педагогия фәндәре кандидаты, доцент. Уны билдәле психолог-блогер булараҡ яҡшы беләләр. Бәләкәй ҡыҙыбыҙ Айһылыу ҙа беҙҙең Сибай институтында уҡыны. Аҙаҡ Женевала университет тамамлап, әлеге көндә Берләшкән милләттәр ойошмаһында эшләй, үҙенең эш йүнәлеше буйынса 46 илдә шәхсән проекттарын булдырған. Француз егетенә кейәүгә бирҙек. Ул беҙҙең менән хәҙер башҡортса һөйләшә, беҙгә, ҡайным, ҡәйнәм тип өндәшә, башҡортса йырлай. Биш ейән-ейәнсәребеҙ бар. Гөлнәзирәнең ҡыҙы Миләүшә бейеү буйынса Нуриев исемендәге Өфө сәнғәт колледжын, аҙаҡ хореография буйынса институт бөттө, хәҙерге көндә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында эшләй, матур-матур бейеүҙәр ҡуя. Ейәнебеҙ Йыһанур әле колледжда ашнаҡсыға уҡый. Ялдарында ҡартәсәй, ҡартатай, тип килә һалып етә, хәленән килгәнсә беҙгә ярҙам итә. Уның дизайн буйынса ла һәләте бар, төрлөсә кейемдәр тегеп, шуларҙы һатып аҡса эшләй. Уралдың өлкән улы Искәндәр шәхси эшен асып йөрөй. Бүләсәребеҙ Тәлғәт мең йыллыҡ тарихы булған Прага университетын тамамлап, ашамлыҡтар етештергән кулинар предприятиела эксперт булып эшләй. Ҡытайҙа эшләп, ҡытай телен үҙләштергәйне, хәҙер чех телен өйрәнә. Өфө ҡыҙына өйләнде, былтыр Төркиәлә туйҙары булды. Атаһынан күреп, ҡурайҙа уйнай. Бәләкәй ҡыҙҙары Әйшә быйыл унынсы класта уҡый. Аллаһҡа шөкөр, бөтәһе лә һәйбәт!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Профессор булыу ҡатмарлы фән юлын үтеү генә түгелдер ул. Профессор булыр өсөн профессор булып тыуыу кәрәктер, ғәмһеҙ бала саҡта ла, ауыҙлыҡһыҙ егет ҡоронда ла, ғөмүмән, ҡайҙа йәшәүеңә, ниндәй мөхиттә тәрбиәләнеүеңә ҡарамай, тәбиғәт биргән юғары аура эсендә ғүмер буйы өлөшөңә төшкән вазифаға тоғро булып йәшәүҙән киләлер ул.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

✓ *Сәйәсмәндәрҙән алып таныштарға тиклем барыһы ла алдашырға ярата шул. Иҫләйһегеҙме: Жириновский, әгәр мине президент итеп һайлаһағыҙ, араҡыны - осһоҙ, бөтә яңғыҙ ҡатын-ҡыҙҙы ирле итәсәкмен, тип яр һала ине.*



КӨЛӨП АЛАЙЫҠ ӘЛЕ!



# ӨЙЛӘНЕҮ

– Ҡәләш, мин тиҙ генә сәй эсәм дә Фәрит дуҫҡа йомошҡа барып киләм әле. Ул эшкә китмәҫ борон.

- Бергә барырбыҙ, беҙ бит хәҙер бер ғаилә, - тип йылмая матурым.

- Әйҙә һуң, - тим мин дә, берсә кәләшемдең сибәрлегенә, берсә таҡтырлығына һоҡланып. Шаулап-гөрләп үткән туйҙан һуң баш та эшләмәйерәк тора тороуын, тик бер ғаилә булғас, хәҙер бергә йөрөргә кәрәк бит инде ул.

- Сәй ҡайнағансы баҙарға сығып ҡына килһәңсе, йәнекәйем, - тип уйҙарымды бүлде кәләшем.

- Ә нимә? - Мин аптырап ҡалдым.

- Бәй, сәй эсергә печенье ла юҡ, салат эшләргә помидор, ҡыяр, укроп та кәрәк, алма, әфлисун да бөткән, өҫтәл матур булһа, күңеллерәк тә инде, - ти кәләш һушты алырлыҡ итеп ихлас йылмайып.

Наҙанлығымдан оялып ҡуйҙым. Аяғөҫтө генә сәй һемереп сығып йүгергән саҡтарҙы оноторға ваҡыттыр инде, күрәһең.

Арманһыҙ булып баҙар юлын тапауым бушҡа булманы. Кәләштең аш-һыуға оҫталығы иҫ киткес икән: табын иҫ киткес бай, ризыҡтар телде йоторлоҡ тәмле булды. Бына ниндәй икән ғаилә тормошо! Әйтәм, кәләш алған дуҫтар туптай һимерә лә китә.

- Фәрит дуҫҡа бара һалайыҡ әле, - тим сәғәт уктарының алға етеҙ ҡуҙғалыуына иғтибар итеп,- как-раз хәҙер төшкөләккә ашарға ҡайта ул.

- Хәҙер, йәнекәйем, - тип ап-аҡ тештәрен күрһәтеп йылмая берҙән-берем. - Күлдәкте үтекләп, сәсте йыуып, биҙәнеп кенә алайым да...

Ике-өс сәғәт тә үтмәне, кәләш менән етәкләшеп ишектән сығып та киттек. Юл ыңғайы тағы ла баҙарға һуғылдыҡ.

- Кешегә күстәнәсһеҙ барыу килешмәй, - ти бит кәләшем. Магазинға ла инеп сыҡтыҡ.

- Шәп носки алайыҡ һиңә, бер юлы бер-ике пар, - тип бик ныҡышҡас аппағым - ризалаштым. Бер юлы кәләшкә лә туфли, күлдәк, сумка, башҡа вак-төйәк әйбер алдыҡ. Булғас, икебеҙгә лә булһын, тип бик дөрөҫ әйтә икән ул ҡатындар.

Фәрит дуҫтарҙың йортона килеп еткәндә күктә йондоҙҙар емелдәшә башлағайны инде. Эштән күптән ҡайтҡандыр инде. Ах, шайтан, дуҫымда ниндәй йомош бар ине һуң әле? Нисек кенә тырышһам да хәтергә төшмәне.

Кәләш алғас, төн генә түгел, көн үткәне лә, аҡса бөткәне лә һиҙелмәй икән. Ҡалған яғы - ожмах. Өйләнегеҙ, егеттәр, үкенмәҫһегеҙ!

# ҺАЙЛАНЫУ

Тышта - әбейҙәр сыуағы. Йәйҙе иҫләп, йылы көндәрҙе тойоп ҡалығыҙ, тигәндәй тәбиғәт. Төҙөк кенә йорт алдындағы эскәмйәлә ике ир ултыра. Йөҙҙәре уйсан, көсөргәнешле һөйләшеүҙән биттәренә алһыулыҡ йүгергән.

- Яңғыҙ йәшәүҙәре еңел түгел, - тип һуҙа тулы кәүҙәле төпөшө. - 30 сутый баҡса, һыйыр, быҙау, 15 һарыҡ - шул тиклем донъя миңә нәмәгә кәрәк булған?

- Һарыҡтарыңды кәметкәйһең түгелме һуң, ҡорҙаш? - тип һорай ҡолғалай оҙон, үҙе утә ҡаҡса ир.

- Һуң, ҡарап тороуға аҡыллы ғына күренәһең, күҙлегең дә бар, ә үҙең бушты һөйләйһең. Һарыҡты кәметеп була тиме? Йылына икешәрҙе бәрәсләп торалар бит, һуйып өлгөрөп булмай.

- Ярар, ҡыҙма, былай ғына әйтеүем. Ә Тәзкирә килен нишләп ҡайтып китте һуң, арыу ғына йәшәгән кеүек инегеҙ бит?

- Үҙем дә аптырайым. Ике ай арыу ғына йәшәп ҡалдыҡ. Белмәйем, нәмә етмәгәндер. Өй тулы донъя, кәртә тулы мал. Өйҙән сығып киткәндә: "Бар нәмәне йоҙаҡлап тотаһың, грамлап бүлгән ярмаларыңды үҙең бешер, астан үләһе башым юҡ", - тиеүе биткә төкөргәндәй булды. Һуң, биклəп тотаһың инде әйберҙе донъя көткәс.

- Ә күрше ауыл Тәслимә нишләп торламаны, үтә алсаҡ, төҫкә-башҡа арыу ғына күренә ине түгелме һуң?

- Теле бигерәк әсе ине. Үҙем ишеттем бер әхирәтенә мине нәмә тип һөйләгәнен. "Был әҙәмдең ҡолағына - ишеткес, ауыҙына - тештәр ҡуйһаң, һаранлығын, ваҡайлығын күрмәһәң, тракторҙай хырылдауын ишетмәһәң, йәшәргә була", ти. Күҙ алдына килтерәһеңме?

- Түбән ос Мәфтухаға ҡармаҡ һалып йөрөй инең түгелме?

- Бала-сағаһы бигерәк күп, үҙем отбой бирҙем. Һуң, ҡаймаҡты уңлы-һуллы тарата башлаһа, һәр береһенә күстәнәс йүнләһә, астан үләһеңме? Бала-сағаһы өйҙән сыҡмай шаярһа, үҙең урамға сығып олорҙай булырһың. Ә юғары яҡтан Шәмсиә аҡса яратты. Берәү төндә: "Шул тиклем әҙ аҡса табып, нисек шулай тыныс ҡына йоҡлай алаһың?" - тип, ирен уята икән, был да тап шундай. Ай һайын тун һорай - мин Абрамович түгел дәһә!

- Бәй, шул тиклем тунды нишләтә икән?

- Белмәйем, алып биргәнем булманы! Эй, ҡорҙаш, йүнле ҡатын-ҡыҙ табылмай, өйләнер ҙә ҡуйыр инем! Әллә, мәйтәм, анау ҡаланан күсеп ҡайтҡан Гөлмәрйәмдең ҡылын тартып ҡарарғамы?

Көҙгө ҡояш офоҡ артына инеп йәшенде. Әммә алтмыш биш йәшлек ике ҡарт кәләш һайлап ултыра бирҙе...

# ДӨРӨҪЛӨК КӨНӨ

Был донъяла хәйләһеҙ, алдашмайынса ғына йәшәп булмай, тиҙәр. Сәйәсмәндәрҙән алып таныштарға тиклем барыһы ла алдашырға ярата шул. Иҫләйһегеҙме: Жириновский, әгәр мине президент итеп һайлаһағыҙ, араҡыны - осһоҙ, бөтә яңғыҙ ҡатын-ҡыҙҙы ирле итәсәкмен, тип яр һала ине.

Магазинға керерлек тә түгел, ҡайһы костюмды кейеп ҡараһаң да һатыусы эргәгә йүгереп килеп етә, тап һеҙҙең өсөн генә үлсәп тегелгән, сисеп тә тормағыҙ, тип йәнде ала. Өс размерға ҙурыраҡ бит, олатайҙың бишмәтен кейгән малайға оҡшайым даһа, тиһәң, хәҙер модаһы шулай, тип ебәрә.

Был донъяны мотлаҡ үҙгәртергә кәрәк. Үҙемдән башлайым, бөгөндән башлап тик дөрөҫөн һөйләйәсәкмен. Иртән машинала эшкә барышлай ошоларҙы уйлап бара инем, ГАИ хеҙмәткәре туҡтатты. Документтарҙы, машинаны ентекләп ҡарап сыҡҡас, кәйефе ҡырылды, буғай, барыһы ла тәртиптә бит.

- Ниңә бик яй килә инең? - Тәртип һаҡсыһы документтарҙы һондо.

Бик ҡыҙыҡ һорау. Ғәҙәттә, ниңә шәп йөрөйһөң, тип йәнгә тейәләр. Башҡа ваҡытта мин, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен теүәл үтәйем, шуға яй йөрөйөм, тип яуаплар инем. Тик бөгөндән башлап дөрөҫөн һөйләргә булдым бит. Шуға күрә яуап былайыраҡ яңғыраны:

- Кисә әҙ генә эскәйнем шул, шуға яй киләм.

Тәртип һаҡсыһының ауыҙы йырылды, документтарҙы ҡулға ҡыҫты:

- Әйҙә, төш, тикшерәбеҙ!

Тел тик тормағас, бер урында трубкаға өрҙерҙеләр, ҡаланың икенсе осона алып барып анализ бирҙерҙеләр. Ярай әле организмда алкоголь юҡ тип таптылар, юғиһә, бер-ике йыл руль артына ултырып та булмаҫ ине. Ә бит кисә кис теш һыҙлауын баҫам тип ике йотом спирт уртлап ҡарағайным.

Эшкә өс сәғәткә һуңлап барҙым. Мин үҙем социаль өлкәлә эшләйем, дәүләт ярҙамына мохтаждарҙы ҡабул итәм. Кабинет ишеге алдында һыу буйы сират теҙелгән. Сираттағыларҙың сырайы ҡараңғы, һуңлап йөрөүем уларҙы бик ҡыуандырмай, ахыры.

- Һеҙ үзбәк милләтенән түгелме, бик оҡшағанһығыҙ?

Кабинетҡа беренсе булып кереүсенең был һорауы мине аптыратты.

- Юҡ.

- Бер ҙә юҡҡа ҡыҙмағыҙ, үзбәктәр ҙә бик һәйбәт халыҡ. Бына, мәҫәлән, Нурсолтан Назарбаев, Әбүғәлисина. Әгәр һеҙ үзбәк икән, йәшермәгеҙ, быныһ бер ояты ла юҡ.

Был әҙәм мине йыуатырға тырыша, буғай. Мин, ысынлап та, ҡыҙа башланым:

- Беренсенән, мин үзбәк түгел, икенсенән, Назарбаев менән Әбүғәлисина ла үзбәк түгел, өсөнсөнән, бында һорауҙарҙы һеҙ түгел, мин бирергә тейеш.

Эш олоға китте, әңгәмәсем ялыу менән етәксемә кереп китте. Һуңынан уныһы саҡырып, эшкә һуңлап йөрөү, килгән кеше менән әрләшеп тупаҫлыҡ бик алама ғәҙәттәр икәнлеген төшөндөрҙө, айлыҡ премиянан ҡолаҡ ҡағыуымды аңғартты. Аңланым, тип сыҡ та кит бит инде, юҡ, дөрөҫөн һөйләй торған көн булғас, үҙебеҙҙең ойошмалағы етешһеҙлектәрҙе асып һалдым, етәкселәргә лә әләктә. Кабинеттан сығыр саҡта ғына юғарыраҡ вазифаға үрләтеүгә кандидаттар исемлегенән төшөп ҡалып, эштән ҡыҫҡартылыусылар сафына беренсе кандидат булып ҡалыуымды аңланым. Етәксемдең ҡарашы быны бик асыҡ сағылдыра ине.

Шулай ҙа иң ҙурударҙы ҡатын яһаны. Киске табынға ултырғас, быға хәбәр һөйләйем, мәйтәм, анау күрше йортта йәшәгән ҡыҙ әллә ни арала ҡалаҡҡа һалып йоторлоҡ сибәргә әйләнгән, бер ҡараузан ғашиҡ булырлыҡ. Фекерҙе тамамлап булманы, эргәлә ултырған ҡатын һулаҡай ҡулы менән күҙ төбөнә тондорғайны, минут эсендә синәк ҡалҡып та сыҡты. Ҡатынға был да әҙ күренде шикелле, ҡараштары менән уҡлау һымаҡ ауырыраҡ нәмә эҙләүен күреп, кухнянан тая һалдым.

Юҡ, егеттәр, был донъя дөрөҫ һүҙ тыңлап йәшәүгә әҙер түгел, иртәгәнән тағы ла алдаша башлайым. Иртәрәк тыуғанмын, ахыры.




# ЯПТЫМИЗАЦИЯ

Район мәғариф идаралығы начальнигы Бошмай Эшҡырғанович стеналағы сәғәткә күҙ һалды.

- Көн үтеп бара, ә бөгөн бер мәктәп тә ябылманы, эш бармай, - тип бошоноп ҡуйҙы ул.

Шунан ҡаты уйға ҡалды. Ҡайһы мәктәпте ябырға була һуң? Райондағы утыҙ мәктәпте былай ҙа ун бишкә ҡалдырҙылар ҙа ул, әммә был ғына етмәй тиҙәр. Әһә, Сәфәр мәктәбе һаман эшләй бит. Бөгөн уҡ директорын саҡыртып, утлы табаға баҫтырырға кәрәк. Быға тиклем завод директоры булып эшләгән ауылдаштары ҡурсылап килде лә, кисә генә урынынан алғандар икән уны.

- Күптән ябылырға тейеш ине һеҙҙең мәктәп, һаман эшләйһегеҙ, әҙәмдән оят таһа, - тип ҡаршыланы Бошмай Эшҡырғанович мәктәп директорын. - Ил ҙур маҡсаттар менән йәшәй, модернизация бара, Ҡырымды үҫтерә, Сирияға ярҙам итә, ҙур сығымдар талап иткән сараларға әҙерләнә. Ә беҙ? Мәктәп ябырға ла ҡулыбыҙҙан килмәй, ғәрлектән ятып үлерлек! Әле мәктәптә нисә бала уҡый?

- Утыҙ, - тип бышылданы оялышынан ни эшләргә белмәгән директор ҡатын.

- Нисек утыҙ? Тегеләй көн генә егерме туғыҙ тигәйнең бит. Утыҙ булһа, мәктәпте ябып булмай ҙаһа?

- Бер бала ҡалалағы гимназиянан кире ҡайтты бит.

- Бынағайыш, ауыртмаған башҡа тимер таяҡ. Ниңә булһа ла һеҙҙән сыға. Модернизацияға ла ҡушылманығыҙ.

- Бигерәк рәнйетмәгеҙ инде, - тине директор ҡыҙарынып. - Модернизация бара ул, күрше ауылдағы балаларҙы мәктәпкә хәҙер ат менән ташыйбыҙ, автобусҡа барыбер бензин юҡ. 1-3 кластарҙы бергә уҡытабыҙ хәҙер. Киләсәктә өс класты ике йылда уҡытырға уйлашабыҙ, барыбер бер-береһенең дәресен ишетеп, аңлап ултыралар бит. Физика менән математиканы, химия менән биологияны берләштерергә иҫәп бар. Башҡорт, рус, инглиз телдәрен бер юлы уҡытырға ла мөмкин бит әле, барыбер телдәре буталып бөткән. Бер уҡытыусы тим инде. Ғәжәп ҙур экономия килеп сыға.

- Ә балаларҙан кемдәр сығыр һуң? - тип уны бүлдерҙе мөдир. - Унан онотолоп китеүен аңлап, бар көсөнә ҡысҡырып ебәрҙе. - Яптимизация, әй, оптимизацияны бик дөрөҫ аңлайһың икән. Башҡараһы эштәр, ай-һай, быуа быуырлыҡ әле беҙҙең...

- Уян, тием, әйләнеп ят, һаташаһың бит, - ҡатыны төртҡөләгәнгә уянып киткән Бошмай Эшҡырғанович бер килке ҡуҙғалырға ла ҡурҡып ятты. Унан еңел һулап ҡуйҙы. Барыһы ла төш икән, әлдә ошондай хәлдәр тормошта булмай әле.

**Марат ӘМИНЕВ.**

✔ ***Емеш - ул кеше күңелендәге үҙәк, уның эсендә изгелек, яҡшылыҡ. Үҙенең эске инанысы менән Емеш ауырлыҡтарҙы йырып сыға һәм, бер нимәгә ҡарамаҫтан, тормошто, кешеләрҙе яратыуын дауам итә.***



РӘССАМҒА ӨС ҺОРАУ

**Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, юғары категориялы уҡытыусы, "2014 йыл" премияһы лауреаты, АҠШ-та үткән халыҡ-ара "New York Realism" конкурсы призеры, "Rusha" студияһы етәксеһе Раушания БӘҘРЕТДИНОВАның Республика Милли музейында "Емеш" тип аталған картиналар күргәҙмәһе асылды. Экспозиция тарих менән бөгөнгөнө бәйләй, заман ҡуйған һорауҙарға яуап бирә, һәм тағы бер тапҡыр, яҡшылыҡ, мөхәббәт йәшәгән ерҙә тормош усағы бер ҡасан да һүнмәйәсәк, тигән хәҡиҡәтте раҫлай.**

# ЯҠШЫЛЫҠ ЙӘШӘГӘН ЕРҘӘ...

## тормош усағы һүнмәҫ



➔ **Раушания, һынлы сәнғәт юлына нисек килдең, ул бала саҡ хыялы инеме, әллә ниндәйҙер осраҡлылыҡ ярҙам иттеме? Атай-әсәйҙең дә һөнәре балаға тормош юлын һайларға ярҙам итә торған...**

- Минең алдымда: "Кем булырға?" тигән һорау торманы ла шикелле, сөнки үҙем иҫ белгәндән һәр саҡ һүрәт төшөрә инем. Минең атай-әсәйем дә ижади кешеләр ул. Атайым Мәсәүир тимер иретеп йәбештереүсе булып эшләһә лә, әҙәби һүҙгә ғашиҡ, үҙе лә шиғырҙар яҙа. Әсәйем Земфира ҡул эштәре менән булышырға ярата. Хәтерләйем, бәләкәй генә сағымда әсәйем минә төрлө төҫтәге матур ҡәләмдәр һатып алып ҡайтты. Ҡыуанаҡыуана һүрәт төшөрөргә тотондом. Күпме генә тырышһам да, сыймаҡланған ниндәйҙер дүңгәләктәрҙән башҡа бер нәмә лә килеп сыҡманы. Үҙем телгән матур һүрәттәр килеп сыҡмағас, әлбиттә, кәйефем ныҡ төштө. Шул саҡ атайым эргәмә килде лә: "Балам, ҡара әле, бына был нимәгә оҡшаған?" - тип минең "һүрәттәремә" төртөп күрһәтте. "Оҡшаған бит, күрәһеңме шуны үҙең?" Шул саҡ минең күнел күҙем асылдымы ни, сыймаҡлаған дүңгәләктәр эсендә ниндәйҙер образдар күрә башланым. Быны хыял менән ысынбарлыҡ бергә осраштымы, тип әйтә алам. Фантазиям минә яңы донъяны асты. Ул саҡта беҙ әле ауылда йәшәй инек. Тимәк, тәбиғәт мине үҙе һүрәт төшөрөргә өйрәтте. Беҙ ҡаҙ, өйрәк бәпкәләре көтәбеҙ. Шундай саҡта үләнгә ятам да, күккә бағам. Күк йөҙөндәге болоттар ҙа минә әллә күпме образдар бүләк итте.

Өйҙә иһә әсәйем беҙгә йоҡлар алдынан әкиәттәр уҡый торғайны. Шүрәле әле һаман да иҫемдә. Урал батырҙы әсәйемдән ишеттем. Зәйнәб Биишеваның "Кәмһетелгәндәр" романын уҡыған саҡта әсәйемдең илауы минә ныҡ тәьҫир итте.

Минә биш йәштә саҡта беҙ Ишембай ҡалаһы эргәһендәге микрорайонға күсендек. Ул саҡта еңел булманы минә, сөнки яңы урында бөтәһе лә урыҫса аралашалар, ә мин бер нәмә лә аңламайым. Рәсем менән мауыҡҡас, әсәйемә, мине һынлы сәнғәт мәктәбенә бирегеҙ, тинем. Ә ундай мәктәп ҡаланың үҙендә генә бар. Автобус менән барырға кәрәк, ҡай саҡ уныһы ла булмай. Шуға ҡайһы бер көндәрҙә сәнғәт мәктәбенә йәйәү йөрөргә лә тура килде. Иң мөһиме, мин үҙемдең тәүге уҡытыусымдан уңдым. Любовь Леонидовна күңеләмә рәссам булыу телгәнен һалды. Әкиәт буйынса эшләнгән тәүге һүрәтемде күргәс, ул: "Һин танылған рәссам буласаҡһың", - тине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙе яман шештән иртә үлеп ҡалды. Вафаты алдынан ул: "Рәссам буласаҡһың, Өфөлә үҙеңдең күргәҙмәңде эшләйәсәкһең", - тип әйтеп, минән вәғәҙә алды. Тағы ла: "Һин ҡатын-ҡыҙ, буласаҡ әсә. Балалар менән әйҙә улырырға ла тура килер, шуға һынлы сәнғәт уҡытыусыһына уҡыһаң, уларға ярҙам итәсәкһең", - тине. Ысынлап та, шулай килеп сыҡты ла. Мин башта Өфөлә педагогия училищеһының һынлы сәнғәт бүлеген тамамланым. Унда барыр алдынан Любовь Леонидовна училищела эшләгән үҙенең класташы Алик Насип улына, минә ярҙам итеүен һорап, хат ебәрҙе. Алик Вәлиуллин бик яҡшы педагог ине. Училищены тамамлағас, мотлаҡ Өфө сәнғәт академияһына уҡырға инергә кәрәклеген әйтте. Ә унда инер өсөн мин бик күп һүрәт төшөрөргә тейеш инем. Көнө-төнө шөғөлләндем, хатта уҡытыусым, минән бер нисә автопортрет эшләтер өсөн, кабинетка биклəп ултыртып ҡуя торғайны. Башҡа студенттар ял итә, күңел аса, ә мин рәсем төшөрөү менән шөғөлләнәм, арымай-талмай оҫталыҡты камиллаштырам.

Ысынлап та, Академияға еңел генә инеп киттем (артабан уны сәнғәт институты итеп үҙгәрттеләр). Уҡып йөрөгәндә кейәүгә сыҡтым. Беренсе курсты тамамлаған саҡта беҙҙә дизайн факультеты барлыҡҡа килде һәм мин унда ла уҡырға индем. Институтты тамамламаҫ элек Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә эш башланым. Өфөлә ҡалыу теләге ҙур ине, ләкин ярҙам итеүсе юҡ. Шул саҡта өйҙәрҙе биҙәү эшенә ең һыҙғанып тотондом. Өфөлә лә, ҡаланан ситтә лә өйҙәр биҙәнем, етмәһә, нәшриәттә эшләп йөрөйөм, йәнә лә картиналар яҙып һатам. Бына шулай тырышып, фатирлыҡ аҡса эшләй алдым. Матди хәлем бер ни тиклем нығынғас, бер ни тиклем тынысланып, тормошомдоң бер өлөшөн тик балаларыма бағышланым. Шул саҡтарҙа уҡытыу эшенә тотондом. Әммә профессиональ рәссам булыу теләге юҡҡа сыҡманы. Киреһенсә, тап ошо йүнәлештә барырға ныҡлы ҡарар иттем, былай ҙа һүрәт төшөрөүҙән айырылғаным булманы бит. Хатта саҡ ҡына һүрәт төшөрмәй торһам, ауырый башлай инем.

➔ **Һеҙҙең Зәйнәб Биишеваға арналған картиналар серияһы ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты, күргәҙмәнең үҙәгендә торған "Емеш" картинаһы бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Емеш-Зәйнәбтең өс ғүмер миҙгеле унда асыҡ сағыла - бәләкәс ҡыҙҙы еткән ҡыҙ ҡосаҡлаған, ҡыҙ үҙе иһә Зәйнәб инәй ҡуйынына һыйынған. Ни өсөн картиналар серияһы "Емеш" тип атала?**

- Мин әйткәйнем инде, бала саҡта әсәйемдең Зәйнәб Биишева романдарын уҡып илаған саҡтары тетрәндерә ине, тип. Был миндә онотолмаҫ кисерештәр ҡалдырҙы. Шуға ла әҙибәнең ижады менән ҡыҙыҡһыныу һүрелмәне. Хәҙер ҙә бит еңел булмаған заманда йәшәйбеҙ, МХО бара. Граждандар һуғышы булмаһа ла, кемдәрҙер яҡындарын юғалта, балалар аталарын көтә. Ҡайғы, хәсрәт, өмөт - бөтәһе лә бар. Зәйнәб Биишева әҫәрҙәре бөгөн шуға ла көнүҙәк. Бына ошо күренеш күңелемдә яңғыраш алды һәм мине картиналар сериһын яҙырға этәрҙе лә инде. Емеш - ул кеше күңелендәге үҙәк, уның эсендә изгелек, яҡшылыҡ. Үҙенең эске инанысы менән Емеш ауырлыҡтарҙы йырып сыға һәм, бер нимәгә ҡарамаҫтан, тормошто, кешеләрҙе яратыуын дауам итә. Зәйнәб Абдулла ҡыҙының яҙмаларындағы "Ауыр бала саҡ һәм йәшлек йылдарын иҫләп, хәҙер шул мохтажлыҡта үҫкән кескәй ҡыҙҙы, йәғни үҙемде ҡосаҡлап яратҡым, ҡурҡма һылыу, киләсәктә барыһы ла яҡшы буласаҡ, тип йыуатҡым килә", тигән һүҙҙәр тетрәндерҙе, инде тормошта үҙ юлын, урынын тапҡан яҙыусының шул мәлдәге күңел торошон сағылдырырға теләнем.

➔ **Һеҙ һүрәттәрегеҙҙә кешенең эске донъяһын күрһәтәһегеҙ. Хис-кисерештәрҙе тәрән итеп бирә алаһығыҙ. Ниндәй ул бөгөнгө заман, Башҡортостан рәссамдары унда ниндәй урын биләй, беҙҙә һынлы сәнғәттең киләсәге бармы?**

- Бар. Булмауы мөмкин түгел. Мин быны, донъя буйлап сәйәхәт итә башлагас, ныҡ аңланым. АҠШ-та үткән күргәҙмәлә алтын миҙал яулағас, мине Нью-Йоркҡа саҡырҙылар. Әйткәндәй, был миҙалды улым менән бергәләп яуланыҡ, тиһәм дә була. Сөнки ул инглиз телен камил белә һәм минең картиналарымды сайтҡа ул ебәрҙе, үҙе лә ҡатнашты. Нью-Йоркта бөтә донъя халыҡтары рәссамдары күргәҙмәһе бара ине, минә төрлө-төрлө рәссамдарҙың картиналарын иғтибар менән өйрәнеү форсаты тейҙе. Беҙҙәге комиссиялар ил, республика кимәлендәге күргәҙмәгә эштәр һайлап алғанда рәссамға бик ҡаты талаптар ҡуя. Һәм мин әлеге халыҡ-ара күргәҙмәләге картиналарҙы ҡарап сығып, беҙҙәге комиссия күптәрен үткәрмәҫ ине, тип уйланым. Сөнки мәғәнәһенә ҡарағанда, тышҡы фактура менән мауығыусылар байтаҡ. Беҙҙең Башҡортостанда рәссамдар мәктәбе шәп. Улар реаль итеп һүрәт төшөрөү генә түгел, эске мәғәнәне, метафораны бирә алалар, символизм яҡшы үҫешкән. Халыҡ-ара базарҙағы күп эштәр беҙҙә үтмәҫ ине.

Фотоаппараттар барлыҡҡа килгәс тә, рәссамдарҙан "Живопистең киләсәге бармы?" тип һораусылар булған. Был һөнәр юҡҡа сығыр, тип уйлагандар. Эйе, хәҙер нейроселтәр барлыҡҡа килде, уның үҙ мөмкинлектәре бар. Ләкин һәр эшкә энергетика һалынырға тейеш, ә ҡул хеҙмәте ул һәр саҡ баһалы һәм мөһим. Шулай буласаҡ. Минең көслө остаздарым бар, уларҙан мин һаман да өйрәнәм. Картина стенаға эленгән ниндәйҙер бер биҙәк кенә түгел, ул уйландырырға, тәьҫир итергә тейеш.

Картиналарыма мәғәнә һалырға тырышам, сөнки кешеләргә үҙемдең алған тәжрибәмде еткерергә, уларға ярҙам итергә теләйем. Тап үҙемдең күргән-кисергәндәрем киндергә буяу булып төшә. Мәҫәлән, "Үҙемә юл" тигән сериям бар. Унда үҙәк урынды Йән тәшкил итә. Был Йән ергә ебәрелер алдынан тормош юлында үҙе үтәсәк дәрес-һабаҡтарҙы һайлай. Түбәндә сансара тәгәрмәсе төшөрөлгән, ә кеше - тәгәрмәс эсендә, образлы итеп әйткәндә, ул ниндәйҙер ҡыйынлыҡтарҙы йырып сығырға тейеш. Ҡыйынлыҡтар тормошта сәләмәтлек, матди хәл һ.б. менән бәйле. Нимәне ҡабул итәбеҙ, үҙебеҙ аша үткәрәбеҙ - шул беҙҙе азат та итә, тормошобоҙҙо еңеләйтә.

Йәнә лә энергетик үҙәктәр тураһында "Мин - ете" тип аталған сериям бар. Һәр үҙәк ни өсөн яуаплы, нимә уға асылырға ҡамасау итә, бына шуны аңлатам. Яңыраҡ "Бәхет вибрацияһы" тигән серияны тамамланым. Шәхси тормошомда ла тәрән кисерештәр, хәсрәтле мәлдәр булды. Үпкә-үкенес, яңғыҙлыҡ темаһы бер мәл алға сыҡты. Тап шул саҡта яман шеш ауырыуына ла дусар булдым. Хатта "Үлем-нөктә" йәки "Тормошто ҡайтанан аңлай башлау" тигән картиналар ҙа барлыҡҡа килде. Ошо ауыр хәлдән сығырға ярҙам иткән китаптар ҙа булды. Тап үҙемдең сирем арҡаһында рухи практика менән шөғөлләнә башланым. Йоганы өйрәнеү ярҙам итте.

Тормошто яңы кимәлгә сығып аңларға тырышам, үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ алырға өйрәнергә, берәүгә лә үпкә һаҡламаҫҡа кәрәк. Унан инде ғилемемде нығытыр өсөн Һиндостанға, Гималайға сәфәр йөрөүҙән башланды. Хәҙер мин арт-терапевт, инде үҙем дә башҡаларға ярҙам итәм, уҡыусыларым бар.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**яҙып алды.**

✓ *Ен, шайтандар - хөрәфәткә һаналмай, уларҙың Ер йөҙөндә барлығы хаҡында Ҡөрьән аяттары, Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) хәҙистәре бихисап. Бик һирәк кенә булһа ла әҙәм балаһының күҙенә лә күренеүсән улар.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЛИДЕРЛЫҠ...
## нәҫелдән күсә

■ Халыҡ-ара ғалимдар төркөмө лидерлыҡ сифаттары менән бәйле ДНК молекулаһын асыҡлаған. Йышыраҡ осраҡта, лидерлыҡҡа ынтылыу нәҫелдән күсә икән. Ғалимдар 4 мең кешенең эшенә, үҙен уратып алған кешеләргә мөнәсәбәтен генетик яҡтан тикшереп, лидерлыҡ һәләтен күрһәтеү тенденцияһы менән rs4950 генотибы бәйле булыуы билдәләнгән. Әммә ғалимдар үткәргән тәжрибәләр күрһәтеүенсә, генетика ыңғай тышҡы мөхит тәьҫире менән берләшкәндә генә кеше уңышлы лидер булып китә ала. Тыумыштан кемгәләр лидер позицияһына сығыу һәм унда нығыныу мөмкинлеге бөтөнләй бирелмәһә лә, лидерлыҡ сифатының бер өлөшөн тәрбиәләп була, ти ғалимдар.

■ Майами университеты (АҠШ) хеҙмәткәрҙәре раҫлауынса, насар хәбәрҙәрҙән кешеләр артыҡ ауырлыҡ йыя башлай. Бәхтиһән, негатив мәғлүмәт ишеткәндән һуң, кеше, үҙе лә һиҙмәҫтән, борсолоу тойғолары кисерә һәм юғары калориялы продукттар ҡуллана башлай, сөнки стресс ҡорбанына әүерелә. Былдайҙар насар яңылыҡтарға иҫе лә китмәүселәргә ҡарағанда көнөнә 40 процентҡа күберәк ашай икән. Тикшеренеүҙәр Америкала президент һайлауҙары тамамланған осорҙа үткәрелгән. Президент кампанияһы мәлендә иҡтисад насарайыуы, сәйәси хаталар тураһында күберәк һөйләнә. "Был мәғлүмәттәр кешеләрҙе күберәк калория ҡулланырға мәжбүр итә, сөнки уларҙа эволюцияның миллион йылдары эсендә барлыҡҡа килгән инстинкт уяна. Улар "мәлен файҙаланып, туйғансы ашап ҡал" тигән принципҡа эйәрә һәм калориялы аҙыҡты ауыр көндәр өсөн "запас"ҡа тинләй. Шуға ла кем артыҡ ауырлығынан ҡотолорға теләй, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барығыҙ һәм насар яңылыҡтар тыңламағыҙ", - тип билдәләй профессор Джулиано Ларан.

■ Ҡытай ғалимдары раҫлауынса, нәркәс, ала миләүшә, зәғфәрән, крокус һәм умырзаялар баш мейеһе эшмәкәрлегенә ыңғай тәьҫир яһай. Мәҫәлән, умырзая Альцгеймер ауырыуы ваҡытында мейе эшмәкәрлеген яҡшырта, тип яҙа "МедВести". Умырзая составындағы галантамин арҡаһында нейрондарҙан килгән мәғлүмәт әүҙемерәк тапшырыла, ул үҙ сиратында ауырыуҙың аҡыл функцияһына ыңғай йоғонто яһай. Нәркәстә лә был матдә бар, хәҙерге ваҡытта ғалимдар был ике үҫемлекте онкологик ауырыуҙарҙы дауалауҙа ҡулланыу мөмкинлеген тикшерә. Сидней университетының (Австралия) ғалимдарына зәғферәндең күреү ағзаларының һығылмалы күҙәнәктәренә ыңғай тәьҫирен өйрәнгән. Крокустарҙа иһә колхицин тигән матдә бар. Ул яман шешкә һәм ялҡынһыныуға ҡаршы тороу сифатына эйә. Ала миләүшә тынысландыра, хәүеф тойғоһон юҡҡа сығара, йоҡоһоҙлоҡтан ҡотҡара.

■ Ғалимдар киҙеүҙән ярҙам итеүсе тундырма уйлап тапҡандар. Ул бал, имбир, әфлисун һәм лимон һутынан эшләнә. Икенсе вариантында бурбона һәм кайен боросо ҡушыла. Етештереүселәр раҫлауынса, был тундырма инфекцияларҙан ярҙам итә, тамаҡ ауырыуын бөтөрә. Тундырмала шулай уҡ ауыртҡан тамаҡты тынысландырыусы пектин да бар.

БЫЛ ДА ҠЫҘЫҠ!

**Бер нисә йыл элек өлкә гәзиттәребеҙҙең береһендә "һыуһылыуҙар" хаҡында бик ҡыҙыҡлы бер мәҡәлә баҫылып сыҡҡайны. Татарстандың Яр Саллы ҡалаһы янындағы бер йылғала Һыуһылыу бар имеш, хәйер бирмәйенсә һыу инергә төшкән кешене төпкә һөйрәп алып китә икән, тигән хәбәрҙе авторға шул яҡтарҙа йәшәгән бер ағай һөйләгән... Ҡасандыр енәйәтселәр тарафынан үлтерелеп, кәүҙәһе йылғаға ташланған бер һылыу ҡыҙҙың балыҡ ҡойроҡло шәүләһе әленән-әле һыу буйындағы ял итеүселәргә күренеп ҡалғылай, башлыса, иҫерек килеш һыуға төшкән ирҙәргә "һөжүм итә" икән. Шуға күрә, кешеләр башта ундағы мәсеткә инеп, был ҡыҙҙың рухына хәйер биреп, шунан һуң ғына һыу инә башлай, имеш. "...Был йылғала йыл һайын тиерлек төрлө сәбәп менән батып үлгән ирҙәрҙең кәүҙәләрен табып торалар. Уларға ла шул мәрхәмәтһеҙ әҙәмдәр ҡулынан һәләк булған ҡыҙҙың йәне сәбәпсе түгелме икән?" тигән һорау менән тамамлана шул мәҡәлә.**

# ИМЕШ-МИМЕШТӘР НИСЕК ТЫУА,
## йәғни, Һыуһылыуҙар тураһында



### Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) тыйған...

Һәр төрлө сәйер күренештәр хаҡында мин дә үҙ фекеремде белдермәк булдым. Миненсә, ана шуның һымаҡ хәлдәрҙең сәбәбен уйхистәргә, фараздарға артыҡ бирелмәй, дөрөҫ кенә итеп аңларға тырышырға кәрәк. Башта уға динебеҙ күҙлегенән сығып ҡарайыҡ. Үлгән кешеләрҙең йәндәре осоп йөрөй, хатта өҫтән беҙҙе күреп торалар, тигән һымаҡ хәбәрҙәрҙе минең дә ишеткеләгәнем бар ул. Әммә былар барыһы ла - уйҙырма, йәғни, буш һүҙ. Үлгәндәрҙең йәне бер ҡасан да был донъяға килеп, өҫтәүенә, башҡаларға күренеп йөрөмәй. Ошо һүҙҙәремде мәҙрәсәлә уҡып белем алған һәммә хәҙрәт раҫлар. Был донъянан киткәндәрҙең барыһының да йәне бәрзәхтә (ҡәбер менән Ҡиәмәт көнө аралығында) була. Ябай тел менән әйткәндә, үлгән кешенең йәненең "үҙ ҡайғыһы". Тере кешеләргә ул зыян да, файҙа ла эшләй алмай. Шундай-бындай хөрәфәттәргә ышаныу динебеҙҙә лә тыйыла ("хөрәфәт" ғ. - небылица). Ә ендәрҙең башҡаларҙың күҙенә ниндәйҙер ҡиәфәткә инеп (хатта әлеге үлгән кешенең төҫөн алып) күренеү ихтималлығы юҡ түгел. Ен, шайтандар - хөрәфәткә һаналмай, уларҙың Ер йөҙөндә барлығы хаҡында Ҡөрьән аяттары, Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) хәҙистәре бихисап. Бик һирәк кенә булһа ла әҙәм балаһының күҙенә лә күренеүсән улар. Һәр саҡ инсандарҙы юлдан яҙҙырырға әҙер йөрөүсе шайтандар хатта үәсүәсә ҡылып (урыҫса - нашептывать), ниндәйҙер мәғлүмәтте кешенең аңына һеңдерергә лә һәләтле. Ошо хаҡта ла Бәйғәмбәребеҙҙең (с.ғ.с.) хәҙистәре бар. Әлеге мәҡәләлә һөйләнгән "төп героиня" - һыу инеһе лә тап ана шул шайтан ғәләмәте булһа кәрәк.

### Күп эскәндәр һыуға бата...

Икенсенән, үҙ-үҙебеҙгә тағы шундай һорау бирәйек әле: ни өсөн әлеге һыуһылыу башлыса "иҫерек кешеләргә батыра"? Мин табип булараҡ аңлатайым быны. Тәндәге ҡан тамырҙары алкоголь тәьҫиренән киңәйеүсән була, ә һалҡын һыу, кире-

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘЙ

# ЯҢЫ ҮҪЕШ МАЙҘАНСЫҒЫ



**Өфө фән һәм технология университетының башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетында яңы уҡыу проекты - "Медиастарт" журналистика мәктәбе эш башлаһа.**

Журналистика кафедраһының өлкән уҡытыусыһы, тәжрибәле тележурналист һәм продюсер Рөстәм Ғәббәсов етәкләгән проект йәштәрҙе журналистикаға йәлеп итеү, уларға заманса медиамөхит шарттарында эшләү нигеҙҙәрен өйрәтеү маҡсатын күҙҙә тота. Университет ректоры Вадим Захаров та проекттың ижади һәм әүҙем йәштәрҙе журналистика өлкәһенә ылыҡтырыу юҫығындағы мөһимлеген билдәләне һәм: "Медиастарт" буласаҡ журналистар өсөн үҙ һәләттәрен үҫтереү, тейешле белем алыу һәм мәғлүмәт киңлеген тәрәнерәк аңлау мөмкинлектәрен бирә аласаҡ. Был мәктәп студенттарға заманса уҡытыу ысулдарына, киң йүнәлешле курстарға һәм уникаль практик сараларға юл асыр, тип ышанам. Ул юғары квалификациялы белгестәр әҙерләүгә генә түгел, ә йәмғиәттә аңлы һәм яуаплы медиамөхит булдырыуға ла булышлыҡ итәсәк", - тине.

Рөстәм Ғәббәсов әйтеүенсә, "Медиастарт" үҫеш өсөн яңы майҙансыҡ буласаҡ. Дәрестәр айына 3 тапҡыр үткәреләсәк, һәм уларҙа Өфө университеты студенттары ғына түгел, мәктәп һәм колледж уҡыусылары ла ҡатнаша ала. "Беҙ студенттарҙың билдәле журналистар менән аралашыу мөмкинлеге булыуын ныҡ теләйбеҙ. Ошо маҡсаттан киң мәғлүмәт саралары редакцияларына, телеканалдарға, радиостанцияларға экскурсиялар, төрлө мастер-кластар, тренингтар һәм семинарҙар ойоштороласаҡ. Шулай уҡ йәштәр медиапроекттарын үҫтереү өсөн эксперттарҙан кәңәштәр алыу мөмкинлеге булдырыласаҡ, төрлө конкурстарҙа ҡатнашыу өсөн консультация ярҙамы күрһәтеләсәк", - тип билдәләне проект етәксеһе.

2-се "СМАРТ" Республика полилингваль күп профилле гимназияһының СМАРТ-ТВ телестудияһы вәкилдәре сығышы сараның әһәмиәтле бер өлөшө булды. Улар үҙҙәренең тәжрибәһе менән уртаҡлашып, мәктәп медиапроекттарының үҫеш мөмкинлектәрен асып бирҙе.

- Журналистика - ул һөнәр генә түгел, ниндәйҙер кимәлдә күңел талабы ла. Беҙҙең мәктәп идеялар, ҡыйыу башланғыстар һәм аныҡ факттар лабораторияһы булыр, тип ышанам. Бөтә уҡытыусыларға һәм студенттарға был мөһим эштә уңыштар теләйем. Әйҙәгеҙ, бергәләп йәмғиәтебеҙҙең яҡты киләсәгенә сифатлы журналистика аша аҙым яһайыҡ, - тине мәктәпте асыу тантанаһында башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты деканы Гөлфирә Абдуллина.

**Рәзил ШӘМСЕТДИНОВ әҙерләне.**

һенсә, тамыр стенкаларын тартылдырып, тарайыуға килтерә. Бына шул мәл эскән килеш һыуға төшкән кешенең ҡан әйләнеше системаһы эшмәкәрлегендә "дисгармония" барлыҡҡа килә, йәғни, капиллярҙар тәртипһеҙ рәүештә тарая һәм киңәйә башлай. Тән буйлатып ҡанды йөрөтөүсе "насос" вазифаһын башҡарған йөрәкте лә тап ана шул ҡан тамырҙарының иң баш бер өлөшө тип ҡарау кәрәк. Киңәйтеүсе һәм тарайтыусы булған ҡапма-ҡаршы ике факторҙың бер юлы тәьҫир итеүе йөрәк мускулатураһы епсәләренең дә тартылыу ритмын боҙа. Шул сәбәпле, ғүмер буйы ялһыҙ эшләп торған был ағзаның кинәт кенә... "мәңгелек ялға" китеүе ихтимал. Һыуға иҫерек килеш төшкән кешенең әлеге Мәлекәс йылғаһында түгел, Димдә, Һаҡмарҙа, Ағиҙелдә, хатта Ҡара диңгеҙҙә лә батыуы ғәжәп түгел. Эскән кешеләрҙең һыуҙа оһондай фажиғәләргә юлығыу осрағының йыш булыуын медицина ғалимдары бына шулай аңлата. Элегерәк мин йәшәгән ҡала ситендәге буыала илле йәштәр тирәһендәге бер ир батып үлде. Хатта уны "батып үлгән" тип әйтеү ҙә килешмәҫ, сөнки ул тәрәңгә лә түгел, тик күкрәгенә ҡәҙәр кенә һыуға төшөп үлгәргән. Шунан, әлеге әйткәндәй, йөрәге туҡтап, һап һай һыуға йығылған.... Ә статистикаға ҡуҙ һалһаҡ, Рәсәйҙә һыуға батып һәләк булған һәр өс кешенең береһе - иҫерек була икән! Эскән килеш һыу буйына барырға яраткандар өсөн был бик етди иҫкәртеү. Бынан тыш, артыҡ күп эсергә яратҡан, айыруса, хроник алкоголизм менән сирләләрҙең күҙенә һәр төрлө галлюцинациялар (имәнес йән эйәләре, шулай уҡ, һылыу ҡыҙҙар ҙа) күренеүе ихтимал.

Өсөнсөнән, кешеләр араһында ниндәйҙер бер хәбәр китһә, берберенә матурлап, бер аҙ "етешмәгән" урындарын өҫтәй биреп һөйләй торғас, ул бик ҡыҙыҡлы хикәйәткә лә әйләнә. Әлеге авторға ла теге ағайҙың шундай яҡшы, оҫта итеп итеп һөйләгәне тойола. Мин элек оҙайлы хәрби хеҙмәттә саҡта беҙҙең гарнизон бассейнында ете-һигеҙ йәштәрҙәге бер ҡыҙ бала батып үлгәйне. Уның тураһында ла шундайыраҡ имеш-мимештәр сығып китте. Йәнәһе лә, төндә, кешеләр таралышып бөткәс, бассейн буйлап әлеге ҡыҙҙың шәүләһе йөрөй икән... Төнө буйы шунда дежурҙа булған һалдаттарҙы шаяртыр, әллә ҡурҡытыр өсөнмөләр, был хәрәфәтте кемдер берәү уйлап сығарған буғай. Ә һалдаттар уны бер ҡасан да күрмәгән!

апаруҡ ҡына ҡыҙып алғас, яңы тыуып килгән таң нурына мансылып, тағы ла матурланып киткән күлдең һалҡына көмөш һыуын сәсрәтә-сәсрәтә, бер килке йөҙөп алыуҙары үҙе ни тора!

Был юлы ла, бер саҡрымдай араны йүгереп үтеп, "һә" тигәнсе һыу буйына килеп тә еттем. Тирәяҡ тып-тын. "Өф" тигән ел дә юҡ. Бар тәбиғәт, йоҡоһонан уянырға теләмәгән сабый кеүек, тынып ҡалған. Таң ҡыҙылына буялған күк йөҙө көҙгө кеүек ялтырап ятҡан һыу өҫтөнә бөтөнләйгә төшкәнме ни! Тик күл уртаһында йөҙөп йөрөгән ике пар ҡыр өйрәге генә һирәк-һаяҡ сумып, түңәрәк түлҡындар яһап, һыу өҫтөн бер аҙ ғына һырландырып ҡуя.

Тәбиғәттең матурлығына хозурлана-хозурлана, күлдәге өйрәктәрҙе ҡурҡытмаҫ өсөн шым ғына сисенеп ташланым да, сирҡаныс алырға аяҡтарҙы һалҡын һыуға тейҙерҙем. Шул саҡ ҡапыл һулдараҡ ҡамыштар яғында еңелсә һыу шаптырҙағандай булды, һәм мин шул яҡҡа боролоп ҡараным. Сеү! Һыу ситендәге ҡамышлыҡҡа нисек быҡаса иғтибар итмәгәнмен? Йөрәгем "табаныма төштө"! Яр ситендә үҫкән күрән, ҡамыш араһында бер аҙ һыу эсенән сығып торған таш өҫтөндә күлгә ҡарап, ысынлап та, бер ҡыҙ ултыра ине. Алтындай һары оҙон сәстәрен инбашына таратып ебәргән. "Идеаль" һынлы, шәп-шәрә был гүзәл зат ике ҡулы менән яңағына таянған килеш хәрәкәтһеҙ, өнһеҙ ултыра бирә. Аяҡтары тубыҡ биләменән һыу эсендә. Ә бәлки... ҡойроғолор? Ҡайһы бер кешеләр араһында шундай-шундай шомло хәбәрҙәр тигенгә генә йөрөмәй икән дә баһа! Ә мин, "теләһә ниндәй юҡ-бар" тип, уларға һис ышанмаған булам...

Күл һыуы тәнемде һалҡынлығы менән өтөп алғандай булды. Ярамаған нәмәгә ҡараған бала кеүек, дер ҡалтырап, үҙем һыуһылыуҙан ҡуҙҙәремде алмайынса, әкрен генә ҡабаттан яр башына сығып, шортымды кейә башланым. Һыу төшөү ҡайғыһы китте, малай! "Нишләп кенә бында килдем икән, - тигән көнгә төштөм, - спортсмен имеш..." Бер-ике секунд эсендә һыу аҫты батшалығы хаҡында бала саҡта ишеткән әллә ниндәй ҡурҡыныс шомло әкиәттәрҙе лә иҫләп алдым. Йөрәгемдең дөп-дөп тибеүе хатта был "әкиәт һылыуҡайына" ла ишетеләлер кеүек тойола.

Ҡалтырана-ҡалтырана шортымдың бер балағын кейеүем булды, теге ҡыҙ миңә табан боролмаһынмы! "Бөттө баш!" мин әйтәм. Ҡуҙғалырлыҡ, йә ниҙер ҡыҙырлыҡ хәл-әмәлем дә юҡ. Яртылаш кейенгән көйө ҡатып ҡалдым: күҙҙәре лә күҙҙәре! Бер ҡарауҙа һәр ир затын ғашиҡ итерлек һылыу йөҙлө шундай сибәркәйҙән дә ҡурҡыр көнөм бар икән! Егеттәргә һөйләһәң, оят! Ҡыйылып киткән ҡаштары аҫтынан осҡон сәсеп торған оҙон керпекле зәңгәр күҙҙәре менән мине баштан-аяҡ һөҙөп ҡарап алды ла был "һыу инәһе", ахырҙа, телгә килде:

- Закурить не найдется, мужчина?

Йөрәгемә шундуҡ йылы йүгерҙе. "Уф-ф-ф-ф!" Минең нисек ирекен итеп тын алғанымды күҙ алдына килтерә алаһығыҙҙыр, моғайын. Ҡыҙҙың һорауына яуап бирергә лә онотоп, йәһәт кенә шортымды кейеп бөттөм. "Әй, үҙебеҙҙең ер һылыуы икән дә баһа", тигән шатлыҡлы уй менән йән фарман өйгә ҡарай һыпырттым.

Ҡайтҡас та ошо мажарамды хәләл ефетемә һөйләп бирә һалдым. "Тағын да күберәк шул күл яғына йөрөй бирһәң, әллә ниндәй бапаҡтарға ла юлығырһың әле, Зәйәтүләк...", - тип уйынлы-ысынлы киҫәтеп ҡуйҙы ҡатыным.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӘКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

### Минең дә күргәнем бар ул!

Ышанаһығыҙмы-юҡмы, әбит һыуһылыуҙы ҡасандыр минең дә күргәнем бар! Хатта шәүлә лә түгел, ә теп-тереһен! Башта иҫкә алған мәҡәләне автор "үҙ ҡолағы менән ишеткән" хәбәргә нигеҙләнеп яҙған булһа, минең үҙ күҙҙәрем менән күргәнем хаҡында һөйләргә ниәтем. Әлеге хәрби хеҙмәт мәлендә булды был хәл. Йәш саҡ. Һәр таң һайын спорт кейемдәремде кейеп алып, сәғәт биштәр тирәһендә хәрби ҡаласыҡ ситендәге Фазанка тигән күл буйында һәлпәнләп кенә йүгереп йөрөргә ярата торғайным. Бер аҙ йүгереп, йоҡо асылып, тәндәр

*Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?*

## ҺӨЙЛӘШЕҮ ҘӘ ДАРЫУ ИКӘН...



**Йыш ҡына өлкән йәштәгеләрҙең күп һөйләү ғәҙәтенән көләргә яраталар, ләкин табибтар, киреһенсә, был күренешкә бик ыңғай ҡарай һәм ҡарттарға, ысынлап та, күп һөйләүҙең файҙаға ғына булыуын раҫлай. Сөнки бөгөнгө көндә хәтер юғалтыуҙы иҫкәртеү өсөн башҡа сара юҡ. Берҙән-бер юл - һөйләргә лә һөйләргә.**

Күп һөйләүсе кешеләр кәм тигәндә өс өҫтөнлөк менән файҙалана ала. Беренсенән, тел менән фекер үҙ-ара ныҡлы бәйләнештә булғанлыҡтан, телмәр мейе әүҙемлеген күтәрә, айыруса шәп һөйләгән саҡта фекер тиҙлеге туранан-тура хәтерҙе яҡшырта. Әҙ һөйләшкән, гөмүмән, һөйләргә яратмаған кешеләрҙең хәтере насарлана.

Икенсенән, күп һөйләү психик сирҙәрҙән һаҡлай, стресты кәметә. Ҡайһы бер өлкәндәр бөтөн уй-хистәрен эсендә тотоусан, һөйләшергә әллә ни яратмай, был уларға үҙ -үҙенә бикләнеүҙән биуылыу тойғоһо, яйһыҙлыҡ килтереп тыуҙыра. Шуға күрә лә өлкәндәргә күберәк аралашырға һәм бер-береһен тыңларға, һәҙөмтәлә үҙҙәрен яҡшыраҡ тойорға мөмкинлек тыуҙырырға кәрәк.

Өсөнсөнән, һөйләшеү шулай уҡ бит мускулатураһын, тамаҡ, тауыш бәйләнештәрен әүҙемләштерергә, үпкәләрҙең күләмен киңәйтергә булышлыҡ итә, йыш ҡына күҙҙәргә һәм ҡолаҡтарға зыян итеүсе баш әйләнеүҙән, ҡолаҡ ҡатылығынан арындыра.

Ҡыҫҡаһы, ҡарт кешегә Альцгеймер сиренән ҡотолоу өсөн әүҙем һөйләшергә, мөмкин тиклем күберәк кеше менән аралашырға кәрәк. Бынан башҡаса дарыу юҡ. Шуның өсөн дә өлкән йәштәгеләр аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла осрашып, 2-3 сәғәт аралаша, фекер алыша алырлыҡ, ыңғай кәйеф, йылмайыу менән стрестан ҡотолорлоҡ берәй дуҫтар төркөмдәре, осрашыу клубтары ойоштороу бик кәрәк.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

### Утыҙ өсөнсө хат "Сәнғәттә кешенеке тураһында"

Ә бына Аввакумдың боярыня Ф.П. Морозова менән хатлашыуында тәрән кеше тойғолары бар - эйе, тап шул, Суриковтың Третьяков галереяһында һаҡланған картинаһында һүрәтләнгән боярыня.

Морозоваға күтәренке һәм сурытып яҙылған хатында Аввакум иң аҙаҡта уны үлеп ҡалған яратҡан кесе улына ҡағылышлы йыуата: "Хәҙер инде һинең тиҫбе менән сабып алырлыҡ һәм атта һыбай китеүен ҡарап ҡалырлыҡ, башынан һыйпарлыҡ кешең юҡ, иҫләйһеңме, нисек була торғайны?" Аҙағында тағы шулай яҙа: "Ярай, етер: боярлыҡ иттең, күктәрҙәге боярлыҡҡа әлегергә кәрәк ине".

Был боярыня Морозова Аввакумға яуап яҙа: "Гонаһтарымды арттырған өсөн һәр яҡлап күнелемдә өйөрмә ҡайнай, ә мин гонаһ эйәһе, сыҙамһыҙ". Нимәгә "сыҙамай" һуң ул? Ул өлкән улына яҡшы хәләл ефет табыу тураһында хәстәрләй. Уныңса, был хәләл ефеткә өс яҡшы сифат кәрәк: ул "тәҡүәле һәм ярлыларҙы һәм юлсыларҙы яратыусан" булырға тейеш. Артабан һорай: "Ҡайҙан алырға икән миңә - байҙанмы, әллә ябай заттанмы? Заты арыуыраҡ булған ҡыҙҙар насарыраҡ, ә яҡшыраҡ ҡыҙҙарҙың заты насарыраҡ". Был күҙәтеү боярыняның аҡылы, боярлыҡ мин-минлеге булмауы тураһында һөйләй.

Боронғо Русҭә тәбиғәттең матурлығын насар аңлағандар, тип уйлау ҡаралғайны. Был фекер Боронғо Русь осорона ҡараған әҫәрҙәрҙә, яңы әҙәбиәттән айырмалы, тәбиғәтте һүрәтләү, пейзаждар булмауға нигеҙләнгәйне. Әммә XVI быуатта митрополит Даниил бына нимә тип яҙа: "Әгәр ял итеп алғың килһә, өйөң алдына сыҡ та, күккә ҡара, кояш, ай, йондоҙҙар, болоттар шундай бейек, шундай түбән генә тора, һәм бына шуларҙа ял ит".

Мин юғары художестволы тип танылған, киң билдәле әҫәрҙәрҙән миҫалдар килтермәйем. Бындай кешелекте сағылдырған, күнелдәргә үтеп инерлек урындар "Һуғыш һәм солох"та, бигерәк тә Ростовтар ғаиләһенә ҡағылышлы өлөштәрендә, йәки Пушкиндың "Капитан ҡыҙы"нда һәм башҡа теләһә ниндәй әҙәби әҫәрҙә шул тиклем күп. Шулар өсөн бер Диккенсты, Тургеневтың "Һунарсы яҙмаларын", Федор Абрамовтың мөғжизәле "Трава-мурава"һын, Булгаковтың "Мастер и Маргарита"һын яратабыҙ түгелме?

Кешелеклелек - һәр ваҡыт әҙәбиәттең иң мөһим күренештәренең береһе булды. Был ябай кеше тойғоларын һәм хәстәрҙәрен эҙләү - мөһим. Улар ҡиммәтле. Бигерәк тә уларҙы хаттарҙа, хәтирәләрҙә, документтарҙа тапһаң, ҡиммәтләләр. Мәҫәлән, төрлө сәбәп табып, Аввакум тотҡонда ултырырға тейеш булған Пустозерсктағы баструкты төҙөүҙән ҡасып маташҡан ябай крәҫтиәндәр тураһында бер нисә документ бар. Улар бөтәһе лә бергә ҡырҡа риза булмаған! Уларҙың хәйләләре - балаларсараҡ булһа ла, уларҙың ябай һәм яҡшы кешеләр булыуын дәлилләй.

### Утыҙ дүртенсе хат "Урыҫ тәбиғәте тураһында"

Тәбиғәттең үҙ мәҙәниәте бар. Тәртипһеҙлек уның тәбиғи торошо түгел. Киреһенсә, (әгәр ул булһа), тәбиғәттең бындай торошо уның асылына ҡаршы килә.

Тәбиғәттең мәҙәниәте нимәлә сағыла һуң? Тере тәбиғәт тураһында һөйләшәйек. Тәү сиратта ул йәмғиәт, берләшмә менән йәшәй. "Үҫемлек ассоциациялары" бар: ағастар тырым-тырағай аралаш үҫмәй, ә билдәле бер төрҙәре икенселәре менән тап килеп үҫә, әммә бөтәһе менән дә түгел. Ҡарағайҙарҙың күршеһендә, мәҫәлән, айырым бер лишайҙар, мүктәр, бәшмәктәр, ҡыуаҡтар һ.б. була. Быны һәр бәшмәксе белә.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



### 31 МАРТА
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.30 "АнтиФейк". [16+]
14.15, 16.35, 17.15, 22.40 Информационный канал. [16+]
14.50 "Давай поженимся!" [16+]
15.45 "Мужское / Женское". [16+]
19.35 "30 лет вместе". "Игры, в которые играют люди". [12+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера года. "Любовь Советского Союза". [16+]
23.45 "30 лет вместе". "Магия кино". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 20.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.00, 3.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Дама с собачкой". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 20.00, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Д/ф "Тауба". [12+]**
**8.30 "100 имён Башкортостана". [12+]**
**9.30 Д/ф "Легенды об Акмулле". [12+]**
**10.00 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 21.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**12.15 Легенды Урала. [12+]**
**13.00 Спектакль "Провидец". [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [12+]**
**16.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**16.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.20 Хоккей. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ. Плей-офф. 1/4 конференции "Восток". 3 матч.**
**20.30 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.45 Все песни о прекрасном. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00, 4.30 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Т/с "Соседи". [16+]**
**1.00 Бәхет иле. [12+]**
**2.30 Спектакль "Среда, среда". [12+]**
**5.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

### 1 АПРЕЛЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 14.15, 16.35, 17.15, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.30 "АнтиФейк". [16+]
14.50 "Давай поженимся!" [16+]
15.45 "Мужское / Женское". [16+]
19.30 "30 лет вместе". "Магия кино". [12+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера года. "Любовь Советского Союза". [16+]
23.45 "30 лет вместе". "История специальных проектов". [12+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.00, 3.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Дама с собачкой". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Асыш. [6+]**
**23.00 Подкаст с Лобановой Светланой. [12+]**
**0.00 Т/с "Соседи". [16+]**
**2.30 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**4.30 Башҡорттар. [6+]**

### 2 АПРЕЛЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 14.15, 16.35, 17.15, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.30 "АнтиФейк". [16+]
14.50 "Давай поженимся!" [16+]
15.45 "Мужское / Женское". [16+]
19.30 "30 лет вместе". "История специальных проектов". [12+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера года. "Любовь Советского Союза". [16+]
23.45 "30 лет вместе". "Больше, чем спорт". [12+]
1.15, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.00, 3.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Дама с собачкой". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 20.00, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**16.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.20 Хоккей. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ. Плей-офф. 1/4 конференции "Восток". 4 матч.**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Байыҡ. [12+]**
**0.00 Т/с "Соседи". [16+]**
**2.30 Спектакль "Муж и жена одна сатана". [12+]**
**4.00 Телецентр. [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

### 3 АПРЕЛЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 14.15, 16.35, 17.15, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.30 "АнтиФейк". [16+]
14.50 "Давай поженимся!" [16+]
15.45 "Мужское / Женское". [16+]
19.25 "30 лет вместе". "Больше, чем спорт". [12+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера года. "Любовь Советского Союза". [16+]
23.40 "30 лет вместе". "Игры, в которые играют люди". [12+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.00, 3.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Дама с собачкой". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 Д/ф "Слышать голос". [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Соседи". [16+]**
**2.30 Спектакль "Таштугай". [12+]**

### 4 АПРЕЛЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 13.25, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
12.55 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Х/ф "Ночной Дозор". Классика Первого". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! Хором! [12+]
0.05 "Истории Большой Страны". [12+]
1.05 Х/ф "Идеальный пациент". [12+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.30 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**20.30 Мегасело. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**0.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**0.30 Т/с "Соседи". [16+]**
**3.00 Спектакль "Мелодии весны". [12+]**
**4.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

### 5 АПРЕЛЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.10 Премьера. "30 лет вместе". "Песни о главном". [12+]
11.50, 12.25 "Поле чудес". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.30 Спецпроект. "30 лет вместе". "Голос". [12+]
15.40 Спецпроект. "30 лет вместе". "Что? Где? Когда?". [12+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "30 лет вместе". "Магия кино". [12+]
19.50, 21.35 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
23.00 Х/ф "Дневной Дозор". Классика Первого". [16+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Горное солнце". [16+]
0.40 Х/ф "Кровная месть". [12+]
3.58 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Мегасело. [12+]**
**8.30 Хазина. [6+]**
**9.00, 5.00, 5.15 Весело живём. [12+]**
**9.15 Ҡурай даны. [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Преград. Net. [6+]**
**11.30 Лит-ра. [6+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30, 4.00 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Все песни о прекрасном. [12+]**
**19.00 Легенды Урала. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Байыҡ. [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома.**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**0.30 ГАСО РБ С. Рахманинов - Симфония №2. [12+]**
**2.15 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]**
**5.30 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

### 6 АПРЕЛЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т-Банк. "Открытие Байкала". Первые в истории соревнования по фигурному катанию на льду Байкала. [0+]
14.30 Спецпроект. "30 лет вместе". "Фабрика звёзд". [12+]
16.20 "30 лет вместе". "Больше, чем спорт". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
22.50 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия. [16+]
0.00 Х/ф "Высоцкий. Спасибо, что живой". Классика Первого". [16+]
2.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.30, 2.30 Х/ф "Будущее совершенное". [16+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00, 1.35 Д/ф "Голгофа Патриарха Тихона". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Аншлаг и Компания". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.15 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15, 18.45 Легенды Урала. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 Весело живём. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Асыш. [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**11.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**12.00 Созвездие талантов. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**13.15 Дорога к храму. [6+]**
**13.45 Дарю песню. [12+]**
**14.50 Хоккей. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ. Плей-офф. 1/4 конференции "Восток". 5 матч.**
**17.30 Д/ф "Виктор Козлов. 5:0". [12+]**
**18.00 Честно говоря. [12+]**
**19.15 Әлләсе… [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Расуля Карабулатова. [12+]**
**1.00 Спектакль "Великий обольститель". [12+]**
**3.15 Колесо времени. [12+]**
**4.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**4.45 Башкирские каникулы. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ
*1446 һижри йыл.*

| Март - Апрель (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 31 (2) дүшәмбе | 4:59 | 6:51 | 13:30 | 17:43 | 19:51 | 21:43 |
| 1 (3) шишәмбе | 4:56 | 6:48 | 13:30 | 17:45 | 19:53 | 21:46 |
| 2 (4) шаршамбы | 4:53 | 6:46 | 13:30 | 17:46 | 19:55 | 21:48 |
| 3 (5) кесе йома | 4:49 | 6:43 | 13:30 | 17:47 | 19:57 | 21:51 |
| 4 (6) йома | 4:46 | 6:41 | 13:30 | 17:49 | 19:59 | 21:54 |
| 5 (7) шәмбе | 4:42 | 6:38 | 13:30 | 17:50 | 20:01 | 21:57 |
| 6 (8) йәкшәмбе | 4:39 | 6:36 | 13:30 | 17:52 | 20:03 | 22:00 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# КӘСЕПЛЕ БУЛҺЫН ҠАТЫН-ҠЫҘ



**Ошо көндәрҙә Йылайыр ағинәйҙәре район мәҙәниәт йортонда яулыҡҡа арналған тағы бер матур сара үткәрҙе. Унда Йылайыр, Матрай, Юлдыбай, Ҡашҡар, Байғужа, Яманһаҙ ауылдарының ҡул оҫталары ҡатнашты.**

Мәҙәниәт йорто халыҡ менән шығырым тулы булды. Юлдыбайҙан беҙ дүрт ағинәй барғайныҡ. Күргәҙмәгә өләсәйҙәрҙән ҡалған ҡомартҡыларҙы - ҡара кәшемир шәлдәр, сәсәкле шәлдәр, һандыҡ төптәрендә һаҡланған яулыҡтарҙы ҡуйҙыҡ. Әгинәйебеҙ Ғәлимә Айыткolова өләсәһенең яулыҡты боронғоса ябынып төшкән фотоһүрәттәрен, шулай уҡ өләсәһенең түшелдерегең күргәҙмәгә сығарҙы. Һараусы һәм таҫтар эшләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙек. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының боронғо был милли кейем элементтарын районда тәү башлап беҙ эшләй башлағайныҡ. Маңғайҙы ҡаплаусы һараус тукымаға ҡыҙыл, шулай уҡ күрән төҫтәге кизе ептәр менән орнамент сигеп эшләнә. Атамаһы, моғайын, "һырлау" һүҙенән алынғандыр. Ә таҫтарҙы иһә оҙонлоғо 3 метрлыҡ асыҡ төҫтәге киндер йәки кизе-мамыҡ тукыманан тегәләр. Уны олораҡ йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар кейә. Баш тирәләй ике ҡат уратып, бер осон арҡаға, икенсеһен алға төшөрөп ябыналар. Таҫтар менән һарауысты сиккәндә төйөн ҡалдырмай ике яғын да бер иш итеп эшләйбеҙ. Быңдай алым оҫталыҡтың бер билдәһе һанала. Беҙ шул оҫталыҡ менән уртаҡлашып, ҡыҙыҡһыныусы ҡатын-ҡыҙҙарҙы шатландырҙыҡ. Хәҙер беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар ошо өләсәйҙәр кәсептәренә ылыға, күңел һала, шуның өсөн тәжрибәле ағинәйҙәрҙең өйрәткәндәрен, оҫталыҡ дәрестәрен ихлас ҡабул итә.

Баһалама ағзалары ағинәйҙәр алып килгән һәм күргәҙмәгә ҡуйылған эштәрҙе "Тарихлы шәлдәр", "Ажурлы шәлдәр һәм башлыҡтар", "Креатив яулыҡтар", "Ҡатын-ҡыҙ тормошон биҙәгән яулыҡтар" номинацияларында баһаланы. "Ғаилә ҡомартҡыһы" тип аталған фотокүргәҙмә айырым билдәләнде. Беҙҙең Юлдыбай ауылы ағинәйҙәре командаһы тергеҙелгән боронғо яулыҡ өсөн 1-се урын алды, ә дөйөм күргәҙмә буйынса 3-сө урынға сыҡтыҡ.

Юлдыбай ҡатын-ҡыҙҙары ҡул эштәренә ныҡ маһир ул. Дебет шәлдәр бәйләйбеҙ, һуғабыҙ, ҡорамыш ҡорабыҙ. Шуға ла күргәҙмәлә ҡатнашыу, унда үҙ оҫталығыбыҙҙы күрһәтеү бер ниндәй көсөргәнеш талап итмәне беҙҙән. Сара шул тиклем сағыу һәм йылы мөхиттә үтте.

**Мәғзирә ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА.**
**Йылайыр районы**
**Юлдыбай ауылы.**

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# УЯНДЫЛАР!

## Талпандар һәм...



**Башҡортостанда талпандар уянды. БР буйынса Роспотребнадзор етәксеһе Анна Казак был бөжәктәрҙең ауырыу тыуҙырыу ихтималлығы ҙур булған республика районларын атаны. "Дүрт районда талпандан тешләнеп ауырыу ихтималлығы юғары һәм ул биләмәләрҙе ныҡлы эшкәртеү кәрәк. Улар - Ҡыйғы, Учалы, Бөрйән һәм Ҡариҙел районлары", - тине ул.**

"Өфөлә "Өфө муйынсағы" һәм башҡа парктар әүҙем төҙөкләндерелә, уларҙы эшкәртеүгә айырыуса иғтибар бүлергә кәрәк. Өфө биләмәһен талпандан эшкәртеүгә 4 миллион һум аҡса бүленгән, хәҙер шул эште һөҙөмтәле атҡарыу хәстәрен күреү мөһим", - тип билдәләне Анна Казак һәм талпандан эшкәртелә торған парктар реестрын төҙөүҙе тәҡдимен индерҙе.

Роспотребнадзорҙа шулай уҡ Гигиена һәм эпидемиология үҙәге лабораторияларының адрестарын иҫкә төшөрҙөләр.

Табиптар талпанды алғас (үҙ аллы йәки травма пунктында), таҙа быяла банкаға һалырға һәм бөжәктең энцефалит һәм боррелиоз менән зарарланыуын тикшергән лабораторияларға алып барырға кәңәш итә. Әгәр был раҫланһа, кесе дауаланырға тейеш.

**Өфө ҡалаһы**, Шәфиев урамы, 7 (дүшәмбе-йома 9-ҙан 16-ға тиклем, тәнәфес 13.00-13.30, шәмбе-йәкшәмбе - ял көнө).

**Стәрлетамаҡ**, Революция урамы, 2а (дүшәмбе-шәмбе 9-ҙан 16-ға тиклем, тәнәфес 13.00-13.30, йәкшәмбе - ял).

**Нефтекама**, Социалистик урамы, 10 (дүшәмбе-шәмбе 8-ҙән 16-ға тиклем, тәнәфес 13.00-14.00, йәкшәмбе - ял).

**Туймазы**, Урмансы Морозов урамы, 1 (дүшәмбе-йома 9-ҙан 17-гә тиклем, тәнәфес 13.00-14.00, шәмбе 9-ҙан 11-гә тиклем, йәкшәмбе - ял).

**Бөрө**, Калинин урамы, 18 (дүшәмбе-шәмбе 8-ҙән 16-ға тиклем, тәнәфес 13.00-14.00, йәкшәмбе - ял).

**Мәсәғүт**, Дауахана урамы, 4 (дүшәмбе-шәмбе 8-ҙән 16-ға тиклем, тәнәфес 13.00-14.00, йәкшәмбе - ял).

**Күмертау**, Ғафури урамы, 29 (дүшәмбе-йома 9-16-ға тиклем, тәнәфес 13.00-14.00, шәмбе-йәкшәмбе - ял көнө).

Быйыр тәүге мөрәжәғәт 4 апрелдә теркәлгән. Ошо көндән алып октябрь уртаһына тиклем лабораториялар 10 меңдән ашыу талпанды тикшерҙе. Талпан иң күбе Башҡортостанда йәшәүселәрҙе "тәбиғәттә" тешләгән, 2-се урында - баҡса һәм дача участкалары, 3-сө урында - зыяраттар һәм тораҡ пункттар.

## ...айыуҙар



**Һуңғы ваҡытта Башҡортостанда айыуҙарҙың кешегә һөжүм итеү осраҡтары йышайҙы.**

Тәүге ваҡиға 21 мартта Баймаҡ районының 2-се Этҡол ауылынан 7 саҡрым алыҫлыҡта булғайны. Таыштабан һөжүменән зыян күргән 62 йәшлек ир үҙ аяҡтарында район дауаханаһына килә. Уға операция яһайҙар, әлеге ваҡытта ул реанимацияла ята.

Бөгөн йыртҡысты атып алыуға рөхсәт бирелгән. Баймаҡта 10 һунарсынан торған төркөм эшләй, тип хәбәр иттеләр республиканың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығынан.

Икенсе осраҡ Бөрйән районында теркәлде. 22 мартта айыу тырнағына эләккән 57 йәшлек ирҙе район дауаханаһына килтерәләр. Табиптар уға шулай уҡ операция яһай, пациенттың хәле тотороҡло ауыр тип баһалана. Асыҡланыуынса, Яңы Усман ауылы уҙаманы йыртҡысҡа урманда ҡайын һуты йыйып йөрөгәндә тап булған.

- Ул айыуҙан ҡасырға маташҡан. 3 литрлыҡ банкаһы ярылғас, тайыштабан тауыштан ҡурҡып сигенгән, - тип һөйләне Байғаҙы ауыл биләмәһе хакимиәте хеҙмәткәрҙәре.

БР тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры урынбаҫары Камил Бәрғүлиев йыртҡыстарҙың ваҡытынан алда уяныуы, уларҙың агрессив булыуы хаҡында һөйләне. "Яландарҙа, урмандарҙа ҡар ҡалманы. Кешеләр иркенләп урманға йөрөй башланы. Ҡайны берәүҙәр мышы мөгөҙө эҙләй, кемдер ҡайын һуты йыя. Әлеге ике осраҡта ла ирҙәр урманға яңғыҙ барған һәм үҙҙәре лә белмәйенсә айыуҙар янына барып сыҡҡан. Йыртҡыстар уларҙың яҡынлашыуын ишетмәй һәм һөжүм итә. Хәҙер иң мөһиме - зыян күреүселәрҙең тиҙерәк һауығыуы", - тип белдерҙе Камил Бәрғүлиев.

БР һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин айыу һөжүменән зыян күргән ирҙәрҙең хәле тураһында хәбәр итте. Зыян күреүселәрҙең икеһе лә реанимацияла. Тәүге пациент - 62 йәшлек ир ауыр хәлдә. Бөрйән районында йәшәүсенең хәле уртаса.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

**М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры**

**28 март "Мөхәббәт ҡоштары"** (И.Йомағолов, Ф.Ғарипов), музыкаль комедия. 16+

**29 март "Килен"** (З.Мусина, Ф.Ғарипов, инсц. З.Бураҡаева), драма. 16+

**30 март** һәм **1 апрель "Ҡара йөҙҙәр"** (М.Ғафури, А.Абушахманов, инсц. Ш.Ғилманова), драма. 16+

**2 апрель "Балам"** (В. Емелева, И. Мөхәтдинов), спектакль-терапия. 16+

**3 апрель "Әсмә"** (Р.Фәхретдинов, Ш.Шәкүрова, инсц. З. Сөләймәнов). 12+

**М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры**

**28 март "Ҡара һыуҙар"** (М.Кәрим, И. Ҡаҙаҡбаев), төш аралаш өн. 12+

**29 март "Синяя-синяя речка"** (Б. Вахтин, М. Күлбаев). 12+

**30 март "Униженные"** (З. Биишева, М. Күлбаев), драма. 12+

**1 апрель "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким, Р. Хәкимов), комедия. 16+

**2 апрель "Брат Чичиков"** (Н.Гоголь, М. Күлбаев), сатирик комедия. 12+

**3 апрель "Дни Савелия"** (Г. Служитель, М. Күлбаев). 12+

**Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры**

**28 март "Ваҡыт аша ғәжәйеп сәйәхәт"** (В. Щербакова). 16:00 һәм 19:00. 12+

**29 март "Доктор Айболит һәм уның дуҫтарының мажаралары"** (К. Чуковский). 12:00 һәм 15:00. 0+

**30 һәм 31 март "Ни өсөн яҙ матур?"** (В. Щербакова).12:00 һәм 15:00. 0+

**2 һәм 3 апрель "Урал Батыр эҙҙәре буйлап"**, интерактив квест. 12:00. 6+

**Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы**

**30 март "От классики до неоклассики"**, Халыҡ-ара театр көнөнә ҡарата Абхаз Республикаһының халыҡ артистары Кристина Эшба (сопрано) һәм Лука Гаделия (орган) концерты. 12+

**Салауат дәүләт башҡорт драма театры**

**1 апрель "Яңынан башлайыҡ"** Алмас һәм Айҙар Юнысовтарҙың концерты. 6+

**3 апрель "Ангелы рядом с нами"** (Г. Янышева), МХО тарихы. 12+

**Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе**

**30 март "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р.Шарт), комедия. 16+

**3 апрель "Күңелемдә моң һәм дәрт, йөрәгемдә - мөхәббәт!"**, Гүзәлиә Татлыбаеваның концерты. 6+

**А. Мөбәрәков исемендәгет Сибай дәүләт башҡорт драма театры**

**28 март "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Минуллин), фантасмагория. 12+

**31 март "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 12+

**Сибай концерт-театр берекмәһе**

**28 март "Араларҙа - йылдар..."** Сибай филармонияһының тәүге ҡарлуғастары концерты. 12+

**БР Милли музейы**

**28 март** Ротангтан кашпо үреү буйынса оҫталыҡ дәресе. 11:00. 12+

**28 март "Музей мафияһы"**, психологик уйын. 19:00. 14+

**29 март "Ғаилә шәмбеһе"** программаһы сиктәрендә ғаилә менән музей буйлап экскурсия. 15:00. 6+

**1 апрель "Бал ҡортонда ҡунаҡта"** сараһы. 15:00. 6+

**2 апрель "Музей шаршамбыһы"** акцияһы сиктәрендә йәш археологтар курсы. 14:00. 5+

**2 апрель "Ямғыр тауышы"** Вячеслав Стрижевскийҙың фото күргәҙмәһенән асыу. 16:00. 12+

**3 апрель "Бысылған ағаста акварель"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 5+

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ШАЯРЫУМЫ?

## Ул уйын эш түгел!

**"Шаян-лига" Башҡорт асыҡ шаяндар һәм отҡорҙар лигаһының йыйылма командаһы 13 мартта Ҡазан ҡалаһында үткән "Әйҙә, шаярт" Татар лигаһы фестиваленән Гран-при менән ҡайтты. Лиганың идара рәйесе Урал КӘРИМОВ һәм лиганың мөхәррире Кәрим ХӨСНУЛЛИН менән әңгәмә ҡорғанда был енеү тураһында ла белештек.**



**Урал, Башҡорт КВН-ының майҙанға сығыуына байтаҡ йылдар бит инде, ул хәҙер ниндәй кимәлдә танылыу яуланы?**

- "Шаян уйын"дан үҫеп сыҡҡан Башҡорт асыҡ шаяндар һәм отҡорҙар лигаһына быйыл ун өс йыл була. Инициатив төркөм 2012 йылдың апрель айында йыйылды һәм ҡабул ителгән ҡарар нигеҙендә сентябрҙә Юстиция министрлығында "Башҡорт асыҡ шаяндар һәм отҡорҙар лигаһы" Башҡортостан Республикаһы төбәк йәмәғәт ойошмаһы булараҡ теркәлде. Лигабыҙ Татарстан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Әзербайжан, Үзбәкстан менән төрки телле шаяндар һәм отҡорҙар лигалары ассоциацияһында тора. Ҡазанда үткән уйындарҙа даими ҡатнашабыҙ, Астананан призлы урын алып ҡайтҡаныбыҙ булды, Ташкент ҡалаһында ла сығыш яһаныҡ.

Республика буйынса юғары лиганың һигеҙ миҙгеле үтте. Бөгөнгө көндә Башҡортостан Башлығы гранттары фонды менән берлектә мәктәп уҡыусылары өсөн "Шаян-лига" уйындары булдырҙыҡ. Командалар дүрт зонаға бүленеп уйнай: Урал аръяғы - үҙәге Сибай ҡалаһында, төньяҡ-көнсығыш - Мәсәгүт, төньяҡ-көнбайыш - Нефтекама, көньяҡ - Ишимбай. Еңеүселәр артабан Өфөлә супер финалда осраша. Быйыл ул, шаяндар һәм отҡорҙар уйынының өсөнсө миҙгеле финалы, 9 апрелдә "Торатау" конгресс-холында үтә.

**Урал, "Әйҙә, шаярт" Татар лигаһы фестивалендә Гран-при яулауығыҙ тураһында ентекләберәк һөйләһәгеҙ ине...**

- Татарстан лигаһы егеттәре менән беҙ яҡын дуҫтарбыҙ. Ун йыллап аралашып йәшәйбеҙ. Төрки халыҡтарының КВН фестивалдәренә бергәләп йөрөйбөҙ. Үткән йылда Татарстандан "Тукай" командаһы беҙҙә тотош бер миҙгел уйнаны һәм финалда икенсе урын алды. Күршеләребеҙҙең "Әйҙә, шаярт" лигаһы миҙгелендә быйыл да ҡатнаштыҡ. Алты кешенән торған командабыҙға, балалар уйындарында утығып, күҙ алдыбыҙҙа үҫкән өмөтлө йәштәр инде. Уларҙы тәжрибәле квнсы Илһам Ишкинин етәкләне. Фестиваль Татар лигаһының яңы миҙгелен асыу сараһы булды. Дөгүәсе 21 команда араһынан Гран-прины беҙ яулаһыҡ, шул рәүешле артабанғы этапҡа күстек. Сирек финал 4 июндә үтә. Әгәр унда ла уңышлы һынау тотһаҡ, артабан - ярымфинал, ә унан инде - финал.

**Кәрим, был турала һин ни әйтерһең?**

- Татар лигаһы уйындарын ойоштороусылар, һеҙҙә дәрт бик көслө, тинеләр. Ысынлап та, беҙ башҡорт рухы, дәрте менән еңеү яуланыҡ.

**20 мартта беренсе тапҡыр колледждар араһында КВН үтте. Быны "Шаян-лига"ның сираттағы үҫеш баҫҡысы, тип әйтеп буламы?**

- Эйе, быйыл тәүге тапҡыр тик урта махсус уҡыу йорттары студенттары ғына ҡатнашҡан "Колледждар кубогы" тип аталған башҡорт КВН-ы фестивале үтте. Республикала 200-ҙән ашыу урта махсус белем биреү уҡыу йорттары бар. Улар өсөн айырым фестиваль ойоштороу уйы әллә ҡасандан тынғы бирмәй ине. Ниһайәт, уны тормошҡа ашырҙыҡ. Сара Башҡортостан Башлығы гранттары фонды ярҙамы менән Башҡорт асыҡ шаяндар һәм отҡорҙар лигаһы һәм Йәштәр сәйәсәте министрлығы тарафынан "Шаян-лига" ижади кластер проекты сиктәрендә үтте. Бөтәһе 15 команда ҡатнашты. Беренсе урынға Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты колледжының "Аҡмулла егеттәре" командаһы сыҡты. Планыбыҙҙа - уйындарға күберәк студент йәштәрен йәлеп итеү, студенттар, колледждар һәм мәктәп уҡыусылары өсөн айырым уйындар үткәреп, командаларҙы юғары лигала осраштырыу, телевидение форматында сығыш яһарлыҡ профессионалдар әҙерләү. Һөҙөмтәгә өлгәшеү өсөн республика буйынса командалар һаны күп булырға тейеш. Бының өсөн йәштәр менән эшләргә, урындарҙа башҡорт КВН-ы хәрәкәтен киң йәйелдерергә кәрәк. Был йәһәттән, мәҫәләң, Ишимбайҙар әүҙемлек күрһәтә. Улар үҙҙәренең айырым КВН лигаһын төҙөнө.

**Кәрим, февралдә һин уйнаған легендар "XX Централ" командаһының юбилей кубогы уҙҙы. Башҡорт КВНы "аҡһаҡалдары" йәшенә еткән командалар тағы бармы?**

- Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһының "XX Централ" командаһы был уйындарҙа 2005 йылдан алып ҡатнаша. Ысынлап та, ул - "аҡһаҡал". Минең үҙемдән дә олораҡ хатта. Команданың егерме йыллығы айҡанлы 25 февралдә Өфөнөң "Атайсал" мәҙәни үҙәгендә юбилей кубогы ойошторҙоҡ. "Аҡһаҡал"дарға килгәндә инде, мин үҙем белгәндәрҙән Республика инженер-лицейынан "Башҡорттар. Нөктә. RU", 136-сы Өфө ҡала Башҡорт лицейынан "Һупайлы дәрүиштәре"н әйтеп китә алам.

**Урал, быйыл Красноусолда "Кышҡы КВН мәктәбе" ойошторҙоғоҙ. Шаяндар һәм тапҡырҙар хәрәкәтенең бар республика райондары һәм ҡалаларында ла таралыуы мөҫалымы был?**

- Эйе, 30 гинуарҙан 2 февралгә тиклем Ғафури районының Красноусол ҡасабаһында мәктәп уҡыусылары өсөн "Кышҡы КВН мәктәбе" ойошторҙоҡ. Унда Ғафури, Дыуан, Ишембай райондарынан, Сибай ҡалаһынан 70 уҡыусы ҡатнашты. Улар ысын КВН мөхитенә сумды. Башҡорт лигаһы әүҙемселәре һәм саҡырылған ҡунаҡтар оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙе. Йәш квнсылар, дүрт командаға бүленеп, көн һайын төрлө конкурстарҙа ҡатнашты, алған белемен сәхнәнән күрһәтте. Балаларҙы оҙатып килгән уҡытыусыларға ла дәрестәр бирҙек. "Кышҡы КВН мәктәбе"ндә алған тәжрибә артабан районлар ҙа КВН уйындары кимәлен күтәрергә булышлыҡ итәсәк. Белем алып ҡайтҡан уҡыусылар хатта үҙҙәре ойоштороусы булып китер, тип ышанабыҙ. Шаяндар һәм отҡорҙар командаһы бөтә райондарҙа ла бар, тип әйтеүе иртәрәк, әммә ләкин беҙ шуға ынтылабыҙ.

**Урал, хәҙер балалар, гөмүмән, рус теленә аралашыуға күсә. Быны туҡтатыу өсөн бер ниндәй ҙә сара юҡ һымаҡ. Ошо шарттарҙа башҡорт КВН-ның әһәмиәте...**

- КВН хәрәкәтендә ҡатнашҡан 13 йыл дәүерендә төрлө хәлдәрҙе күрҙем. Беҙҙең 136-сы лицей командаһында Азат исемле егет булды. Мин белгәндә, 7 кластар тирәһендә, уның башҡортсаһы бик насар ине. КВН-да уйнап шымарҙы ул, хатта текстар яҙып, уҙаллы сығыш яһай башланы. Шаян һәм отҡор булыу өсөн күп белергә кәрәк, тимәк, китаптар, гәзит-журналдар уҡымайынса был мөмкин түгел. Башҡорт КВН-ы баланы, йәштәрҙе туған телдә уҡырға мәжбүр итә, тип әйтер инем. Төптән уйлап ҡараһаң, "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды тормошҡа ашырыуҙа КВН уйындарының әһәмиәте бик ҙур. Шуны муниципалитеттарҙа аңлаһалар, квнсылар хәрәкәтен киң йәйелдереүҙә булышлыҡ итһәләр ине.

**Кәрим, һинең фекерең нисек тел мәсьәләһендә?**

- КВН-да ҡатнашып, балалар туған телдә һөйләшеп кенә ҡалмай, ә фекерләй ҙә башлай. Кемдәрҙер башҡортсаны атай-әсәй һөйләшкән тел тип кенә ҡабул итһә, беҙгә ҡушылып киткәс, кәрәкле мәғлүмәт, яңы темалар эҙләп, туған телдә китаптар уҡый башлайҙар, үҙҙәренә яңы бер донъя асалар.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН.**

### АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АБАЙЛАМАЙ ҺӨЙЛӘГӘН...

## ауырымай үлгән

Ишәк ауырығанын, ир ҡартайғанын белмәҫ

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәхетле осраҡлыҡтар менән йәшәгән кешене бер ваҡытта ла бәхетле тип иҫәпләмә.

**(Луций Сенека).**

Яҙмышҡа мыжыуҙан туҡта, өйөңдән сыҡ һәм тормошто ике ҡуллап ҡосаҡла.

**(Хантер Адамс).**

Был донъяны ҡалдырыр алдынан үҙенең вариҫтарына байлыҡ ҡалдырыусы кеше мәрхәмәтле тип иҫәпләнә алмай - уның бит башҡа сараһы юҡ.

**(Уильям Гладстон).**

Был донъяла үҙҙәренең ниндәй донъяла йәшәгәнен аңламаған кешеләр бик күп.

**(Боб Хоуп).**

Беҙҙең күбебеҙ, ҡояш һәр иртә һайын уның йырын тыңлау өсөн генә ҡалҡа, тип уйлаусы әтәскә оҡшаш.

**(К. Джером).**

Әгәр ҙә һин яуызлыҡҡа юлдаш йә уның өнһөҙ күҙәтеүсеһе булғанһың икән, ундай тормош өсөн үкенмәһәң дә була.

**(Луи Сент-Жюст).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер шаман өс һеңлеһе менән юл буйлап китеп барһа, ҡаршыларына шул замандың мәшһүр һуғышсыһы осрай.**

**- Һинең һеңлеләреңдең береһенә өйләнергә теләр инем, - ти ул шаманға хөрмәт менән баш эйеп.**

**- Юҡ, - ти шаман, - һеңлеләремдең береһе кейәүгә сыҡһа, ҡалған икеүһе мәхрүм буласаҡ. Шуға ла мин бер иргә өс ҡатын алырға рөхсәт ителгән ҡәбиләне эҙләйем...**

**Шаман бөтә Австралия ҡитғаһын урап сыға, әммә ирҙәргә өс ҡатын алырға рөхсәт ителгән ҡәбиләне таба алмай. Шулай ғүмерҙәре заяға үтә уның һеңлеләренең.**

**Бер саҡ шаман ҡартайып, атлап йөрөй алмаҫлыҡ хәлгә килгән һеңлеләренең:**

**- Ә бит беҙҙең беребеҙ булһа ла бәхеткә өлгәшә ала ине, - тип үкенес белдергәнен ишетеп ҡала һәм:**

**- Эйе, мин ул саҡта хаҡлы булмағанмын. Ә хәҙер һуң инде... - тип, һеңлеләренән ғәфү үтенә.**

**Шунан шаман һеңлеләрен таш һынға әйләндерә. Таш һындар янынан үткән кешеләр, бер кешенең бәхете башҡалар бәхетһеҙ була икәнде аңлатмай әле, тигән хәҡиҡәтте аңлаһын өсөн эшләй ул быны..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25012

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 27 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 2857
Заказ - 592